ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 август (урағай) 2017
№31 (761)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡурсаулыҡтар ҡурсалар өсөн -**
быны хатта ҡырағай йәнлектәр ҙә белә булыр



3

**Эшләгәнең - минең өсөн...**
өйрәнгәнең - үҙең өсөн



6

**Мөғәллимлек -**
мәғрифәтсе олатайҙарым аманаты



7

**Көмөшкәсе монологы**



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Август аҙағына тиклем 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 518 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 463 һум 08 тингә яҙыла алаһығыҙ. Июль-августа гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

КӨНАУАЗ

## Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһе алдынан тағы бер тапҡыр башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың нигеҙле дәлилдәре тураһында һөйләшеп алайыҡ әле...

***Лена СӨЛӘЙМӘНОВА, тарих фәндәре докторы, профессор:***
Беҙҙә элек-электән башҡорт мәктәбен мәҙрәсәләргә генә бәйләгән ҡараш йәшәп килә. Әммә ғәмәлдә башҡорт милли донъяуи мәктәбе 19-сы быуаттың икенсе яртыһында уҡ була һәм быйыл уға 150 йыл тула. Хатта Земство вәкилдәре 1867 йылда Ырымбур губернаһының Иманғол ауылында асылған беренсе башҡорт мәктәбен Рәсәйҙең көнсығышындағы иң боронғо рус-башҡорт мәктәбе тип теркәп ҡалдырған.

Ни өсөн был фактҡа иғтибар йүнәлтәм, сөнки башҡорт мәктәбенең барлыҡҡа килеүе - ул кемдеңдер фантазияһы, уйҙырма модель түгел, ә ижтимағи-тарихи үҫеш һөҙөмтәһе. Сөнки мәғариф - ул оҙайлы процесс һәм ул белем, мәғлүмәт, мәғрифәт кенә түгел, ә шәхестең, уның рухи-әхлаҡи потенциалының формалашыуы. Барыбыҙ ҙа туған тел, милли мәҙәниәт аша быуындар бәйләнеше барлыҡҡа килгәнен белә, сөнки тамырҙарыбыҙ рухиәтебеҙҙе һуғарып тора. Тарихыбыҙ - боронғолоҡ ҡына түгел, ә бөгөнгө баҙар мөнәсәбәттәренә, үҫешкә яраҡлаштырып файҙаланырға мөмкин булған ҙур ҡеүәт ул. Шулай ҙа әленән-әле, башҡорт телен уҡытыуҙы тыялар, тигән һүҙҙәр ишетелә. Ғәмәлдә, РФ Конституцияһының 26-сы статьяһындағы 1-2-се пункттар һәр кемдең үҙенең милләтен билдәләү һәм күрһәтеү хоҡуғын, бәрәү ҙә икенсе милләт тип мәжбүр итеlә алмау, һәр кемгә туған тел менән файҙаланыу, аралашыу, тәрбиә биреү, уҡытыу һәм ижад итеү телен ирекле һайлау хоҡуғын бирә. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль закондың төп мәлдәре лә ошо положениенан сығып эшләнгән һәм ул белем биреү мөнәсәбәттәрен тыймай, киреһенсә, дәртләндерә генә.

Шулай уҡ ҡайһы бер мәлдәргә иғтибар йүнәлткем килә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты комиссияһы тикшереүҙәре асыҡлауынса, күп мәктәптәрҙә тирә-яҡ мөхитте өйрәнеү, музыка дәрестәрендә, шулай уҡ башҡа предметтарҙы уҡытҡанда этномәҙәни компонент ҡулланылмай, йәғни башҡорт мәктәптәрендә Федераль белем биреү дәүләт стандарттары үтәлмәй булып сыға. Быны ситтән килеп кемдер түгел, ә шундағы уҡытыусылар, мәктәп етәкселеге үҙе хәл итергә, тормошҡа ашырырға тейеш. Барлыҡ предметтарҙа ла башҡорт халҡы, уның арҙаҡлы вәкилдәре, республика, башҡорт халҡының рухи ҡеүәтен формалаштырған шәхестәр тураһында һөйләргә мөмкин. Әммә был тормошҡа ашырылмай.

Шулай уҡ уҡыусыларҙың туған телдә белем алыу ғына түгел, имтихан биреү хоҡуғы ла гарантияланған. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль закондың "Йомғаҡлау аттестацияһы" статьяһында уҡыусыларҙың туған телдән йомғаҡлау имтиханы тапшырыу хоҡуғы билдәләнә. Ләкин Башҡортостанда шундай хәл килеп тыуҙы: башҡорт лицей-гимназиялары үҙҙәренең уҡыусыларын башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән имтихан тапшырырға әҙерләһә, элекке РФ мәғариф һәм фән министры Дмитрий Ливановтың 2013 йылдың декабрендәге ике хатына ярашлы, бындай имтихандарҙы уҡытыу РФ Мәғариф һәм фән министрлығы грифы һалынған әсбаптар нигеҙендә алып барылған осраҡта ғына мөмкин икән. Артабан асыҡланыуынса, бәхтиһәң, бындай талап күптән, тиҫтә йылдан ашыу ҡуйылған була. Ә Башҡортостанда телдәрҙе уҡытыу, ғөмүмән, милли мәктәптәрҙә уҡытыу грифы булмаған дәреслектәр менән алып барылған. Күрше Татарстан Республикаһында был ваҡытҡа 21 дәреслек кәрәкле гриф алған. Шундай мөнәсәбәт булғанда, ниндәй тыйыу тураһында һүҙ булыуы мөмкин?

**(Дауамы 8-9,15-се биттәрҙә).**

*Булат РАФИҠОВ, яҙыусы:*

Әйе, туған телеңде, әсә телен белмәү - оло бәхетһеҙлек. Тыумыштан телһеҙ ғәрипте һәр кем ихлас йәлләй, ҡулынан килгәнсә ярҙам күрһәтә, ә үҙ-үҙен аңлы рәүештә әсә теленән мәхрүм иткән бәндә ҡатмарлыраҡ тойғо тыуҙыра: был осраҡта йәлләүгә нәфрәт ҡатыш ерәнеү өҫтәлә.

Туған телдән баш тартыу - ата-әсәңә, халҡыңа ихтирам юҡлығының, кәмһетеп ҡарауҙың билдәһе, ә һәр хыянат тыуған ерeңде, ватандаштарыңды хурлауҙан башлана бит. Хыянат нигеҙендә үҙ йәнеңде бөтә нәмәнән өҫтөн ҡуйыу, йәғни ереңде, халҡыңды, намыҫыңды һаҡлау шикелле кешелек вазифаларыңды үтәүҙән баш тартыу, башҡалар иҫәбенә йәшәү теләге ята. Кешене ерәндерә торған теләк!

Милләттең аҙ уҡый башлауы - оло бәлә килеүе хаҡындағы шомло хәбәр ул. Тимәк, беҙҙең ырыуҙаштарҙы ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйына туплаған рухи тәжрибәгә (тарих, йола-ғәҙәттәр төҫөн алған тәртип һәм әхлаҡ кодексы, ауыҙ-тел ижады, яҙма әҙәбиәт һ.б.) эйә булып, уны ишәйтеү-үҫтереү хәстәренән бигерәк, башҡа нәмәләр нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра.




12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тынғылдырған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЕР ҠӘҘЕРЕН БЕЛ!

***Марат ИШБУЛАТОВ, Башҡорт дәүләт аграр университетының кафедра мөдире, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты:*** Башҡорт дәүләт аграр университетының күсемһеҙ милек һәм геодезия кафедраһы мөдире булып эшләйем, шуға ла минә борсоған иң мөһим мәсьәлә - ул ер. Ошо көндәрҙә үткән быуаттың 60-70-се йылдарында төҙөлгән карталарға алмашҡа, электрон карталар эшләйбеҙ һәм шуға тупраҡ составын тикшерәбеҙ. Атап әйткәндә, Ҡырмыҫҡалы районы биләмәһендә эшләнек, иң уңдырышлы ерҙәрҙең тупраҡ составы бик үҙгәреүен, насарая барыуын күҙәтеп, әсенеп йөрөлдө. Ерҙең ысын хужаһы булмауы эҙемтәһе был. "Был ер минеке" тигән хужаларса мөнәсәбәт юҡ. Хәтһеҙ ерҙәр эшкәртелмәй буш ята, шул уҡ ваҡытта төҙәлеш өсөн урынды ла уңдырышлы тупраҡлы ерҙән бүлеп биргәндәр. Милләттәштәргә шуны әйтергә теләр инем: ерҙе ҡәҙерләргә өйрәнергә ваҡыт. Ситтән килгән эшҡыуарҙарға түгел, ер тураһында хәстәрлек күргән, эшсән һәм һаҡсыл кешегә бирергә кәрәк ерҙе ҡуртымға. Сөнки күп кенә ҡуртымсылар бүленгән ерҙән мөмкин тиклем күберәк табыш алып ҡалыуҙы ғына уйлай, улар ашлама һипмәй, тупраҡ эшенә ҡағылышлы нормаларҙы үтәмәй. Мәҫәлән, сөгөлдөрҙө тупраҡтан таҙартып ташыу кәрәклеген дә иҫәпкә тотмай улар, шулай итеп тупраҡ ситкә китә. Бөгөн кәрәкмәгән кеүек тойолһа ла, ер иртәгә кәрәк булыуы бар. Быға беҙ 90-сы йылдарҙағы көрсөк ваҡытында инандыҡ инде, ҡала халҡы ла ауыл тирәһенә күсеп, баҡсаһында эшләп йәшәй башлағайны бит. Донъя хәлен белеп булмай, резерв булырға тейеш.

Ер, ауыл хужалығы тураһында хәстәрлекте тик шәхси эшҡыуарҙарға ғына ҡайтарып ҡалдырыу ҙа дөрөҫ түгел. Дәүләт тарафынан һәр саҡ был өлкәгә тейешле иғтибар булыуы фарыз. 2010 йылда Голландияға эш буйынса командировкаға барҙыҡ, унда ауыл хужалығы яҡшы үсешкән тармаҡтарҙың береһе, беҙҙә бик күп хужалыҡтар буйлап йөрөттөләр, күрҙек, ҡараныҡ. Беҙҙең делегациялағы бер егет бөтә экскурсияларҙан һуң былай тигән фекер әйтә ҡуйҙы: ауыл хужалығы һеҙҙә лә, беҙҙә лә файҙа килтермәй. Тегеләр аптырашта ҡалды, әле генә беҙгә юғары килем алып эшләгән алдынғы хужалыҡтарҙы күрһәтеп сыҡтылар бит. Ә егетебеҙҙең яуабы шулай ине: әгәр ҙә ауыл хужалығы үҙе генә килемле өлкә булһа, беҙ экскурсияға килгән өсөн фермерҙарға аҡса түләмәҫ инегеҙ. Ысынлап та, ауыл хужалығы бер ярҙамһыҙ эшен яйға һалып китә алмай. Шуға был өлкәлә айырым бер генә кеше күп эш ҡылырата алмай, күмәкләшеп эшләргә өйрәнергә кәрәк. Быныһ өсөн тәү сиратта ауыл хужалығына икенсе сортлы өлкә тип кәмһетеп ҡарауҙан туҡтайыҡ. Ошо ҡараштан арыныу бик күп кенә мәсьәләләрҙе хәл итергә ярҙам итер ине ул. Сөнки дәүләт тарафынан финанслау, ауыл хужалығы өлкәһендәге кадрҙарға ҡытлыҡ кисереү, ауылда йәшәргә һәм эшләргә теләп ҡалған йәштәр һаны - барыһы ла шуға бәйле. Элек ғүмер буйы ерен күҙ ҡараһылай һаҡлап, ергә берегеп йәшәгән башҡорт кешеһе уның ҡәҙерен белһен ине. Донъяла барған үҙгәрештәр, көрсөктәр үҙ йүнен үҙе күрә белгән башҡорттарҙы һәр ваҡыт урап үткән бит. Ауылдарҙа йәшәүҙән, ерҙе үҙебеҙ эшкәртеүҙән, мал аҫрауҙан ҡырҡа баш тартып, иң мөһим өҫтөнлөктө юғалтмайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ИШАРА

# ҠУРСАУЛЫҠТАР ҠУРСАЛАР ӨСӨН -

## быны хатта ҡырағай йәнлектәр ҙә белә булыр



**Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы урынлашҡан Бөрйән районында булғанда урындағы хужалар һәм белгестәр ошо ерҙе төйәк иткән ҡырағай йәнлектәрҙә ғәжәйеп һаҡланыу инстинкты формалашыуы тураһында һөйләгәйне.**

Баҡтиһәң, ҡулында лицензияһы булған һунарсының ҡурсаулыҡтан ситтә рөхсәт ителгән бөтөн йәнлекте атып алырға хоҡуғы бар икән. Шул уҡ ваҡытта йәнлектәрҙең маңлайына: "Был ҡоралай, мышы, айыу, бүре, һеләүһен, ҡуян ошо ҡурсаулыҡта тыуып үҫкән. Уны атырға ярамай!" - тип яҙылмаған, уларға ҡурсаулыҡ мөһөрө һуғылмаған. Шулай булғас, тәжрибәле һунарсылар йәнлектәрҙең һәр миҙгелгә бәйле күсенеү һәм миграция мәлдәрендә ҡурсаулыҡ сиген һағалай. Һаҡҡолаҡ аусылар йәшеренеп кенә тора ла, тегеләрҙе шарт та шорт дөмбәҫләй ҙә ташлай. Улар өсөн төп шарт шуға ҡайтып ҡала: хайуанҡәйҙәр ҡурсаулыҡ сиген генә үтеп өлгөрһөн. Ҡайһы саҡ шулай ҙа була икән: сик буйын үтеп, апаруҡ ҡына ер китеп өлгөргән йәнлектәр, үҙҙәренә ҡурҡыныс янауын һиҙеүе менән, йән-фарманға ҡурсаулыҡҡа, йәндәрен ҡурсыр ергә сабыша башлай, имеш.

Тағы ла шуныһы: йәнлектәр сик буйын үтеп, йәндәрен ҡурсалаусы урынға етеү менән, ҡасыуынан туҡталып ҡала ла, арттарына боролоп, үҙҙәрен ҡыуа килеүсе саңғылағы, ҡарҙа йөрөүсе машиналағы, вертолеттағы һунарсыларға ҡурҡмайынса ҡарап тора икән. "Тотоғоҙ ҡойроғобоҙҙо, һеҙҙең мылтыҡ пуляһынан, машинағыҙҙан, вертолетығыҙҙан көслөрәк беҙҙең ҡурсаулығыбыҙ бар, уәт!" тиҙәр, йәнәһе.

Ысынлап та, һунарсылар нисек кенә ярһымаһын, артабан тап ошо сик буйында йәнлектәрҙе ҡыуалауҙан туҡталып ҡалырға, ярһыулыҡтарын ауыҙлыҡларға, һауаға булһа ла атып, асыуҙарын сығарырға мәжбүр. Күҙ алдына килтерегеҙ: ҡурсаулыҡтың шартлы сик һыҙығы. Бер яҡта йәнлектәр, икенсе яҡта баштан-аяҡ ҡоралланған аусылар. Уларҙың уртаһында шартлы булып тойолған ҡурсаулыҡ сиге Закон тип атала. Ҡурсаулыҡ хужалары әйтеүенсә, улар ошоғаса үҙ биләмәһендә законды боҙоп һунар итеүселәрҙе күргәне булмаған.

Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ҡурсаулыҡтың был ҡануны ысын мәғәнәһендә закондары һаҡланған, тулы көсөнә эшләгән һәм теүәл үтәлгән хоҡуҡи дәүләтте иҫкә төшөрә. Ҡурсаулыҡта үҫкән бер ағасҡа ла, үләнгә лә, сәскәгә лә тейергә ярамай. Унда еләк-емеш йыйырға, балыҡ тоторға, һунар итергә рөхсәт ителмәй.

Тыуған еребеҙ, йәнебеҙ яралған Башҡортостан да беҙҙе ҡурсалаусы Ер йөҙөндәге берҙән-бер төйәк. Рустарҙың - Рәсәйе, татарҙарҙың - Татарстаны, сыуаштарҙың - Сыуашстаны, грузиндарҙың - Грузияһы, төрөктәрҙең Төркиәһе булған кеүек. Беҙҙең Башҡортостандан башҡа ҡурсаулығыбыҙ ҙа юҡ. Әммә Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығынан айырмалы рәүештә, беҙҙе һаҡлаусы бөтөн закондар ҙа эшләйме, улар дөрөҫмө, кәрәклеләре бармы?

Күптәр өсөн ҡурсаулыҡ ул - Башҡортостан. Бигерәк тә һуңғы йылдарҙа төрлө һуғыштарҙан, ҡан ҡойоштарҙан ҡасып беҙгә килеүселәр өсөн илебеҙ ҡапҡалары шар асылды. Улар ҙа шул йәнлектәр кеүек, беҙҙең ил сиген үтеп, үҙҙәренә ҡурҡыныс янамаған ергә килеп еткәс, иркен һулыш ала. Шундуҡ кәсеп итергә тотона ла, аҡса туплағас, кәперәйә башлай. Ишетеүебеҙсә, бик күп сеймал сығанаҡтарына, тәбиғи байлыҡтарыбыҙ ятҡылыҡтарына яйлап улар хужа була бара икән. Һөҙөмтәлә, беҙҙең күҙ ҡараһы кеүек һаҡлаған байлыҡтарыбыҙ шулай итеп ситкә оса. Ни өсөн тигәндә, беҙҙә эшләүселәрҙең һәр береһе беҙҙең мөмкинлектәрҙе файҙаланып, үҙ илдәрендәге ғаиләләрен, туғандарын ҡарай. Шуныһы ғына етмәгән, ситтән килеүселәр үҙҙәре менән ҡурсаулығыбыҙға бик күп алама ҡылыҡтар, бысраҡлыҡтар, ҡорал, наркотик алып килә, еребеҙҙе, үҙебеҙҙе ағыулай...

Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығында, исмаһам, был биләмәләге бер генә нәмәгә лә теймәйҙәр, сөнки тыйылған. Ә инде Рәсәй, Башҡортостан тигән ил ҡурсаулыҡтары һаман талана. Ситтән килеүселәр ҙә үҙҙәрен хужа итеп тоторға, беҙҙең менән иҫәпләшмәскә тырыша. Хәйер... Барыһына ла үҙебеҙ ғәйепле. Хужаһы булмаған урында хужа булып алырға тырышыусылар күп була инде. Был - тәбиғәт ҡануны. Ҡурсаулыҡ биләмәһенә һерлегеп барып инеп, арттарынан ҡыуа килеүсе һунарсыларға "йөҙрөк" күрһәткән йәнлектәр был йәһәттән беҙгә ҡарағанда күпкә бәхетлерәк. Шулай түгелме?..

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов Орджоникидзе районының Тимашев тимер юлын аша сығыу юлы эргәһендәге транспорт сиселеше төҙөлөшө менән танышты. Әле бында төҙөлөш эштәренең беренсе этабы бара. Транспорт участкаһының дөйөм оҙайлығы, күпергә менеүҙе лә иҫәпкә алып, бер километр тәшкил итә. Ике һыҙатлы юлдың оҙайлығы - 161 метр. Беренсе этап төҙөлөшө 2018 йыл һуңында тамамланырға тейеш.

✓Башҡортостан Республикаһы милкенә бушлай Ҡырымдағы шифахана тапшырылды. Ул Евпаторияла, П. Морозов урамы, 1-3 адресы буйынса урынлашҡан. Шифахананы тапшырыу Ҡырым Республикаһының Министрҙар советы һәм Башҡортостан Хөкүмәте араһында 2017 йылдың 7 июлендәге меморандумды тормошҡа ашырыу сиктәрендә булды. Ошо хаҡта тәбәк Башлығы Рөстәм Хәмитовтың бойороғонда хәбәр ителә.

✓Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов яңы мәктәптәр төҙөлөшө менән танышты. Быйыл объекттар ҡала үҙәгендә, "Дим-8" биҫтәһендә, Нуғай ҡасабаһында, "Колгуевский" биҫтәһендә төҙөлә.

✓Өфө ҡалаһына Төркиәнең "БЕМ-БИР-СЕН" дәүләт һәм муниципаль, урындағы үҙидара органдары хеҙмәткәрҙәре профсоюздарының делегацияһы булды. Делегация етәксеһе, ойошма рәйесе урынбаҫары Медине Севинч Өфөнөң парктарға һәм ял зоналарына бай йәшел, төҙөк ҡала булыуын билдәләне. Яҡтар фекерҙәр алышып, артабан халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығытыуға ышанысын белдерҙе.

✓Республиканың ауыл хужалығы предприятиеларына эшләргә киләсәк йәш белгестәргә бер тапҡыр түләнә торған пособие күләмен арттырыуҙары ихтимал. Ошондай тәҡдим менән Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ауыл хужалығы министрлығының киңәйтелгән кәңәшмәһе барышында сығыш яһаны. "Юғары уҡыу йорттарын һәм колледждарҙы тамамлаусыларға бер тапҡыр түләнә торған пособие формаһында дәүләт ярҙамын 500 мең һумға ҡәҙәр арттырырға тәҡдим итәм", тине республика Башлығы.

*✓ Хакимиәт башлыҡтары үҙ территорияһын сүп-сарҙан таҙартыу, рөхсәт ителмәгән сүплектәрҙе бөтөрөү, бының өсөн күпме сығым сығыуы буйынса отчет бирә. Ә ни эшләп беҙ сүплек менән көрәшеүгә шул тиклем аҡса тотонабыҙ?*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*



# ТИРӘ-ЯҠТЫҢ ТАҘАЛЫҒЫ...

## уй-ниәттәрҙең сафлығына бәйле

Булһа була бит ул матур ҡатын-ҡыҙҙар. Маршруткала ҡаршымда ултырған ханыма һоҡланып барам: бешкән арыш башағы төҫөндәге ҡыҙғылт-һары ҡуйы сәсен өҫкә күпертеп өйөп ҡуйған. Күҙҙәре, әйтерһең дә, төпһөҙ зәңгәр күл, ә керпеге - күлде уратып алған ҡуйы ҡамыш. Подиумдарҙа ғына йөрөй торған буй-һын. Минең генә түгел, ҡаршыһындағы бөтәһененең дә һоҡланыулы ҡарашын тойоп, сейә ҡыҙыл төҫкә буялған тырнаҡтарына текәлде. Бер туҡталышта сығырға тура килде беҙгә.

- Миңә бәләкәй ҡаланың шуныһы оҡшамай: кешене күрәләтә күҙҙәре менән "сисендерәләр". Үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй ултырҙым, - тип һүҙ ҡушты ул, ә, бәлки, минең дә ҡарап ултырғаныма төрттөргәндер. - Мәҙәнилек тә, тәрбиә лә юҡ.

"Мәҙәниәтһеҙлегемә" уңайһыҙланып, ни тип әйтергә лә һүҙ таба алмай, ыҡ-мыҡ иткәнсе, матур ҡатын, бейек үксәләре менән асфальтты үтә тишерҙәй булып, тыҡ-тыҡ баҫып, китеп тә барҙы. Тик ырғытып киткән һыу шешәһе, шоколад тышына төрөлгән көнбағыш ҡабыҡтары сүп һауытына барып етмәй, кеше күпләп йөрөгән туҡталыштарҙың береһен тағы ла нығыраҡ ҡыйлап ятып ҡалды.

Әле генә күптәр өсөн, шул иҫәптән миңә лә, гүзәллек алиһәһе булып тойолған ҡатындың нәзәкәтлелегенән, матурлығынан бер нәмә лә ҡалманы. Ауыҙ тултырып мәҙәнилек, тәрбиә тураһында әйткән булды, ә үҙенең артынан күпме сүп-сар, асыу тирә-яҡҡа сәселде...

Һуңғы ваҡытта урамдар, туҡталыштар, биҫтәләр бысраҡ булыуы, сүплеккә әйләнеүе тураһында күп һөйләйбеҙ. Уның өсөн власты, йыйыштырыусы ойошмаларҙы әрләйбеҙ. Экология, тирә-яҡ мөхит бысрана тип һөрәнләйбеҙ, яр һалабыҙ. Тик үҙебеҙ йәшәгән урыныбыҙ таҙа, һулар һауабыҙ саф булһын өсөн нимә эшләйбеҙ һуң? Йыйыштырылған урында түгел, ә ҡыйламаған ерҙә таҙа булыуын һаман аңламайбыҙ.

Йыл һайын үткәрелгән Хакимиәт көндәрендә лә был мәсьәләгә ҙур иғтибар бүленә. Ауыл биләмәләре хакимиәт башлыҡтары үҙ территорияһын сүп-сарҙан таҙартыу, рөхсәт ителмәгән сүплектәрҙе бөтөрөү, бының өсөн күпме сығым сығыуы буйынса отчет бирә. Ә ни эшләп беҙ сүплек менән көрәшеүгә шул тиклем аҡса тотонабыҙ? Уға киткән аҡсаны башҡа маҡсатта ҡулланыу отошлораҡ булмаҫ инеме?

Эйе, сүплек мәсьәләһе бөгөн иң төп проблемаларҙың береһенә әйләнде. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, йыл башынан Башҡортостанда 378 рөхсәт ителмәгән сүплек булыуы асыҡланған. Көнкүреш ҡалдыҡтары башлыса баҡса йорттары, коттедждар биҫтәһе, урман һыҙаттарында, йәғни кешеләр йөрөгән, дөрөҫөрәге, кеше үҙен иректә тойған, бер ниндәй контроль, күҙәтеү юҡ тип иҫәпләгән ерҙә осрай. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Нимә сәбәпсе быға? Тәрбиәһеҙлекме, әллә тейешле урында сүп һауыттары булмауымы? Ә, бәлки, үрҙә атап кителгән ҡатын кеүек, урна ситенә ырғытҡан өсөн яза системаһы ҡаралмауымы?

Бынан бер нисә йыл элек сүп һауытында эҙләнгән асарбаҡ менән һөйләшкәйнем. Ул кешеләрҙең бай йәшәүен билдәләгәйне. "Кисә һатып алған икмәген бөгөн ашамайҙар, былтыр алған кейеменә лә шкафта урын юҡ, бөтәһен дә сығарып ташлайҙар", - тигәне хәтерҙә ҡалған. Эйе, бөгөн кешелә әйбер күп, береһенән-береһе уҙҙырып байыраҡ йәшәргә ынтылалар. Тик матди байлыҡ йыйған һайын күңелдәре ярлыланмаһа ине...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ*

# УҠЫТЫУСЫНЫҢ УҢ ҠУЛЫ УЛ...

**"Киске Өфө" гәзитенең һәр һанын беҙ, мәғариф хеҙмәткәрҙәре, көтөп алабыҙ. Сөнки был матбуғат баҫмаһында педагогтар өсөн кәрәкле, файҙалы бик күп материалдар бирелә. Мәктәп уҡытыусыһымы ул, балалар баҡсаһында тәрбиәсеме, юғары уҡыу йортонда белем биргән мөғәллимме - һәр кем эшендә кәрәкле мәғлүмәткә эйә була, күңеленә ятҡан мәҡәләне уҡып, аҡыл туплай ала.**

Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы коллективы "Киске Өфө" гәзитенең бик күптәнге дуҫы. Беҙ хатта йәй айҙарында ла гәзитте алдырыуҙы туҡтатмайбыҙ, ул һәр синыфҡа килә. Уҡытыусылар инде "Киске Өфө" гәзитен аҙна һайын көтөп ала, башҡа бер баҫманы ла улай юҡһынып, эҙләп йөрөгәндәре юҡ, тиһәм дә яңылыш булмаҫ. Гәзиттә мәғариф өлкәһен яҡтыртҡан мәҡәләләр, мәҙәниәт, әҙәбиәт, фән, сәйәсәт, иҡтисад, сәләмәт тормош, тәрбиә, дин, сәнғәт һәм башҡа темаларға арналған материалдар баҫыла. Бер баҫманы ҡулға алып, төрлө өлкәләр буйынса ла мәғлүмәтле булырға, донъя, Рәсәй, республика һәм баш ҡала кимәлендәге саралар, хәл-ваҡиғалар тураһында уҡырға мөмкин.

Педагогтар "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға дәрес биргәндә, синыф сәғәттәре, ата-әсәләр йыйылышы, семинарҙар үткәргәндә, хатта һөнәри конкурстарға әҙерләнгәндә бик әүҙем ҡуллана. Сөнки был гәзиттә һуңғы яңылыҡтар ғына түгел, йәмғиәтте борсоған актуаль проблемалар буйынса ла төрлө фекерҙәр сағылыш таба. "Киске Өфө"лә тәрбиә, әҙәп-әхлаҡ, милли рух, туған тел мәсьәләләрен күтәргән мәҡәләләрҙе уҡытыусылар айырыуса иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа тырыша. Ни тиһәң дә, белем усаҡтарының төп бурысы - баланы йәмғиәткә файҙалы шәхес, халҡының аҫыл вәкиле итеп үҫтереү. Бының өсөн беҙгә ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнеш булдырыу, тәү сиратта балаға ғаиләлә дөрөҫ тәрбиә бирелеүенә булышлыҡ итеү кәрәк. Шуға күрә, йылына кәмендә алты-ете тапҡыр үткәрелгән ата-әсәләр йыйылышында һәр ваҡыт "Киске Өфө" гәзитендә күтәрелгән балалар тәрбиәһенә, ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәргә, мәктәп һәм ата-әсәләр бәйләнешенә ҡағылышлы мәҡәләләргә таянып, әңгәмәләр, фекер алышыуҙар, лекциялар үткәрәбеҙ. Балаларҙы өйҙә туған телендә һөйләштереп үҫтереү, рухи тәрбиә биреү тураһында аңлатып торабыҙ. Әйтергә кәрәк, гимназияға килгән "Киске Өфө"нө бында эшләгән уҡытыусылар ғына уҡымай, өлкән синыф уҡыусылары ла үҙҙәренә ҡыҙыҡлы тема табып, танышып тора. Берҙән, был йәш быуынды баҫма матбуғат алдырып уҡыуға ылыҡтырһа, икенсенән, башҡорт баҫмаларына иғтибарҙарын арттыра, гәзиттәге милли рух менән һуғарылған мәҡәләләр менән танышыуға булышлыҡ итә. Уҡыусылар "Ҡомар", "Йәштәр ҡоро", "Аҡыл - ҡаҙна", "Йәшлек йәшнәүҙәре", "Заман башҡорто" кеүек рубрикаларҙа баҫылған материалдарҙы ҡыҙыҡһынып уҡый. Шулай уҡ үҙҙәре тураһында яҙылған мәҡәләләр булһа ла бик шатланып китәләр. Сөнки "Киске Өфө" гәзитендә баш ҡалала үткәрелгән ярыштарҙа, төрлө сараларҙа ҡатнашҡан әүҙем балаларҙың күңелдәрен үҫтереп, бик матур мәҡәләләр, интервьюлар баҫыла. Тәү ҡарамаҡҡа, өлкәнерәк йәштәрҙәге кешеләр өсөн кеүек тойолған "Ғаилә ҡоро", "Заман башҡорто" кеүек рубрикалар ҙа балалар өсөн фәһемле ул. Тулыһынса уҡымай, күҙ йүгертеп кенә сыҡһа ла бала уларға ҡарап өлгө ала, фәһемле фекерҙәрен күңеленә һалып ҡуйыуы бар. Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзите һәр кемгә кәрәкле баҫма, шуға ла был гәзиткә яҙылырғамы, әллә яҙылмаҫҡамы, тигән шикле уйҙар тыуғаны юҡ. Унда бирелгән мәғлүмәттән мәхрүм булмаҫҡа, фәһемле һәм аҡыллы уй-фекерҙәрҙе уҡыр өсөн мотлаҡ яҙылырға, тип уйлайһың. Кемдер төҫлө гәзит-журналдарға өҫтөнлөк бирә, ә "Киске Өфө"нө бер тапҡыр булһа ла ҡулына алып ҡараған кеше уның бай йөкмәткеле булыуына инанып, ҡағыҙ сифатына ла, төҫлө булмауына ла иғтибар итмәй. Быйыл ятаҡан баҫмабыҙға ун биш йыл тула, киләсәктә лә ул беҙҙе сифатлы мәғлүмәт, фәһемле уй-фекерҙәре менән йәшәргә дәрт өҫтәп, эшебеҙҙә ярҙамға килеп, ҡыуандырып торһон!

**Менәүәрә МӘҠСҮТОВА,**
**Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы директоры урынбаҫары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың ҡарары буйынса бынан алып йыл һайын урта махсус мәҙәниәт һәм сәнғәт белем биреү йорттары, Милли симфоник оркестр, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, Башҡорт дәүләт филармонияһы өсөн музыка ҡоралдарын һатып алыуға 30 миллион һум бүленәсәк.

✓Башҡортостанда һәләтле уҡыусылар өсөн стипендия ике тапҡырға арттырылды. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов тейешле Указға ҡул ҡуйҙы. Элек һәләтле балалар айына 350 һум алһа, 2017 йылдың 1 сентябренән уларҙың уңыштарын һәм ҡаҙаныштарын бүләкләү күләме ай һайын 700 һум тәшкил итәсәк. Уҙған уҡыу йылында Башҡортостан Башлығы стипендияһын 100 уҡыусы алды.

✓Башҡортостанда яңы уҡыу йылы 2 йәки 4 сентябрҙә башлана. Ул быйыл Белем көнөнөң Ҡорбан байрамы менән тап килеүенә бәйле. Тимәк, 1 сентябрь эшләмәгән байрам көнө булып иҫәпләнә, тип аңлаттылар Башҡортостан Мәғариф министрлығында. "Уҡытыу графигын мәктәп үҙаллы булдырғас, ул уҡыу йылын 1 сентябрҙә түгел, ә һуңыраҡ, мәҫәлән, 2 йәки 4 сентябрҙә башларға хоҡуҡлы", - тип аңлатты Башҡортостан Мәғариф министрлығының дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы һәм белем сифатын баһалау бүлеге етәксеһе Жанна Миникеева.

✓Ҡырмыҫҡалы районында Р-240 Өфө-Ырымбур федераль трассаһында хәрәкәт сикләнде. Федераль юл хеҙмәткәрҙәре Р-240 Өфө-Ырымбур автомобиль юлының 39+250 саҡрымында йәйәүлеләр өсөн ер өҫтө үткәүелен төҙөргә тотондо. Эш ваҡытында участкала автомобиль транспортының хәрәкәте сикләнгән. Ырымбур яғына уң яҡ һыҙат асылған. Участкала хәрәкәт тиҙлеге сәғәтенә 40 саҡрым тәшкил итәсәк. Ғәмәлдәге 39+150 саҡрымдағы автобус туҡталышы ваҡытлыса 50 метрға Өфө яғына күсерелә.

✓12 августа хоккей һөйөүселәрҙе ғәҙәттәге миҙгел алды байрамы - "Көйәрмән көнө" көтә. Ул "Йәшел төҫ йөҙөңә килешә" девизы аҫтында үтәсәк. "Салауат Юлаев" хоккей клубының рәсми сайты хәбәр итеүенсә, сара Цюрупа урамы яғынан "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана, һуңынан боҙ һарайының фойеһына күсәсәк. Инеү бушлай, әммә алдан сайтта теркәлергә кәрәк.

**“Башинформ”дан.**

***✓ Кеше ҙур ҡалала йәшәйме, ауылдамы - уның тормошо хәүефһеҙ, таҙа һәм уңайлы мөхиттә үтергә, ул балаларына сифатлы белем бирергә тейеш. Бының өсөн тейешле шарттар булдырырға кәрәк.***

*ҠЫҪҠАСА*

# ЮЛДАРҘЫ ЯБЫП ТОРОП...

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте Йортонда Индонезия Республикаһы Көнбайыш Ява провинцияһының рәсми делегацияһы менән осрашыу сиктәрендә республиканың ошо провинция менән сауҙа-иктисади, инвестиция, ғилми-техник, социаль-гуманитар һәм мәҙәни өлкәләрҙә хеҙмәттәшлекте үстерергә ниәтләнеүе тураһында протокол төҙөлдө.** Документҡа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм Көнбайыш Ява провинцияһы губернаторы Әхмәд Херьяван ҡул ҡуйҙы. Төбәк Башлығының һүҙҙәренсә, Башҡортостан Индонезияла ғәмәлгә ашырылған яңы нефть эшкәртеү ҡеүәттәрен яңыртыу һәм төҙөү кеүек эре проекттарҙа ҡатнаша, хәләл статусына эйә аҙыҡ-түлек менән ышаныслы тәьмин итә ала. Индонезия Республикаһы Башҡортостандың тышҡы иҡтисади партнерҙары иҫәбенә инә. Былтыр Башҡортостан менән Индонезия араһында тышҡы сауҙа әйләнешенең күләме 807 мең доллар тәшкил иткән, ә 2017 йылдың биш айында әйләнеш күләме 2016 йыл күрһәткесен 1,5 тапҡырға уҙған.

✓ **Өфө ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә Цюрупа урамындағы капиталь ремонт барышындағы тәжрибә өлгәнөнә ыңғай баһа бирелде.** Бында Зәки Вәлиди урамынан алып Пушкин урамына тиклем, Пушкин урамынан Октябрь революцияһы урамына тиклем асфальт һалынған урам участкаһы үткән ял көндәрендә тулыһынса ябылды. Бары тик барлыҡ технологик циклдарҙы тулыһынса үтәгәндә генә сифатлы юлдарға эйә булырға мөмкин, бының өсөн транспорт хәрәкәтен тулыһынса туҡтатып торорға кәрәк. Юҡһа, бер һыҙатта ремонт эшләп, икенсеһендә транспорт ағымы туҡтамаһа, ҡайһы бер водителдәр биш минут та үтмәй, яңы һалынған асфальт ҡатламы өҫтөнән үтеп китә. Был иһә сифат кимәлен түбәнәйтә. Шуға күрә, артабан юлдар ремонтланған ваҡытта, ошо участкалағы хәрәкәт тулыһынса туҡтатыласаҡ, ә инде унайһыҙлыҡты кәметеү өсөн төп ремонт эштәре төнгә ваҡытта башҡарыласаҡ.

✓ **"БашРТС" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт йылылыҡ селтәрҙәрен ремонтлағандан һуң, Ибраһимов бульварындағы аллеяға 30 эре ағас ултыртасаҡ.** Был трасса Өфөнөң көньяҡ өлөшө өсөн социаль әһәмиәтле булып тора, сөнки уға торлаҡ йорттар ғына түгел, мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау объекттары ла тоташҡан. Ә инде "бер ағас урынына өсәү" принцибы буйынса ултыртылған ағастар территорияны йәшелләндереүҙә үҙ ролен уйнаясаҡ.

✓ **1 августан Рәсәйҙә эшләүсе пенсионерҙар пенсияға өҫтәмә аҡса аласаҡ.** Өҫтәмә түләү күләме пенсионерҙың 2016 йылдағы эш хаҡы кимәленә бәйле. Иң күп өҫтәмә яҡынса 222 һум тәшкил итәсәк. Рәсәй Пенсия фондының мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн илдә 43 миллион самаһы пенсионер иҫәпләнә, яҡынса уларҙың өстән бер өлөшө - эшләүсе. Башҡортостанда 250 мең пенсионер хеҙмәт итә. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә аңлатыуҙарынса, пенсияларҙы ҡайтанан иҫәпләү ғаризаһыҙ, автоматик рәүештә башҡарыла. Түләүгә сығымдарҙы финанслау тулы күләмдә тәьмин ителгән.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҠАЛА - АУЫЛҒА...

**Өфө ҡалаһы менән Салауат районы араһындағы хеҙмәттәшлек тураһында килешеү сиктәрендә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың тыуған яғында эш сәфәрендә булды.**



Ике аралағы социаль-иҡтисади һәм мәҙәни өлкәләге хеҙмәттәшлек тураһындағы был документҡа 2013 йылда ҡул ҡуйылып, ул иҡтисад, сәнәғәт, мәғариф, мәҙәниәт өлкәләренә ҡағыла. Халыҡ менән осрашҡанда Ирек Ишмөхәмәт улы бынан дүрт йыл элек төҙөлгән килешеүҙең мөһимлеген билдәләп үтте.

- Бөгөн Өфөлә республиканың төньяҡ-көнсығыш төбәгенән сығып, фәндә, мәҙәниәттә, мәғарифта, сәнәғәттә етди ҡаҙаныштарға өлгәшеүселәр бик күп, - тине ул. - Кеше ҙур ҡалала йәшәйме, ауылдамы - уның тормошо хәүефһеҙ, таҙа һәм уңайлы мөхиттә үтергә, ул балаларына сифатлы белем бирергә тейеш. Бының өсөн тейешле шарттар булдырырға кәрәк. Беҙ был бурысты бер ваҡытта ла иҫтән сығармайбыҙ...

Эш сәфәре сиктәрендә Салауат районы хакимиәтенә Өфө ҡалаһының эшҡыуарҙар йәмғиәтенән көнкүреш сүп-сарын таҙартыу, янғын һүндереү өсөн махсус техникалар, компьютер класын йыһазландырыуға компьютерҙар тапшырылды. Осрашыуҙың рәсми өлөшөнән һуң сарала ҡатнашыусылар Салауат Юлаев музейында, Иҙрис мәмерйәһендә, Тәкәй ауылы урынында ҡуйылған стела эргәһендә булды.

# ЗАМАНСА ҠАЛА МӨХИТЕ



**Баш ҡаланың барлыҡ райондарында ла "Заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" проекты тормошҡа ашырыласаҡ. Эштәр Октябрь проспектындағы барлыҡ йорт ихаталарында һәм Киров, Совет райондарында башланып китте.**

Башҡортостандың һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡан халҡының яртыһы самаһы ихаталарҙы төҙөкләндереүҙә шәхсән ҡатнашырға әҙерләген белдерә һәм был проект тап ошо үҙҙәре инициатива күрһәтелгән урындарҙа иң элек башлана ла инде. Ғөмүмән, "Берҙәм Рәсәй" партияһының проекты сиктәрендә был башланғыс 23 муниципаль берәмектә тормошҡа ашырыла.

Граждандар сходында халыҡ проектҡа нисек ярҙам итеү төрөн үҙе һайлай - йә аҡсалата өлөш индерә, йә төҙөкләндереү эштәрендә ҡатнаша. 23 берәмектең 10-ында төҙөләш ярҙамын күрһәтеүҙе һайлағандар. Бынан тыш, халыҡ төҙөкләндереүҙең өҫтәмә хеҙмәтен дә һайлай ала. Башҡортостанда 166 ихата - автомобиль парковкалары, 123-ө - балалар һәм спорт майҙансыҡтары, 215-е тротуарҙар һәм йәйәүлеләр өсөн юлдар эшләүҙе һайлаған. Территорияны комплекслы төҙөкләндереү бер юлы бик күп ихатаның проблемаларын хәл итәсәк: быҡаса булған балалар майҙансығы эргәһенә тағы берәү өҫтәләсәк, асфальт ҡатламы яңыртыласаҡ, тротуарҙар, йәйәүлеләр юлы төҙөкләндереләсәк, автомобилдәрҙе парковкалау мәсьәләһе бөтөрөләсәк.

Октябрь проспекты - баш ҡаланың үҙәк магистралдәренең береһе булып тора һәм уның ике яғында урынлашҡан йорттарҙың ихаталары мегаполистың йөҙөн билдәләй. Шуға ла иң беренсе эштәр ошонан башланыуы юҡҡа түгел. Проекттың Октябрь районында үтәлеше менән ошо көндәрҙә РФ Дәүләт Думаһы депутаттары Зөһрә Рәхмәтуллина, Михаил Бугера, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Галина Ишмөхәмәтова, Өфө ҡала Советы депутаты Тәнзилә Ниғмәтуллина, Октябрь районы хакимиәте башлығы Роберт Ахунов танышты. Район халҡы проектта ҡатнашырға теләк белдереп, сығымдарҙың 5 процентын үҙе ҡаплаған. Ә инде уның төп өлөшө - 80 проценты - федераль бюджет елкәһенә төшә. 15 процент сығымдарҙы республика ҡаҙнаһы ҡаплаясаҡ. Төҙөкләндереү эштәре сифатлы һәм ваҡытында башҡарылһын өсөн ошо ихаталарҙа йәшәүселәр подряд ойошмаһының эшен йорттар фасадына ҡуйылған һәм онлайн режимда эшләгән видеокамералар ярҙамында тикшерә ала. Әйткәндәй, үҙгәрештәр ихаталарға ғына түгел, йорт фасадтарына ла ҡағыла. Проект тормошҡа ашырылыу барышында йорттарҙың ишек алды, цоколдәр ремонтланасаҡ, тәҙрә рамдары буятыласаҡ, яҡтыртыу сығанаҡтары, эскәмйәләр, сүп һауыттары ҡуйыласаҡ. Октябрь районында "Берҙәм Рәсәй" партияһы инициативаһы менән башланған проект сиктәрендә 27 ихата төҙөкләндереләсәк.

Киров районында был проектҡа Аврора, Киров, Цюрупа, Мөбәрәков исемендәге урамдарҙан һайланған йорттар ингән. Уны тормошҡа ашырыу халыҡ, район хакимиәте вәкилдәре һәм депутаттар ҡатнашлығындағы саранан башланды. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Инга Юмашева белдереүенсә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ комплексын үҫтереү һәм тормош өсөн уңайлы шарттар булдырыу - "Берҙәм Рәсәй" партияһы алдында федераль, төбәк һәм муниципаль кимәлдә өҫтөнлөклө булып торған бурыстарҙың береһе. Планға ярашлы, төҙөкләндереү эштәре йәй һуңына тамамланырға тейеш.

Совет районында иһә проектҡа старт Достоевский урамының 97/1 йорто ихатаһында бирелде. Бында яңы асфальт түшәләсәк, балалар һәм спорт комплексы урынлаштырыласаҡ, автомобилдәр өсөн туҡталҡа төҙөкләндереләсәк. Ғөмүмән, проект сиктәрендә районда 14 ихатаны төҙөкләндереү күҙҙә тотола.

Шулай итеп, быйыл "Унайлы ҡала мөхите формалаштырыу" проекты сиктәрендә Өфөлә 105 күп фатирлы йорт ингән 81 ихатаға яңы төҫ биреү күҙаллана.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"Өфөнән һөйөү менән" фильмының Бөтә Рәсәй прокаты дауам итә. 2 августа уның премьераһы - "Ленфильм" студияһы (Санкт-Петербург) кинотеатрында, 3 августа Арбаттағы "Октябрь" кинотеатрында (Мәскәү) үтте. Кино Рәсәйҙең 71 ҡалаһында, шул иҫәптән Феодосияла (Ҡырым), Ҡазанда, Новосибирскиҙа, Силәбелә, Сургутта, Тулала, Донецкта, Дондағы Ростовта, Һамарҙа күрһәтелә. Ҡалалар исемлеге көндән-көн арта бара.

✓"Уралкинофест" программаһында Башҡортостандан ике фильм - Булат Йосоповтың "Бабич" һәм Айнур Аҫҡаровтың "Өфөнән һөйөү менән" таҡмалары тәҡдим ителәсәк. Рәсәй киноһының Урал асыҡ фестивале 2-8 сентябрҙә Екатеринбургта һәм Свердловск өлкәһе ҡалаларында икенсе тапҡыр уҙа. Екатеринбургтың һәм өлкәнең 20 кинозалында 119 картина күрһәтеләсәк.

✓"Zaman" этно-проекты "Яңы йондоҙ" телешоуының өсөнсө миҙгелендә ҡатнаша. Мәскәү коллективы Башҡортостан исеменән сығыш яһай. Проект май айында төшөрөлгән, тапшырыуҙар августа эфирға сыға. "Яңы йондоҙ" - йыл һайын үткәрелгән Бөтә Рәсәй эстрада йыры телевизион конкурсы, 85 төбәк ҡатнашҡан тарихта тәүге музыкаль бәйге. Илдең иң көслө йырсылары бер сәхнәлә осраша. Уларҙың һәр береһе тыуған төйәге өсөн көрәшә.

✓Өфө халыҡ-ара марафоны 17 сентябрҙә уҙа. Уның дистанциялары төрлө кимәлдәге әҙерлекле ҡатнашыусыларға иҫәпләнгән. Спортсыларға 42,2 һәм 21,1 саҡрым араны йүгереп үтергә кәрәк. Сәләмәт йәшәү рәүешен алып барғандар 10 йәки 3 саҡрымды үтә ала. Иҫәп буйынса өсөнсө Өфө халыҡ-ара марафонында донъяның 15 иленән һәм 180 ҡалаһынан биш меңгә яҡын спортсының ҡатнашыуы көтөлә.

✓Төркиәнең Самсун ҡалаһында XXIII йәйге Сурдлимпия уйындары тамамланды. Рәсәй йыйылмаһы командаһында Башҡортостандан тыуыҙ спортсы - Карина Хәкимова, Рөстәм Әхмәтов, Заур Беданоков, Ринат Ҡадиров, Рөстәм Нәжметдинов, Михаил Сидоров, Лиана Тимашева, Юлиә Әбүбәкирова, Нелли Ерофеева һәм Денис Хәкимов. Рәсәй йыйылмаһы дөйөм команда зачетында енде. Рәсәйҙәр 83 алтын, 51 көмөш һәм 61 бронза награда туплаhы. Башҡортостан спортсылары иҫәбендә 11 миҙал: дүрт алтын, алты көмөш һәм бер бронза.

БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

**Башҡортостан - туристар өсөн үҙе бер хазина төбәк, тип, ышаныслы әйтергә мөмкин. Сөнки тәбиғәт ландшафты бында бөтөн төр - йәйәүле, атлы, экстрим, альпинизм, һыу һ.б. - туризмды үҫтереүгә үҙе фатиха бирә. Ә инде тәртип тупһанан башланған кеүек, республикаға килеүселәр өсөн туризм тупһаһы булып уның баш ҡалаһы - Өфө торорға, туристар һәм баш ҡала ҡунаҡтары тәүге мәғлүмәтте тап ошонда алып, күңелдәрендә тағы ла нығыраҡ ҡыҙыҡһыныу уятып, юлдарын артабан дауам итергә тейеш. Был, әлбиттә, идеаль варианты шулай. Ә ғәмәлдә эштәр нисек тора? Өфө ҡала округы хакимиәтенең Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм буйынса идара етәксеһе Ольга ЗАВЬЯЛОВА менән әңгәмәбеҙ ошо хаҡта.**

# БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА!



**➔ Ольга Геннадьевна, һуңғы йылдарҙа Өфө халыҡ-ара сараларҙың үҙәгенә әүерелеп бара. "Башҡортостан Республикаһында эске һәм ситтән инген туризмды үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә төбәктә туристик-рекреацион кластерҙар булдырыу концепцияһы эшләнгән. Баш ҡала был йәһәттән нимәләр менән ҡыуандыра?**

- Төбәктең кластер системаһы үҫеше һөҙөмтәһендә баш ҡаланың инфраструктураһы, туристик ҡеүәте "Өфө" туристик-рекреацион кластер төҙөүгә этәргес булды. Бының өсөн ныҡлы нигеҙ ҙа бар. Иң беренсе сиратта, Өфө уңайлы урынлашҡан. "Өфө" халыҡ-ара аэропортының көндәлек пассажирҙар ағымы 2,3 миллион кешегә етә, самолеттар 70 йүнәлештә рейс яһай. Ҡалаға килеүселәрҙең 80-90 проценты бизнес-туристар тәшкил итә. Мәғлүмәт һәм мәғрифәт туризмын маҡсат итеп ҡуйыусылар, йәғни ошо төбәк, уның иҫтәлекле урындары хаҡында күберәк белергә, танышырға теләүселәр - 10 процент.

Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа Өфө конгресс ҡалаһы булараҡ танылыу яуланы һәм ул илдең конгресығышында эшлекле һәм фәнни туризм үҙәге булып тора. Йыл һайын баш ҡала 3 меңдән ашыу сара уҙғарыла. Ҡунаҡтарҙы ҡаршы алырлыҡ ҡунаҡхана селтәре лә ҙур үҫеш кисерҙе. Бизнес-туризмдың иң әүҙем осоро яҙ (февраль-май) һәм көҙ (сентябрь-ноябрь) айҙарына тура килә. Был ваҡытта, ғәҙәттә, күпселек күргәҙмәләр, форумдар, конференциялар уҙғарыла һәм ҡунаҡханалар 90-100 процентҡа тула. Шулай уҡ һуңғы ваҡытта Өфө отелдәре ҡалала сәнәғәт объекттары, сауҙа майҙансыҡтары, төрлө йүнәлештәге сит ил һәм Рәсәй компанияларының күп һанлы филиалдары асылыуы һөҙөмтәһендә лә буш тормай. Көньяҡ Уралдың бәләкәй һәм уртаса ҡалаларынан баш ҡалаға ял көндәренә килеүселәр һаны арта.

**➔ Артабан республика буйлап туристик маршруттарға сығыр алдынан туристар барыбер күпмегә булһа ла Өфөлә туктала. Мәғлүм булыуынса, сәйәхәт итергә яратыусылар ваҡытын бушҡа үткәрмәй, улар өсөн һәр минут ҡәҙерле, һәр минут уларға яңы мәғлүмәт асырға тейеш. Был йәһәттән нимәләр эшләнә?**

- Ысынлап та, Красноусольскийға, Ирәмәлгә, Яҡтыкүлгә һәм башҡа шундай һоҡланғыс урындарға юлланған туристар баш ҡалаға килеп төшкәс, артабан юлын дауам иткәнгә тиклем Өфөнөң иҫтәлекле урындары менән таныша ала. Сөнки, Раушан Бикбаев әйтмешләй, Башҡортостан бында башлана. Әлбиттә, "Өфө" туристик кластерының тиҙ үҫешеүен күҙ уңында тотоп, экскурсия һәм объекттар маршрутын даими камиллаштырыу һәм модернизациялау талап ителә. Был йүнәлештә эш эҙмә-эҙлекле алып барыла һәм баш ҡаланың туристик фирмалары яңынан-яңы маршруттар аса. Мәҫәлән, яңы "Өфө уттары һәм фонтандар музыкаһы" маршруты ҡаланың әүҙем төҙөкләндерелеүе, яңы фонтандар эшләнеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде. "Башҡортостан - бал һәм ҡурай төбәге" маршрутында милли колорит өҫтөнлөк итә һәм унда башҡорт балын, ҡымыҙын тәмләп ҡарарға, башҡорт милли кейемдәрендә фотосессия яһарға мөмкин. Шулай уҡ ҡала буйлап йәйәүле экскурсиялар бар.

"Дим" станцияһынан "Шаҡша" станцияһына тиклем "Экскурсия электричкаһы" йөрөй. Йәйге осорҙа Мәскәү, Түбәнге Новгород, Ҡаҙан, Һамарҙан теплоходта килеүселәр өсөн айына 2-3 тапҡыр махсус программа эшләнгән. Майҙан алып Ырымбур, Екатеринбург, Мәскәү, Ҡаҙан, Силәбе, Бөгөлмә, Яр Саллы, Магнитогорск, Әшә ҡалаларынан килеүселәр өсөн көн һайын экскурсиялар ойошторола. Экскурсия һәм туристик маршруттар шулай итеп баш ҡалала башланып, бөтөн республика буйынса дауам итә. Йыл һайын эре предприятиеларҙың эшлекле һәм спорт саралары ойошторолғанда программаға мотлаҡ 2-3 көнлөк экскурсиялар индерелә.

Яңы проекттар ҙа тормошҡа ашырыла. Быйыл, мәҫәлән, "Белем вагоны" тип аталған төбәк-ара проекты тормошҡа ашырҙыҡ. Уның маҡсаты уҡыусыларҙы Рәсәй тарихы менән таныштырыу булды, уңайлы, тиҙ йөрөшлө поезда балалар мәғрифәт сәйәхәтендә йөрөнө. Ошо төбәк-ара проект сиктәрендә Өфөгә Һамар ҡалаһынан 190 бала килде. Улар өсөн бай мәҙәни программа тәҡдим ителде: ҡала буйлап экскурсиялар, музейҙар менән танышыу, концерт программаһы, "Ватан" этнопаркында мини-балалар һабантуйы. Март-май айҙарында Өфөнән 420 уҡыусы Һамар ҡалаһы менән танышты. Проектта ҡатнашыусы ҡалалар белдереүенсә, Өфөләге программа иң ҡыҙыҡлыһы һәм байы тип баһалана. Был проектты быйыл сентябрҙән дауам итеү планлаштырыла.

Шулай уҡ "Һоҡланғыс Яңы йыл Башҡортостаны!" проекты ла дауам ителәсәк. Ул былтыр "Ватан" этнопаркында әкиәт ҡаласығы, боҙ тауҙары, концерт майҙансығы һәм тематик тирмәләр рәүешендә ойошторолғайны. Артабан метробустарҙа теләүселәрҙе бушлай баш ҡаланың боҙ ҡаласыҡтары менән таныштырып, экскурсия үткәрелде.

**➔ Ғәҙәттә, туризм йәки экскурсиялар - ҡалын кеҫәлеләр өсөн, тигән ҡараш һуңғы ваҡытта йәмғиәттә нығына бара, сөнки күптәр иҡтисади, социаль һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында үҙҙәренә был бәхетте рөхсәт итә алмай…**

- Мәҡәлә башында телгә алып киткән программа сиктәрендә баш ҡалала туризм буйынса социаль проекттар ҙа тормошҡа ашырыла. Беренсе тапҡыр сәләмәтлектәре сикле категория өсөн Салауат районына, Асылыҡүлгә, Шихандарға турҙар, Ҡариҙел йылғаһы буйлап һалдарҙа ағып төшөү ойошторолдо. Шулай уҡ оло йәштәгеләр ҡала буйынса экскурсияла булды, республиканың рекреацион райондарына, Рәсәйҙең мәҙәни-тарихи үҙәктәренә барҙы. Мәктәп балалары өсөн музейҙарға, иҫтәлекле урындарға, һөнәр һайлау программаһы буйынса предприятиеларға, хәрби-патриотик программа буйынса ошо йүнәлештәге урындарға тематик экскурсиялар үткәрелә. Былтыр октябрҙән алып "Асыҡ донъя" проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә оло йәштәгеләр һәм сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгәндәр өсөн М. В. Нестеров исемендәге Башҡортостан дәүләт художество музейына экскурсиялар, атҡаҙанған рәссамдар, композиторҙар, республиканың башҡа сәнғәт эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙар ойошторола.

**➔ Күптән түгел Рәсәй субъекттарында беренселәрҙән булып Өфөлә "Рәсәй - минең тарихым" мультимедиялы тарихи парк эшләй башланы. Ул да, моғайын, яңы экскурсия маршрутына индерелгәндер?**

- Әлбиттә, сөнки унда Рәсәй тарихы боронғо осорҙан алып бәйән ителә һәм ундағы ваҡиғалар Башҡортостан тарихы менән үрелеп алып барыла. Стендтар, видеопроекцион коллаждар башҡорт халҡының тормошондағы дәүерҙәрҙе аса, төбәгебеҙҙең тәбиғи байлыҡтары хаҡында бәйән итә. Шулай уҡ унда Өфө Кремленең 3Д-конструкцияһын күрергә мөмкин.

**➔ Киләсәктә өфөләрҙе һәм килгән ҡунаҡтарҙы тағы ла ниндәй яңылыҡтар менән аптыратырға, һоҡландырырға мөмкин буласаҡ?**

- Чернышевский, Ленин, Коммунистик һәм Мостай Кәрим урамдары квадратындағы территорияла ҡала халҡы үҙе, йәғни шәхси инвесторҙар туристар өсөн креатив "Арт-квадрат" булдырыу проекты менән сығыш яһаны. Бында әлеге ваҡытта лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре, бейеү-тауыш перфоманстары үтә. Шулай уҡ киләсәктә түңәрәк ҡорҙар, кинолар күрһәтеү, йәрминкәләр, дизайнер һәр архитектура фестивалдәре, ижади күргәҙмәләр, концерттар ойоштороу планлаштырыла. Ошо көндәрҙә иһә "Урман" тип аталған бейеү-музыка перфомансы, урам театры, йога һәм башҡа саралар уҙғарыласаҡ. Әлеге ваҡытта был территориянан көнөнә 25 мең самаһы кеше йөрөй. "Арт-квадрат"тың ҡала халҡы өсөн ял итеү урынына, ҡаланың ижади үҙәгенә, ваҡиғалар туризмы зонаһына әүерелеүен теләге килә.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әңгәмәләште.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тын юлы ауырыуҙары

❖ Көнөнә 4-5 тапҡыр башығыҙҙы артҡа ташлап, танау юлдарына 3-5-әр тамсы алоэ һуты тамыҙып, танау япраҡтарына массаж яһаһағыҙ, танау ҙа тонмаҫ, тымау ҙа булмаҫ.

❖ Бронхитты дауалау өсөн 1 литр һыуҙы ҡайнатып, уға 400 грамм он кәбәге һалырға һәм төнәтергә. Һөҙгәс, көнө буйы ҡайнар килеш эсергә. Бал һәм шәкәр менән эсергә ярамай.

❖ 60 грамм борос тамырын сирек литр аҡ араҡыла ҡайнатырға. Һөҙгәс, эҫе килеш көнөнә 3 мәртәбә эсергә, төнгөлөккә ҡаҙ майы менән ҡушып, 1 ҡалаҡ эсергә.

❖ Әсе торма (редька) ҡайнатып эсеү ҙә файҙалы. Әсе торманы бал менән ҡушып һипкелгә, һеркә менән ҡатнаштырып, тимерәүгә һөртөләр, әммә эшетәргә зарарлы. Тонған ҡолаҡҡа һутын тамыҙыу ҙа сихәтле.

❖ 500 грамм һуғанды ваҡларға ла, 400 грамм шәкәр, 1 литр һыу ҡушырға һәм һүрән утта 3 сәғәт ҡайнатырға. Һыуынғас, был ҡатнашмаға 50 грамм бал ҡушырға, шешәгә һалып томалап ҡуйырға. Ашағандан һуң 4-5 ҡалаҡ эсергә.

### Һөт эсегеҙ

❖ Көнөнә ярты литрҙан да күберәк һөт эскән ир-егеткә йөрәк сире янамай.

### Аяҡтар шешенһә

❖ 4 балғалаҡ етен орлоғон 1 литр һыуҙа 15 минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәтергә, һөҙергә кәрәкмәй. Тәмләү өсөн 1 лимон йә бүтән емеш һуйын өҫтәргә. 8 көн буйына 2 сәғәт һайын яртышар стакан эсергә. 2 аҙнанан һуң һөҙөмтәһе беленер.

### Арыу

❖ Йәшел һуған ҡыяҡтарын ашағыҙ.

❖ Ваҡыт-ваҡыты менән көнөнә 7-8 бөртөк артыш еләге ашау ҙа файҙалы, әммә бының менән артыҡ мауығырға кәрәкмәй - күҙҙәргә зыян була.

❖ Арыҡған, хәлде алған эште ташлап, башҡа эшкә күсеү ҙә хәлде еңеләйтә.

❖ Бал һәм һөт һалып, 1 сынаяҡ сәй йәки 1 стакан бөтнөк төнәтмәһе эсергә.

❖ Арығанлыҡ умыртҡалыҡта һиҙелһә, көнөнә 2 тапҡыр 0,3 грамлы аспирин порошогы эсергә, массаж яһарға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Ыршшы аҫтына гитара ҡуйғайныҡ, икеһе лә гитара уйнарға өйрәнде. Ғөмүмән, музыкаға икеһе лә ғашиҡ. Өйҙә музыка ҡоралдары булһа, бала ҡасан булһа ла өйрәнә ул. Быны үҙемдән беләм.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Әбү Джәхел һәм Хәмзә

Хашим ырыуының намыҫын күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға тырышҡан Хәмзә шунда уҡ Әбү Джәхелде эҙләргә тотона. Күп тә үтмәй, Ҡәғбә янында таба. Йыйылыш бара унда, кеше күп була. Хәмзә уның эргәһенә бара ла, ергә ҡолата һуға, тегенең башы йәрәхәтләнә.

- Көсөң етһә, яуап бир, - ти ул.

Мәхзүм нәҫеленең кешеләре - Әбү Джәхелдең туғандары - һикереп килеп тороп, һуғышырға әҙерләнә. Тик уларҙы Әбү Джәхел үҙе үк туҡтата.

- Хәмзә хаҡлы. Мин бит уның туғанын рәнйеттем, - ти ул.

Хәмзә өсөн туғанлыҡ ҡанундары бөтөн ҡиммәттәргә ҡарағанда ла юғарыраҡ була. Шуға ла ул:

- Әгәр туғандарымды рәнйетергә шул ғына сәбәп булып тора икән, бөгөнгө көндән мине лә мосолман тип иҫәпләгеҙ. Ҡарап ҡарарбыҙ, беҙгә көсөгөҙ етерме икән... - ти ҙә, үҙенең мосолманға әйләнергә теләге тураһында хәбәр итеү өсөн Мөхәммәт бәйғәмбәргә юллана.

Быға Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә, башҡа мосолмандар ҙа бик ныҡ шатлана, ә дошмандар уйға ҡала. Көсө һәм ярһыу батырлығы менән ҡөрәйштәр араһында ғына түгел, башҡа ырыуҙар араһында ла даны таралған баһадир Хәмзәнең Ислам диненә күсеүе дошмандарҙың артыҡ шашыныуынан аралай.

## Ҡарымта ҡанундары

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Әбү Талиб, Хәмзә һәм башҡа туғандарының үҙҙәрен нисек тотоуҙарынан беҙ ҡарымта ҡанундарының көсөн күҙаллай алабыҙ. Мөхәммәт бәйғәмбәр күптәргә ҡамасаулай, күптәр уның үлемен теләй, тик был эште береһе лә башҡара алмай. Сөнки үлтергән йәки үлтереү өсөн берәйһен яллаған кеше үҙе генә түгел, бөтөн ғаиләһе, иң яҡын туғандары менән бергә юҡ ителер ине. Хашим нәҫеленән булған һәр береһе, хатта һуғышырға теләмәгән осраҡта ла, намыҫ һаҡлау өсөн ҡарымтала ҡатнашырға тейеш булыр ине. Ул замандарҙа ҡарымта ҡанундары ырыу, нәҫел кешеләрен берләштергән, шуға һәр береһе күберәк ир бала табырға, шуның менән нәҫелен тағы ла көсәйтергә тырышҡан. Сөнки нәҫелдең, ырыуҙың көсө һәр айырым кешене лә көслөрәк һәм абруйлыраҡ иткән.

Ҡарымта ҡанундарын яҡшы белгән Мәккә аҡһаҡалдары Әбү Талибҡа тағы бер тапҡыр илселәр ебәрә. Был юлы улар Әбү Талибҡа ҡөрәйш ырыуының иң матур һәм аҡыллы егеттәренең береһе Әл-Вәлидте уллыҡҡа алып, уның урынына Мөхәммәтте үҙҙәренә биреүен һорай. Сөнки Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе үҙенә уллыҡҡа алған нәҫел уны үҙе теләгәнсә язалай алыр һәм быға береһенең дә ҡыҫылырға хаҡы булмаҫ ине.

- Минең улымды үлтереү өсөн уллыҡҡа алып, мин ашатып ятһын өсөн улығыҙҙы миңә бирергә уйлайһығыҙмы? Был эшегеҙ бер ҡасан да барып сыҡмаясаҡ! - тип яуап бирә Әбү Талиб.

Шул уҡ ваҡытта Хашим нәҫелендә лә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең бер дошманы була. Ул - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең алыҫ туғаны һәм кейәүе, Рухияның ире Ғәбд-Әл-Ғүззә. Ислам тарихында ул Әбү-Ләһәб ҡушаматы менән билдәле. "Йәһәннәм утында яндырыласаҡ кеше" тигәнде аңлатҡан был ҡушаматты уға Мөхәммәт бәйғәмбәр бирә. Улар араһында дошманлыҡ көсәйгәндән-көсәйә. Әбү Ләһәб рәсми рәүештә ҡатынын айырып, Мөхәммәт бәйғәмбәргә ҡайтарып ебәрә. Рухияға шунда уҡ иң тәүге мосолмандарҙың береһе Осман өйләнә.

**(Дауамы бар).**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

**Йәйге каникулдар башланыу менән уҡыусылар, ата-әсәһенең мөмкинлегенән сығып, ял итергә таралыша. Кемдер ауылға, олатай-өләсәһе эргәһенә ҡайта, кемделер диңгеҙ буйына алып китәләр, бәғзеләр иһә сираттағы уҡыу йылына әҙерләнеү, ата-әсәһенә саҡ ҡына булһа ла ярҙам итеү маҡсатынан ваҡытлы эшкә урынлаша. Хәйер, балаларҙың эшләүе, йәғни бишенсе семестрҙың һәр ваҡыт хеҙмәт семестры булыуына ла күп ваҡыт үтмәгән. Ғөмүмән, кәрәкме ул хеҙмәт тәрбиәһе? Ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү өсөн М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Айгөл ИГЕЛЕКОВАға мөрәжәғәт иттек.**



# ЭШЛӘГӘНЕҢ - МИНЕҢ ӨСӨН...

## өйрәнгәнең - үҙең өсөн

➔ **Борон-борондан баланы тәрбиәләүҙә хеҙмәт төп урындарҙың береһендә торған. Бөгөн иһә балалары эшләп аҡса тапҡан ғаиләләр - етешһеҙ ғаилә һанала. Һеҙҙең өсөн нимә ул хеҙмәт тәрбиәһе?**

- Беҙҙе атай-әсәйҙәр хеҙмәт менән тәрбиәләне. Шуның өсөн уларға рәхмәтлебеҙ, сөнки тормошта юғалып ҡалмаҫҡа өйрәткәндәр. Бер ваҡыт әсәйем йөн ойоҡ ямарға өйрәтергә булды. Мин көләм: "Һә" тигәнсе бәйләп кейҙерермен әле балаларыма, бик булмаһа, һатып алырмын, ямап ултырмаҫмын", - тимен. "Тормошта бөтә эште белергә кәрәк, шуға өйрәтәм", - тине әсәй. Уның шул һүҙҙәрен һаман иҫләйем. Бөгөн ойоҡ ямап киймәһәк тә, был үҙенә күрә тәрбиә булған бит. Балалар бәләкәй саҡта шуҡ була, тиктормаҫтар, ойоҡто ла тетеп кенә һалалар. Декрет ялында ултырғанда, аҡса наҡыҫ булған саҡта, ямап ойоҡ та кейҙерәһең икәненә инандым. "Эшләгәнең беҙҙең өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн", - тип өйрәтте беҙҙе атай-әсәйҙәр. Мин дә хәҙер балаларыма шулай тием. Эшләп тапҡан ҡәҙерлерәк тә була тағы, бәрәкәтле лә. Бала шуны аңларға тейеш, минеңсә.

➔ **Үҙегеҙҙең балаларығыҙҙы нисә йәштән эшкә өйрәттегеҙ? Ниндәй генә хәл-торошта ла улар ас булмаясаҡ, тип әйтә алаһығыҙмы?**

- Балаларҙы хеҙмәткә бәләкәйҙән өйрәтәбеҙ. Улым БДУ-ның 1-се курсын тамамланы, юридик факультетта түләп уҡый. Был факультетта 250 - түләүле, 20 генә бюджет урыны булды. Балабыҙ гел 5-кә генә өлгәшә, тырыш, төрлө сараларҙың уртаһында ҡайнай. Рәсәй кимәлендәге олимпиадала тарих буйынса 3-сө урын алды. Мәскәүгә суд приставтарының барлыҡҡа килеүенә, үҫеш тарихына, хәҙерге эшмәкәрлегенә арналған бәйгегә фәнни эшен ебәргәйне. Ул лайыҡлы тип табылып, Башҡортостан Республикаһының баш приставы И. Мәхмүтов үҙе БДУ-ға килеп, улыбыҙға Маҡтау ҡағыҙы тапшырҙы. "Студент яҙы" фестивалендә лә уңышлы сығыш яһаны, республика кимәлендәге фәнни конференцияларҙа ла ҡатнаша. Төрлө яҡлап әүҙем. Эшкә лә тырыш. Уҡыуына түләргә аҡса ла эшләй. Ауылда кемгәлер ер ҡаҙыша, ҡойма бояша, төҙөлөш эштәрендә ҡатнаша. Йәйге каникул булыуына ҡарамаҫтан, үҙе аҡса эшләп, инглиз телен камиллаштырыу өсөн программа һатып алып шөғөлләнә, спорт ярата. Шул уҡ ваҡытта автомобиль йөрөтөүгә таныҡлыҡҡа ла уҡып йөрөй. Балаларыбыҙ баҡсабыҙҙа ла тырышып емеш-еләк үҫтерә. Ҡыҙым еләк, ҡара ҡарағат йыйып һата. Картуф күмәләр, ҡый утайҙар. Ҡыҙым да, улым да ҡышҡылыҡҡа төрлө ҡайнатмалар, салаттар ябышырға ярҙам итә. Миндек бәйләүҙә лә әүҙемдәр.

Бәләкәй саҡтарында уҡ Яңы йыл бүләге тип, ыршшы аҫтына төрлө бүләктәр һалдыҡ. Ҡыҙыма 5-се класта уҡыған сағында теген машинаһы ултырттыҡ. Ул гимназиябыҙҙа хеҙмәт дәрестәрендә тегергә өйрәнде. Хәҙер ошо шөғөлө ярҙам итә. Уға түшәк кәрәк-ярактарына заказ бирәләр, таҫтамал, ҡулъяулыҡ, яулыҡ, алъяпҡыс тегә. Аятта өләшергә таҫтамалдар өсөн метрлы туҡыма алам да, шуларҙың ситтәрен бөгөп бирә. Ыршшы аҫтына гитара ҡуйғайныҡ, икеһе лә гитара уйнарға өйрәнде. Ғөмүмән, музыкаға икеһе лә ғашиҡ. Өйҙә музыка ҡоралдары булһа, бала ҡасан булһа ла өйрәнә ул. Быны үҙемдән беләм. Беҙҙең өйҙә баян, гармун, синтезатор, фортепиано, ҡурай, ҡумыҙ, мандолина, гитара, балалайка, флейта бар. Уларҙы балаларға байрам бүләге итеп алдыҡ. Музыка баланың күңелен матурлай, тәрбиәләй. Шул маҡсаттан сығып алдыҡ. Ҙурайһалар ҙа, Ҡыш бабайҙан бүләк көтәләр бит балалар. Быйыл ҡыҙыма ыршшы төбөнә тырнаҡ буяр өсөн кәрәк-ярактар, аппарат ҡуйғайныҡ. Хәҙер ошо шөғөлгә өйрәнә. Киләсәктә был уға өҫтәмә килем килтерәсәк тип уйлайым. Үҙен дә бөхтә, матур йөрөтәргә ярҙам итәсәк. Шулай уҡ ҡыҙым бер фирманың селтәрле маркетинг продукцияларын заказ биреп алдыра, таныштарға шуларҙы тәҡдим итә. Был продукциялар араһынан газ плитәһен таҙартҡыстар, порошоктар, һабындар, тәҙрә йыуғыс шыйыҡсалар кеүектәрен күпләп һорайҙар, сөнки улар бик яҡшы сифатлы һәм арзан. Үҙенә күрә был да шөғөл, аҙ булһа ла килем килтерә. Ҡалаға йөрөп уҡығас, юл сығымдарын ҡапларға ярҙам итә. Хәҙер йәштәр беҙгә ҡарағанда күберәк белә: интернет-сауҙанан күп кәрәк әйберҙәр яҙҙырып алалар. Бынан алған әйберҙәр магазиндыҡына ҡарағанда күпкә арзаныраҡ та. Ғаилә бюджетена үҙенә күрә экономия. Йәй көндәре урмандан еләк йыйып һатыу ҙа балаларға бер аҙ аҡса эшләргә ярҙам итә. Мәктәпкә, уҡыуға кәрәк-яраҡ һатып алырға ҡулланалар был аҡсаны. Эшкә балаларҙы бәләкәйҙән өйрәттек, сөнки хеҙмәт аша тәрбиәләү яҡлыбыҙ.

➔ **Атай-әсәй өсөн үҫеп буй еткергән балалар ҙа - бәпес. Уларҙы артыҡ әпәүләйбеҙ түгелме?**

- Бала һәр ваҡыт, нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ата-әсәгә бала булып ҡала инде. Шулай ҙа хәҙерге балалар элеккеләрҙән айырыла. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, күптәре етеш ғаиләлә үҫеп, хеҙмәткә өйрәнмәйҙәр. Һуңынан тормошта нимә кәрәк булыуын белмәйҙәр, тормошҡа ҡулайлаша алмай ыҙалайҙар. Ҡыҙ кеше әсәһенең белгәнен өйрәнергә тейеш, малай кеше атаһынан өйрәнеп үҫһен. Балаларҙы артыҡ әпәүләргә ярамай. Сөнки һуңынан тормошта ҡыйын буласаҡ, эргәндә гел генә атай-әсәй ҙә булмаясаҡ. Тормош алда нимә әҙерләгәнен берәү ҙә белмәй, бәлки, ойоҡ ямарға ла кәрәк булыр...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

✓ **Төплө белемле, киң ҡарашлы, талапсан уҡытыусы, крайҙы өйрәнеүсе, башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын йыйыусы булараҡ та билдәле булған Арыҫланбәк Әлимғолов.**



УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ

# МӨҒӘЛЛИМЛЕК -

## мәғрифәтсе олатайҙарым аманаты

**Бөйөк мәғрифәтсе-шағир Аҡмулла заманында халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн борсолоп, "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән оран ташлаған. Бөгөнгө көндә уҡыу, ғилем алыуҙың айырым бер кеше өсөн генә түгел, ә тотош халыҡтың киләсәге өсөн бик мөһим шарт булыуын бер кем дә инҡар итмәй. Ә кем булған һуң халыҡҡа белем нуры сәсеүсе, донъя мәҙәниәте байлыҡтары менән таныштырыусы, яңы, быға саҡлы күрмәгән үрҙәргә әйҙәүсе кешеләр? Әлбиттә, мәғрифәтсе-уҡытыусылар.**

Алдымда "Ағиҙел" журналының 1999 йылдағы 9-сы номеры ята. Унда журналист Дәүләт Мәһәҙиевтың аталы-уллы Әлимғоловтарҙың халыҡ алдындағы хеҙмәтен ҙурлап яҙылған "Ал да нур сәс халҡыңа" тигән мәҡәләһе баҫылған. Ул мәҡәләнән алыҫ ата-бабаларымдың йылыһы бөркөлгәндәй. "Егерме-егерме биш йыл элек был ауылда, хатта Сәфәр улысында, бер генә лә урыҫса уҡыған кеше булмаған". Был юлдарҙы бынан 120 йыл элек, 19-сы быуат аҙағында минең олатайымдың олатаһы Арыҫланғәли Әлимғолов яҙып ҡалдырған. "Училище асылғас, урыҫса башланғыс белем алған башҡорт малайҙарының күпселеге уҡыуын дауам итер өсөн фельдшерҙар мәктәбенә, уҡытыусылар семинарияһына, гимназияларға уҡырға инде, ҡайһы берәүҙәр училище тәьҫирендә университет белеме алды", - тип яҙған 19-сы быуат аҙағында күренекле уҡытыусы Арыҫланғәли Әлимғолов. Кисәге уҡыусыларының уңыштарына ысын күңелдән һөйөнөп, ғорурлыҡ тойғоһо кисерергә хоҡуғы булғандыр шул оло педагогтың.

Арыҫланғәли Ғәләүетдин улы Әлимғолов - заманында билдәле булған башҡорт мәғрифәтселәренең береһе, әсәйем яғынан минең олатайымдың олатаһы. Ул 1845 йылда Стәрлетамаҡ өйәҙе Ҡамбулат ауылында зауряд-хорунжий Ғәләүетдин Әлимғолов менән Әскәпъямал Әбдрәшитованың ғаиләһендә тыуған. Ырымбурҙа линейное училище тамамлаған. Училищенан һуң ҡайҙа хеҙмәт иткәне әлегә билдәһеҙ, бәлки, хәрби хеҙмәттә булғандыр, тип фаразлайбыҙ. 1864 йылдан башлап Рәсәйҙә земство хәрәкәте рөхсәт ителә. Урындағы халыҡтан йыйған аҡсаға мәктәптәр, дауахана пункттары асыла башлай. 1876-1880 йылдар тирәһендә Арыҫланғәли Әлимғолов әлеге Ишембай районы Аҙнай ауылында земство мәктәбендә уҡыта. Бындай башланғыс мәктәптәрҙә донъяуи фәндәр русса уҡытыла, ә дин дәрестәрен муллалар уҡыта. Һуңынан олатайыбыҙ әлеге Шишмә районы Сәфәр ауылында рус-башҡорт училищеһында эшләй. Әгәр революцияға хәтле был төбәктән бик күп уҡымышлы кешеләр сыҡҡан икән, тимәк, был уҡытыусылар Арыҫланғәли менән уның улы Арыҫланбәк Әлимғоловтарҙың да тырыш хеҙмәте емеше.




*Ҡара Яҡуп ауылында 1907 йылда төшөрөлгән был фотола Арыҫланбәк Әлимғолов ҡатыны һәм балалары менән.*

Студент саҡта, 1979 йылда, Мостай Кәримдең тыуған яғында Шишмә районы Келәш ауылында студент төҙөләш отряды командиры сифатында мәктәп төҙөүҙә ҡатнашырға тура килде. Ни өсөндөр Келәштән 10 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Сәфәр ауылын барып күреү теләге миндә ныҡ көслө булды. Сәфәрҙе барып күрҙем, тик, ҡыҙғаныс ҡаршы, ауылда иркенләп йөрөп булманы. Ул ваҡытта олатайҙарымдың ул яҡтарҙа ла яҡты эҙ ҡалдырғанын белмәй инем шул.

1897 - 1906 йылдар тирәһендә Арыҫланғәли Әлимғолов тыуған яғында, Ергән ауылындағы земство мәктәбендә эшләй, Ергән улысының старшинаһы булып һайлана. Ил өсөн ҡатмарлы осор. Хөкүмәт Рәсәйҙең үҙәк губерналарынан башҡорт ерҙәренә күсеп килеүсе крәҫтиәндәрҙе урынлаштырыуҙы талап итә, ә башҡорттар быға ҡырҡа ҡаршы була. Ярай әле старшина олатайҙың күңеленә бер йыуаныс - улы Арыҫланбәк уның яратҡан эшен дауам итә, балаларға аң-белем өләшә.

Әлимғолов Арыҫланбәк Арыҫланғәли улы - күренекле педагог, крайҙы өйрәнеүсе, 19-сы быуат аҙағы - 20-се быуат башында йәмәғәт эшмәкәре, башҡорт милли хәрәкәтен ойоштороусыларҙың береһе. Ул 1870 йылдар тирәһендә Ҡамбулат ауылында тыуғандыр, тип уйлайбыҙ. Ҡатыны - Фатима Ниғмәтйән ҡыҙы Стәрлетамаҡ өйәҙе Аллағуват ауылынан (1874?-1938). Варисҭарында һаҡланған мәғлүмәттәр буйынса, Арыҫланбәк олатай Ырымбурҙа линейное училищела уҡып белем алғандан һуң әлеге Шишмә районы Сәфәр ауылында уҡытыусы булып эшләй, 1905-1909 йылдар тирәһендә әлеге Шишмә районы Ҡара Яҡуп ауылында земство училищеһы мөдире (директоры), һуңынан Стәрлетамаҡта ҡала училищеһында, Ергән земство училищеһында уҡыта. Шуныһы үкенесле, бала саҡта олатайым Мөҡәддәс Арыҫланбәк улы менән йыш осрашырға туры килмәне, унан ояла инем. Ғүмеренең һуңғы йылдарында уның менән бер аҙ һөйләшеп ултырырға мөмкинлек булып, олатайымдан ата-әсәһе тураһында әҙерәк һораштырып ҡала алғаныма шатмын. Уның һөйләүе буйынса, Арыҫланбәк Әлимғолов Стәрлетамаҡта уҡытыусы булып эшләгәндә оло абруй ҡаҙана. Ләкин бер аҙҙан өлкән улы Мөҡәддәстең Коля исемле дуҫы менән ҡылған шуҡлығы арҡаһында Стәрлетамаҡтан китергә мәжбүр булалар. Хәл шулай була: малайҙар бер төндө сиркәүҙең колокольняһына менеп, ҡыңғырау һуға. Өс көн ҡасып йөрөгәндән һуң малайҙар өйҙәренә ҡайта. Әлбиттә, уларға ҡайыш эләгә, ә Әлимғоловты эшенән бушаталар.

Төплө белемле, киң ҡарашлы, талапсан уҡытыусы, крайҙы өйрәнеүсе, башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын йыйыусы булараҡ та билдәле булған Арыҫланбәк Әлимғолов. Уның мәҡәләләре 1912 йылдан башлап Өфөлә сыҡҡан "Ведомости Оренбургского учебного округа" журналында баҫылып килгән ("Башкирские мифологические рассказы","Ведомости Оренбургского учебного округа", №5, 1915 г.) 1914 йылда оло улы Мөҡәддәсте Ҡаҙан университетына уҡырға алып бара олатайым, ләкин унда урынлаштыра алмай. Чиновниктарҙың быға ҡырҡа ҡаршы төшөүен, милләтен мыҫҡыллап, алама һүҙҙәр менән һүгеп, ҡыуып сығарыуын бик ауыр кисерә ул. "Атайым университеттың тупһаһында бик оҙаҡ иланы", - тип һөйләне Мөҡәддәс олатайым. Был ваҡиға, әлбиттә, эҙһеҙ үтмәгәндер, уны сәйәсәткә этәргән бер хәл булғандыр.

1917 йылда февраль революцияһынан һуң сәйәсәт менән ныҡлап шөғөлләнә башлай Арыҫланбәк Арыҫланғәли улы, башҡорт милли хәрәкәтен ойоштороусылар рәтендә була. 1-се (Ырымбур, июль, 1917 йыл) һәм 2-се (Өфө, август, 1917 йыл) Башҡорт ҡоролтайҙарында делегат булып ҡатнаша, 1917 йылдың августа Башҡорт өлкә шураһына (хөкүмәтенә) ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. Петроградта Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылғас, илдә Совет власы урынлаштырыла башлай. Ҡыҙғаныска ҡаршы, 1918 йыл башында Арыҫланбәк Әлимғолов менән булған ваҡиғаларҙы беҙ әлегә аныҡ ҡына белмәйбеҙ. Шуныһы мәғлүм, А. Әлимғолов ер эштәре буйынса Стәрлетамаҡ өйәҙ комитетында эш башлай. Большевиктарҙың синфи сәйәсәте, бигерәк тә ергә хосуси милекте бөтөрөү илдең төрлө төбәгендә ризаһыҙлыҡ тыуҙыра, күптәр Совет власына ҡаршы ҡоралы көрәш юлына баҫа.

Миләүшә ӘХМӘТЙӘНОВА-ҒҮМӘРОВА,
уҡытыусы.
Балтас районы
Иҫке Балтас ауылы.
(Дауамы бар).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Юрматы

Юрматыларға тәлтем, тәтегәс, ҡармыш, юрматы, нуғай юрматыһы йәки арый һәм мишәр юрматылар ҡарай. Тәтегәс ырыуы хаҡында шәжәрәлә төплө итеп яҙылған: "Күпселек башҡорт шәжәрәләре тарихи документ ҡына түгел, ҡиммәтле әҙәби ҡомартҡы ла булып тора. Уларҙа халыҡ тормошондағы әһәмиәтле хәл-ваҡиғалар һәм күренекле шәхестәрҙең тормош биографияһы образлы һәм йәнле тел менән сағылдырылған.

Юрматы ырыуы шәжәрәһе беҙҙең көндәргә килеп еткән башҡорт генеалогик яҙмаларҙың иң боронғоларынан һанала. Шәжәрәнең тәүге варианты XVI быуаттың икенсе яртыһында ырыу башлығы Тәтегәс бей ауыҙынан яҙып алынған. Һижри буйынса 972 йылда (1564-1565) Тәтегәс бей вафат булып ҡалғас, шәжәрә аҡһаҡалдар Аҙнай, Илсекәй Тимер һәм Ҡармышҡа тапшырыла. Тәтегәс бей һөйләгәндә үҙ хәтеренә генә түгел, тағы ла боронғораҡ шәжәрәгә, яҙма сығанаҡҡа таянған булырға тейеш, тип фараз ителә.

Тәтегәс ырыуы тамғаһы тырма рәүешендә, унда һәр дүрт ырыу башҡалары менән тығыҙ бәйле. Һәр бер ырыуҙың күп өйөр-өйөр йылҡылары булған. "Юрматы" һүҙе юҡҡа ғына "юрма ат" тигәндән алынмаған. Юрматылар составында 100-ҙән ашыу ырыу аралары иҫәпләнә.

Юрматыларҙың хандары һәм бейҙәре: Шайбан хан (XIII б.); Бужан хан (XIII-XVI б.б.); Исмәғил хан (XIII-XVI б.б.); Алмалы хан (XIII- XVI б.б.); Юрматы хан (XIII-XVI б.б..); Юрмый бей (XIV-XV б.б.); Ғәли бей (XIV-XV б.б.); Аҡҡусҡар бей (XIV-XV б.б.); Хоҙайбәк (XV б.); Хоҙайбирҙе ҡурайсы (XV һ.б.)

### Меркеттәр

XI-XII быуаттарҙа меркеттәр Байкалдың көньяғында йәшәгән, оҙаҡ ваҡыт монгол ырыуҙары менән һуғышҡан. XIII быуат башында күп кенә монгол ырыуҙары Сыңғыҙханға буйһонған, татарҙар бөтөнләй юҡ ителгән. Уларға тик меркеттәр генә ҡаршы торған. Ҡурҡыу белмәҫ кенәз Тоҡбай бей улдары менән һәләк булғандан һуң меркеттәрҙең төп өлөшө юҡ ителә. Был яугир ҡәбиләнең иҫән ҡалғандары, караиттар, гәрәйҙәр монголдарҙан Урал алдында йәшеренгән. Башҡорттарҙың меңле, ҡырҡ өйлө ырыуҙары уларға инә. Меркеттәрҙең оҙаҡ ваҡыт Өршәк йылғаһы буйында меңлеләр менән күрше йәшәүе уларҙы этномәҙәни планда яҡын иткән. Был ырыу башҡорттары теле Дим һөйләшенең Өршәк диалектынан ныҡ айырыла. Мораҙым, Унғар, Меркет - Башҡортостандың иң ҙур меркет ауылдары һанала. Был ауыл кешеләре Төрөмбәт (Арыҫлан), Әбделкәрим, Мырҙағол, Сумар һ.б. ауылдарға нигеҙ һалған.

(Дауамы бар).

✓ *Туған телдәре менән бер рәттән, рус телен дә берҙәй өйрәнә алып, бер кемдән дә кәм-хур булмаған ватандаштарыбыҙға бер юлы ике, ә сит ил телен дә иҫәпкә алһаҡ, өс телдә өйрәнеү бөткөһөҙ зыян килтерергә тейеш ине бит.*



**(Башы 1-се биттә).**

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙа ла бер ниндәй тыйыуҙар юҡ. РФ Конституцияһы милли берәмектәргә үҙ дәүләт телдәрен иғлан итеүҙе гарантиялай, "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законында Рәсәй Федерацияһында дәүләт теле булған рус теле менән бер рәттән, субъекттар үҙҙәренең дәүләт телен уҡыта алыуы тураһында билдәләнә. Әммә Башҡортостанда был йәһәттән тағы ла бер "ләкин" килеп тыуа: Федераль законда, субъекттарҙың дәүләт телдәре федераль ҡануниәт нигеҙендә генә түгел, ә урындағы закондар нигеҙендә тормошҡа ашырыла, тиелә. "Башҡортостан Республикаһында Мәғариф тураһында" Закондың 6-сы статьяһында иһә, дәүләт теле булараҡ башҡорт теле Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы уҡытыла, тип кенә яҙыла. Тимәк, БР законына тиҙ арала үҙгәрештәр индереү, уны камиллаштырыу зарур.

Бынан тыш, Федераль законда белем биреү мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусы булып атай-әсәйҙәр тороуы билдәләнә. Ә беҙҙә ни өсөндөр улар бары тик балиғ булмағандарҙың законлы вәкилдәре генә тип йөрөтөлә. Эйе, улар законлы вәкилдәре лә, шул уҡ ваҡытта белем биреү процесында әүҙем ҡатнашыусы, белем биреү усағын, белем биреү телен һайлаусы ла. Шуға күрә уҡыусылар менән генә түгел, атай-әсәйҙәр менән әүҙем эшләргә кәрәк.

Бөгөн ауылдарҙа мәктәп - берҙән-бер тигәндәй социаль-мәҙәни объект булып ҡалып бара. Оптималләштереү сәбәбе менән күп урындарҙа балаларҙы йөрөтөп уҡыталар һәм милли мәктәп ҡатнаш мәктәпкә әйләнә. Әммә "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законға ярашлы, мәктәптәрҙең учредитель тәртибендә ойошторолоуы яҙылған. Йәғни, уны кемдеңдер теләге буйынса ғына үҙгәртеү мөмкин түгел. Әгәр документта белем усағы башҡорт гимназияһы тип яҙылып, теркәү үткән икән, ул бер нисек тә ҡатнаш булып китә алмай.

Дөйөмләштереп әйткәндә, революцияға тиклемге лә, совет осорондағы ла, хәҙерге ҡануниәт тә милли белем биреүҙе лә, туған телде өйрәнеүҙе лә тыймай. Шуға күрә, уҡытыусыларға һәм мәктәп директорҙарына атай-әсәйҙәр менән ныҡлы эш алып барырға, ә "Башҡортостан Республикаһында Мәғариф тураһында"ғы республика Законын кисекмәҫтән камиллаштырырға кәрәк.

***Эльвира АЙЫТҠОЛОВА, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе:*** Мин башҡорт теле кәрәкмәй, тигән атай-әсәйҙәр менән килешмәйем, сөнки был өлкәне көйләүсе закондар бар. Туған телдәр беҙҙә вариатив өлөш булараҡ уҡытыла һәм һәр бала үҙенә кәрәкле туған телде һайлай. Дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуға килгәндә инде, әгәр ул дәүләт теле статусында йөрөй икән, ни өсөн уны уҡытыу бәхәс тыуҙырырға тейеш? Законға ярашлы, дәүләт телдәре мотлаҡ рәүештә өйрәнелә. Рәсәйҙә рус теле менән бер рәттән, субъекттың дәүләт теленә эйә ике тиҫтәнән ашыу республика бар. Әгәр ҙә кемгәлер, ни өсөн беҙ башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнергә тейешбеҙ, тигәнгә көслө дәлил кәрәк икән, уларға Рәсәй Конституция Судының билдәләмәһе менән танышыу ҡамасауламаҫ.

Һәр ата-әсә балаһының уңышлы булыуын теләй. Бында шуны ла онотorға ярамай: ҡануниәт буйынса, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ике дәүләт телен дә белергә тейеш. Әгәр атай-әсәйҙәр киләсәктә балаларын төбәгебеҙ

ниндәй хәҡиҡәт сағылыш табыуын иҫегеҙгә төшөрмәксемен: "Республикалар үҙ дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы. Республикаларҙың дәүләт власы органдарында, урындағы үҙидара органдарында, дәүләт учреждениеларында улар Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле менән берҙәй ҡулланыла". Тимәк, оло Ватаныбыҙ - Рәсәйҙең Төп законына ярашлы, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре - рус һәм башҡорт теле - бер үк конституцион-хоҡуҡи статусҡа эйә. "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Федераль закондың илебеҙ халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм ҡулланыу өлкәһенә арналған 6-сы статьяһында милли республикаларҙың дәүләт телдәре үҫешенә бу-

дарҙың һәм милләттәрҙең халыҡ-ара хоҡуҡи азатлыҡтарын нигеҙ итеп алды, Рәсәйҙең федератив дәүләт булараҡ милли республикаларға биргән вәкәләттәрен дә иҫәптән сығарманы. Конституция Суды ҡарарының 4-се пунктында ошо хаҡта бына нисек яҙылған: "4. Государственные языки республик - один из элементов конституционного статуса этих субъектов Российской Федерации, который определяется Конституцией Российской Федерации и Конституцией республики (статья 66, часть 1, Конституции Российской Федерации) и вместе с тем обусловлен федеративным устройством Российской Федерации, основанном на ее государственной целостности, единстве

ционном Суде Российской Федерации" настоящее Постановление окончательно, не подлежит обжалованию, вступает в силу немедленно после провозглашения, действует непосредственно и не требует подтверждения другими органами и должностными лицами". Шулай булғас, РФ Генераль Прокуратураһының туранан-тура ҡушыуы буйынса Рособрнадзорҙың вазифалы функционерҙарының Башҡортостанда башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың законға ярашлы булыу-булмауын тикшереп йөрөүе үҙе үк уларҙың иң юғары кимәлдә ҡабул ителгән юридик аңлатманы белмәүен, йәиһә, белеп тә, билдәле бер сәйәси маҡсатҡа ярашлы эш башҡарыуын күрһәтә.




## Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһе алдынан тағы бер тапҡыр башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың нигеҙле дәлилдәре тураһында һөйләшеп алайыҡ әле...

етәксеһе итеп күрергә теләһә, уға мотлаҡ башҡорт телен өйрәнергә кәрәк!

***Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, журналист, йәмәғәт эшмәкәре:*** Һуңғы арала башҡорт теленең мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ уҡытылыуына ҡаршы сығып, быны уҡыусылар өсөн зыянлы, тип фаразлаусылар күбәйә башланы. Ватандаштар, тип нарыҡларға тел дә әйләнмәгән ҡайһы бер әфәнделәр өсөн бөгөн башҡорт теленән дә ямаһыраҡ һәм ҡурҡыныслыраҡ дошман юҡ, һәм улар уны дөйөм белем биреү ойошмаларында өйрәтеүҙе законһыҙ, тип иҫбатларға маташа. Бынан әллә ниндәй фажиғә яһауҙың кәрәге юҡтыр, әммә йәмғиәттә таратылған ҡотҡоноң бәғзе бер осраҡтарҙа кешеләрҙең аңын томалап, ысынбарлыҡта буталыш һәм хәүефле низағ-конфликттарға юл асыуы билдәле. Бөгөн мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы ниндәйҙер хәүефле күренешкә тиңләүселәр, уға ҡаршы пикет-маҙар ойоштороусылар үҙҙәре халыҡ араһында көсөргәнешлек тыуҙырып, әлегә тиклем Башҡортостанда ныҡ тамырланған милләт-ара татыулыҡҡа, һыйышып һәм килешеп йәшәүгә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерә.

Белеүегеҙсә, беҙ конституцион демократик дәүләттә йәшәйбеҙ һәм беҙҙең һөйләгән һүҙҙәребеҙҙең дә, ҡылған ғәмәлдәребеҙҙең дә хаҡлығы конституция һәм закон тип аталған хоҡуҡи бизмәндә үлсәнеп билдәләнеүе фарыз. Шулай булғас, Рәсәй Конституцияһындағы 68-се статьяның 2-се пунктында

лышлыҡ итеү бурысы юғары дәүләт власы органдары йөҙөндә Рәсәй Федерацияһы вәкәләттәренә ҡарай, тип бар донъяға белдереү ошо фекеребеҙҙе раҫлап тора бит! Тимәк, кемдәрҙеңдер дәүләт теле булған башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сығыуы уның үҙенең ошо Рәсәй законына ҡаршы булыуын, хатта Республика Башлығын ошо законды боҙорға саҡырыуын туранан-тура күрһәтеп тора.

Йәнә, "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закондың Рәсәй халыҡтары телдәрен өйрәнеү һәм уҡытыу нормативтарын билдәләүсе 10-сы статьяһын иҫкә алмайынса булмай. Ошо статьяның 3-сө пунктында "Республикаларҙа дәүләт телдәрен һәм башҡа телдәрҙе уҡытыу уларҙың ҡануниәтенә ярашлы башҡарыла", тип асыҡтан-асыҡ, боронғоса әйткәндә, аҡҡа ҡара менән яҙылған.

Рәсәй закондары нигеҙендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың законлылығын иҫбат итеү генә түгел, уны артабан камиллаштырыу өсөн дә бөтә мөмкинлектәр бар. Һәм иң элек беҙгә ошондай мөмкинлекте Рәсәй Федерацияһы Конституция Судының 2004 йылдың 16 ноябрендә Татарстан Республикаһында татар теленең дәүләт теле сифатында рус теле менән бер күләмдә уҡытылыуының Рәсәй закондарына ярашлы булыу-булмауын билдәләү буйынса ҡабул иткән ҡарары бирә. Әйтергә кәрәк, Рәсәй Конституция Суды юристары ошо ҡарарҙы ҡабул иткәндә граждан-

системы государственной власти, разграничении предметов ведения и полномочий между органами государственной власти Российской Федерации и органами государственной власти субъектов Российской Федерации, равноправии и самоопределении народов в Российской Федерации (статья 5, часть 3, Конституции Российской Федерации)".

Рәсәй Федерацияһының Конституция Суды ҡарарына ярашлы, татар телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу үҙенең конституцион-хоҡуҡи асылы буйынса Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килмәй, сөнки ул уҡыусыларҙың төп дөйөм белем һәм артабан юғарыраҡ кимәлдәге белем алыу хоҡуғына ҡамасауламай. Рәсәй Конституция Суды ҡабул иткән ошо ҡарар Рәсәйҙең бөтә субъекттары өсөн берҙәй ҡулланыла, йәғни, милли республикаларҙа үҙ дәүләт телдәрен уҡытыу өсөн әле һүҙ барған юридик документ иң юғары кимәлдәге һәм туранан-тура мотлаҡ үтәлә торған күрһәтмә ролен үтәй (был юриспруденцияла "прецедент хоҡуғы" тип атала).

Рәсәй Конституция Судының әлеге ҡарарына ярашлы башҡарылған эшмәкәрлек башҡа бер органдарҙың һәм вазифалы кешеләрҙең раҫлауын (тимәк, кемдең дә булһа мөрәжәғәте буйынса тикшереү ойоштороуын да) талап итмәй. Конституция Судының әлеге ҡарарында, һүҙмә-һүҙ тигәндәй, ошолай яҙылған: "Согласно частям первой и второй статьи 79 Федерального конституционного закона "О Конститу-

Иғтибар итегеҙ, йәмәғәт! Был юғары юридик ҡарар шулай уҡ башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу уҡыусының рус телен, математиканы, химияны һәм, ғөмүмән, мәктәптә уҡытылған барса предметтарҙы үҙләштереүе өсөн бер нисек тә тотҡарлыҡ була алмай, тигәнде аңлата бит. Әлбиттә, милли республикаларҙың барлыҡ мәктәптәрендә лә рус теле, йәиһә башҡа предметтар буйынса белем биреүҙең дәүләт стандарттарының теүәл үтәлеүенә өлгәшеү фарыз. Тик был осраҡта мәғариф органдары етәкселәренең, педагогик коллективтарҙың, һәр уҡытыусының үҙенә тәғәйен эшен заманса һәм ижади башҡара алыуы мотлаҡ. Дөрөҫө лә шул: уҡыусыларҙың белем сифатына, ижади һәләттәренең үҫешенә теге йәки был мәктәптең дәрестәр теҙмәһендә татар йәиһә башҡорт теле дәрестәренең булыуы кире йоғонто яһай алмай. Әлеге һығымта күптән инде Рәсәй милли мәғарифы ысынбарлығында кире ҡаҡмаҫлыҡ аксиома булараҡ ҡабул ителә: туған телдәре менән бер рәттән, рус телен дә берҙәй өйрәнә алып, билдәле математик, химик, программист, инженер, яҙыусы, табип, тағы әллә күпме һөнәр эйәләре булып танылған, һәр хәлдә, бер кемдән дә кәм-хур булмаған миллиондарса ватандаштарыбыҙға бер юлы ике, ә сит ил телен дә иҫәпкә алһаҡ, өс телде өйрәнеү бөткөһөҙ зыян килтерергә тейеш ине бит. Юҡ, мәктәптә өҫтәмә телде өйрәнеү балаға зыянлы, тигән фекерҙе бөгөн үҙ аңын үҙҙәре сәйәси сәбәптәр менән томалаған әҙәмдәр генә хуплай.

Йәнә шуны ла иғтибарға алыу фарыздыр. Күптән түгел Йошкар-Ола ҡалаһындағы сығышында Рәсәй Президенты Владимир Путин уҡыусыларға туған телдәрҙе мәжбүри өйрәтеүҙе хупламауын белдергәйне. Был бер теллелектән арына алмаусы, башҡа телдәрҙе күрә алмаусыларға етә ҡалды. Йәнәһе,

В.Путин да улар яҡлы! Әммә һүҙ тап туған телдәр хаҡында ғына бара ине: Президенттың телмәрендә милли республикаларҙың дәүләт телдәре тураһында бөтөнләйгә бер ни ҙә әйтелмәне бит. Ысынлап та, халыҡса әйткәндә, тауыҡ төшөнә тары керә шул.

***Буранбай КҮСӘБАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы:*** Һуңғы айҙарҙа мәғариф өлкәһендә мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ уҡытыу тураһында бәхәстәр көсәйҙе. Уның барышында төрлө фекерҙәр әйтелеүе тәбиғи, ләкин терминдарҙы, уҡытыу технологияһын бутау былай ҙа ҡатмарлы мәсьәләне тағы ла сетерекле итеп ебәрә. Шуға күрә, юридик терминдарҙы, хоҡуҡи нигеҙҙәрҙе ҡулланыуға күсер алдынан бер нисә фекер әйтер инем.

**Беренсенән.** Һәр ата-әсә балаһын ниндәй телдә уҡытырға уйлай, шул телде һайлай ала, ләкин был мәктәптең мөмкинлектәренә ҡарай. Был теләк ата-әсәнең ғаризаһында күрһәтелә.

**Икенсенән.** Һәр ата-әсәнең балаһын мәктәпкә урынлаштырғас, төплө белемгә өмөт итеүе законлы. Был теләгенең тормошҡа ашырылыуы тураһында ата-әсә даими хәбәрҙар булырға тейеш. Бының өсөн уҡытыусылар коллективы менән әүҙем һәм даими бәйләнештә булыу зарур.

**Өсөнсөнән.** Ныҡлы, сифатлы белем биреү, тәрбиәле, тәртипле баланы тормошҡа әҙерләү ата-әсәнең, мәктәп коллективының һәм бөтөн йәмғиәттең (тәү сиратта, мәғариф органдарының, министрлыҡтың, хөкүмәт органдарының) берлектә эшләүен талап итә. Бергә эшләүҙе һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк, юғиһә, йә ғаиләне, йә мәктәпте генә был мәсьәләлә яуаплы итергә тигән фекерҙәр яңғырай. Тик бергә эшләгәндә генә кәрәкле һөҙөмтә буласаҡ.

**Дүртенсенән.** Туған телдә уҡытыу - ул башланғыс синыфтарҙа бөтә уҡыу предметтарын (әлбиттә, рус һәм сит телдән башҡаһын) туған телдә, йәғни, башҡортса уҡытыу, ә урта кластарҙа ҡайһы бер предметтарҙы мәҫәлән, математиканы яйлап русса уҡытыуға күсеү була.

**Һәм тағы бер фекер.** Һәр ата-әсә мәктәпте тамамлағанда балаһының физик яҡтан ныҡ һәм таҙа, киң эрудициялы, төплө белемле, алған белемен тормошта иркен файҙалана белгән, төрлө тормош һынауҙары һәм ауырлыҡтарына ҡаршы икеләнмәй тора алырлыҡ шәхес булыуын теләй. Күпселек ата-әсә ошоноң менән сикләнә. Ләкин тормош күрһәтеүенсә, был ғына аҙ. Мин тағы ла ошоно өҫтәр инем - йәмғиәтте аңлай һәм уға әүҙем тәьҫир итә алырлыҡ гражданин тәрбиәләү ҙә мөһим. Мәҫәлән, СССР-ҙың тарҡалыуы шуны күрһәтте. Төрлө ялғандарға ҡаршы тора алмай, башҡа милләт кешеләренең телен белмәй, менталитетын аңламай, СССР-ҙы тарҡаттырҙыҡ, дөрөҫөн әйткәндә күмәкләшеп быға юл ҡуйҙыҡ. Әлбиттә, СССР-ҙы тарҡатыу өсөн махсус көс һалыусылар ҙа булды. Иҡтисади ҡаршылыҡтарҙы еңерлек етәкселәргә юл бирмәнеләр. Ләкин иң мөһиме - ундай етәкселәрҙе яҡларлыҡ әүҙем граждандар аҙ булды. Миңә нишләптер бөгөн Рәсәйгә ҡаршы ла ошондай хәл-ваҡиғалар ойошторолғандай тойола.

Ошо фекерҙәрҙән һуң ҡабат мәктәпте тамамлаған балаларҙың сифаттарына күсәйек. Мин әүҙем гражданин тигәнгә асыҡлыҡ индерер инем: киң, төплө, белемле, шулай уҡ тарихты белгән, үҙ позицияһы булған, төрлө телдәрҙә үҙенең фекерен әйтә һәм яҡлай белгән шәхесте мәктәп тәрбиәләргә тейеш. Ул саҡта Рәсәйҙең киләсәге ныҡлы, киреһенсә булһа, СССР-ҙың хатаһы ҡабатланыуы ихтимал.

Хәҙер юридик терминдарға һәм ҡайһы бер норматив базаларға күсәйек.

Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы авторҙары уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында киң йәмәғәтселек ҡабул иткән (Рәсәй халҡы ғына түгел, ә элекке СССР халҡының күпселеге аңлаған һәм риза булған) дәүләт телдәре тигән төшөнсәне Рәсәй Конституцияһы проектына индерҙе һәм Конституция референдум юлы менән ҡабул ителде. Рәсәй Конституцияһына ярашлы, Рәсәй составындағы республикалар үҙҙәренең дәүләт телдәрен билдәләй. Ошо нигеҙҙә Башҡортостан Республикаһы Конституцияһында дәүләт телдәре итеп рус һәм башҡорт телдәре билдәләнгән.

Дәүләт теле мотлаҡ бөтә уҡыусыларға ла уҡытылырға тейеш. Ошо фекерҙе Рәсәй Федерацияһының Конституция Суды үҙенең 2004 йылдың 16 ноябрендәге №16-П ҡарары (постановление) менән яҡлап сыҡты. Был документтың йөкмәткеһен бөгөн күптәргә ҡайтанан ҡарарға кәрәк. Шуға күрә, уның йөкмәткеһен ҡыҫҡаса аңлатыуҙы кәрәкле һанайым. Ҡарарҙа күрһәтелгәнсә, гражданин С. И. Хапугин Ҡаҙан ҡалаһы Ново-Савиновский районының мәғариф бүлеге начальнигының татар телен дәүләт теле булараҡ мотлаҡ уҡытыу тураһындағы бойороғон юҡҡа сығарыуҙы һорап, судҡа бирә. Шулай уҡ икенсе судтан ул ошо туралағы уҡыу планының законға ярашһыҙ икәнен билдәләүҙе һорай. Уларҙы бергә дөйөмләштереп, РФ Конституция Суды татар телен дәүләт теле булараҡ Татарстанда рус теле менән бер күләмдә уҡытыуҙы яҡлап сыға. Ҡарарҙа ул түбәндәгесә яңғырай: "...татар һәм рус телдәрен Татарстан Республикаһында мәктәптәрҙә башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениеларында бер үк күләмдә уҡытыуҙы Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына ярашлы тип табырға..." Шулай уҡ 3-сө пунктында "... ҡарар иғлан ителгәс тә үҙ көсөнә инә, башҡа органдарҙың һәм вазифалы кешеләрҙең раҫлауына мохтаж түгел...", - тип әйтелә.

Тимәк, БР Мәғариф министрлығына рус һәм башҡорт телдәрен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы мәктәп программаларына индереүҙе ойошторорға ғына ҡала. Әгәр министрлыҡ ошо эште атҡармай икән, тимәк, үҙе үк закондарҙы һәм РФ Конституция Судының билдәләмәһен һанға һуҡмай, тигәнде аңлата. Тағы бер документты әйтмәй булмай. РФ Конституция Судына ошо хәлгә оҡшаған тағы бер мөрәжәғәт Сыуашстан Республикаһынан яҙыла. Был турала РФ Конституция Судының 2011 йылдың 27 ғинуарындағы 88-0-0 билдәләмәһе (определение) бар. Билдәләмәнең дә ҡыҫҡаса йөкмәткеһен күрһәтеп китеү кәрәктер тип уйлайым. Билдәләмәнең атамаһына иғтибар итегеҙ: "Гражданин Д. Н. Козловтың Сыуаш Республикаһының "Сыуаш Республикаһы телдәре тураһында"ғы законында Сыуаштан мәктәптәрендә сыуаш телен уҡытыуҙы талап итеү уның хоҡуҡтарын боҙа тип яҙған мөрәжәғәтен кире ҡағыу тураһында". Билдәләмәнең (определение) йөкмәткеһенә түбәндәге аңлатма бирелә: Гражданин Козловтың мөрәжәғәте ҡаралмай һәм кире ҡағыла, сөнки был темаға ҡағылышлы ҡарар №16-П 2004 йылдың 16 ноябрендә Татарстандағы хәл буйынса ҡабул ителә, Рәсәй Федерацияһының закондарына ярашлы, Конституция Суды темалары тап килгән осраҡта ошондай билдәләмәләр менән генә сикләнә. Тимәк, РФ Конституция Суды дәүләт телдәрен бөтә балаларға ла уҡытыуҙы ыңғай хәл иткән.

Хәҙер мәктәптәрҙә телдәрҙе уҡытыуҙың ҡайһы бер үҙенсәлектәренә киләйек. Республикала дәүләт телдәре булараҡ башҡорт теле аҙнаға 1 йәки 2 сәғәт өйрәнелә. Уҡытыусылар менән кәңәшләшеп, уртаҡ фекергә килергә ваҡыттыр һәм уны Мәғариф министрлығы үҙенең ҡағыҙҙары менән ныҡытып ҡуйырға тейеш. Миңә ҡалһа, сит тел аҙнаға нисә дәрес уҡытылһа, дәүләт теле лә шунсама сәғәт уҡытылырға тейеш. Сит телдәр тигәс, өҫтәп әйтер инем: айырым уҡытыусылар тәжрибәһен файҙаланып, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы сит телдәрҙе өйрәнеү методикаһы буйынса ойошторорға кәрәк. Китаптарға ла шундай уҡ талап булырға тейеш. Ә башҡорт балаларына (ниндәй телдә уҡыуҙарына ҡарамаҫтан) башҡорт теле туған тел булараҡ ҡына уҡытылырға тейеш. Юғиһә, мәктәптәрҙә, бигерәк тә ҡалаларҙа, башҡорт балаларын уҡытырға тейешле туған тел дәрестәрен дәүләт теле программаһы менән генә сикләү осраҡтары бар.

Августа, йылдағыса, республикала, ҡала һәм райондарҙа мәғариф мәсьәләләренә ҡағылышлы кәңәшмәләр үтә. Уларҙа уҡыу-уҡытыуға арналған башҡа мөһим мәсьәләләр менән бер рәттән, башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ өйрәнеү мәсьәләләре лә күтәреләсәк, тип уйлайым. Кәңәшмәләр эшендә Рәсәй Федерацияһы Конституция Судының үрҙә күрһәтелгән ҡарары һәм билдәләмәһе ҡулланыу табыр, тип өмөтләнәм. Шулай булмаһа, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының байтағының эш урындарына хәүеф янаясаҡ. Бөгөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте, ошоғаса халҡыбыҙҙың оло мираҫы, уның төп асылын билдәләүсе байлығын һаҡлайым, үҫтерәм тип йөрөгән уҡытыусылар дәүләт һәм муниципалитеттар, йәмәғәт ойошмаларының яҡлауына мохтаж.

**(Дауамы 15-се биттә).**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# МИН БАШҠОРТ ТЕЛЕН КҮТӘРӘМ,

## башҡорт теле мине күтәрә...




***Исмәт БИНӘР, Истанбул университетының Евразия институты директоры урынбаҫары:*** Үткән быуаттың 90-сы йылдарында Төркиәлә сит илдәргә сығып уҡыу ҙур популярлыҡ яуланы. Тап ошо ваҡытта Рәсәй "ишектәре" лә асылды. Беҙ, бер төркөм төрөк йәштәре, Башҡортостанға юлландыҡ. Урыҫ телен дә, башҡорт телен дә белмәй инек ул ваҡытта. Шул осорҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында башҡорт филологияһы факультеты асылды. Мин тәүге студенттар сафында унда уҡырға индем. Институтты тамамлағас, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында аспирантурала уҡыным. Башҡорт һәм төрөк мәҡәл-әйтемдәре буйынса диссертация яҡланым. Бөгөн Төркиәнең 120 меңдән ашыу студент уҡыған иң ҙур университетында эшләйем. Төрөк йәштәренә башҡорт теленән һабаҡтар бирәм. Дәрестәремдә башҡорт йырҙарын, ҡурай моңон тыңлатып башлап ебәрәм. Был төрөк студенттарына башҡорт мәҙәниәтенә ылығырға, дәрескә иғтибар, ҡыҙыҡһыныу уятырға булышлыҡ итә. Ә үҙем башҡорт йырҙарын тыңлаһам, ҡурай моңон ишетһәм, Башҡортостанды уйлап, унда үткәргән йылдарымды хәтергә төшөрөп, тулҡынланып китәм.

Истанбул университетының филология факультетында егерменән ашыу бүлек бар. Һәр бүлек бындағы факультет кәҙәре, тиһәм, хата булмаҫ. Мин төрки телдәре бүлегендә "Современные тюркские языки" тигән дисциплинаны алып барам. Шулай уҡ Евразия бүлегенә лә башҡорт һәм урыҫ телдәрен индерҙек. Унда башҡорт теле дәрестәрен уҡытам.

Башҡорт телен тәүге йылда аспиранттарға өйрәттем. Дөйөм төрки телдәре хаҡында һөйләнем, шунан ҡыпсаҡ төркөмөн ҡараныҡ та, ҡалған дәрестәрҙе "Был телде белһәгеҙ, ҡалған төрки телдәрҙе аңлаясаҡһығыҙ", тип, башҡорт теленә күсерҙем. Аспиранттарым, магистрҙарым бар. Улар башҡорт теле буйынса диссертация яҙалар. Шулай ҙа уҡыусыларымдың төп өлөшөн бакалаврҙар тәшкил итә. Улар башҡорт телен бик теләп өйрәнә.

Әлеге ваҡытта ентекләп фән менән шөғөлләнәм. Башҡорт грамматикаһы буйынса китаптар яҙам. Төркиәт буйынса конференцияларҙа ҡатнашырға тырышам. Уларҙа мотлаҡ башҡорт телендә сығыш яһайым. Бер нисә йыл элек Ҡырғыҙстанда төркиәт буйынса ғилми конгресс үтте. Ҡырғыҙстандан бер профессор өс телдә - рус, ҡырғыҙ һәм төрөк телдәрендә сығыш яһаны ла, сығышының аҙағында: "Бына мин һеҙҙең телдә һөйләшәм, әйҙәгеҙ, берегеҙ булһа ла беҙҙең телдә өндәшегеҙ", - тип Төркиә ғалимдарына саҡырыу ташланы. Беҙҙекеләр аптырап ҡалды. Ошо ваҡытта минең докладыма сират еткәйне. Сығышымды башҡорт телендә яһаным. Ҡырғыҙ профессоры: "Һеҙ өйрәнеүгә иң ауыр булған төрки телдәренең береһен һайлағанһығыҙ, рәхмәт!" - тине һәм һоҡланыуын белдерҙе. Бына шулай, мин башҡорт телен күтәрәм, башҡорт теле мине күтәрә. Башҡорт теленән башҡа, рус телен дә яҡшы беләм. Ғөмүмән, башҡорт телен ныҡлап өйрәнәйем тиһәң, рус телен белмәйенсә булмай. Сөнки күп фәнни хеҙмәттәр рус телендә яҙылған. Ә төрөк теле менән башҡорт телен белеүем арҡаһында төрки тел төркөмөнә ҡараған бөтә телдәрҙе аңлайым, аралашам. Шуға эш буйынса анкета тултырғанда "Ниндәй телдәрҙе беләһегеҙ?" тигән графаға утыҙлаған телде яҙып ҡуям.

Бер саҡ Төркиәнән Өфөгә самолетта осоп килгәндә бер кеше менән аралашырға тура килде. Милли телдәр хаҡында һүҙ сыҡты. Ул юл буйы башҡорт теле, уны уҡытыуҙың әһәмиәте хаҡында тылҡыны. Мин: "Әйҙә һуң улай булғас башҡортса аралашайыҡ", - тинем. Ул аптырап китте һәм: "Мин башҡортмон, ләкин башҡортса белмәйем", - тине. Нисек итеп кеше үҙ туған телен белмәйенсә, уны пропагандалай ала? Беренсе өлгө - кеше үҙе. Үҙең туған телеңдә һөйләшмәй тороп, башҡаларҙы уны өйрәнергә өгөтләп буламы? Матур итеп ғаиләңдә башҡортса һөйләш, туғандарың, таныштарың, балаларың менән туған телеңдә аралаш. Әгәр һәр кем ошо ябай ғына ҡағиҙәне үтәһә, яңғырауыҡлы лозунгтарҙың кәрәге лә ҡалмай. Үҙ мөхитеңдә, үҙ ғаиләңдә, хатта урамда туған телеңдә аралашыуҙы бер кем дә тыймай бит. Башҡортостанда уҡып, белем алып, телде үҙләштереп, Төркиәгә ҡайттым, һаман да башҡортса һөйләйем, башҡортса йәшәйем. Ситтә, сит милләттәр араһында йәшәйем, тип, башҡорттар үҙҙәре лә туған телен онотмаһын ине.

✓ ***Көндөҙ ятҡанғамы, төндә йүнләп йоҡлай алманы. Саҡ ҡына күҙе эленһә, һиҫкәнеп кире уяна, ниндәйҙер бик мөһим ваҡиғанан тороп ҡалып, кәрәкле хәбәрҙе ишетмәй ҡуймайым, тигәндәй, һағайып төн сыҡты.***



Телевизор алдындағы уңайлы, йомшаҡ ҡәнәфиҙә Гөлйәүһәр әбей бер нәмә белмәй йоҡлап ултыра. Телевизор ҡарайым, тип килеп ултыра ла, биш-ун минут үтәме-юҡмы, әүен баҙарына юллана. Һуңғы ваҡытта шундай булып китте ғәҙәте. Береһе иплəп кенә килеп телевизорҙы һүндерһә, шундуҡ уяна һала үҙе.

- Нишләп тейәләр икән шул телевизорға? Кеше бында тыңлап ултыра. Күҙем йомоҡ булһа ла ҡолағым асыҡ минең! - тип бурылдап, кире тоҡандыра. Әле лә шулайтып ейәнсәренә һуҡранып телевизорын ҡабыҙғайны ғына, уныһы ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

- Өләс! Һине күрһәтеп торалар!..

Гөлйәүһәр әбей экранға текәлде.

- Ништәп мине күрһәтһендәр тей?.. Кит артабан... Әстәғәфирулла! Аһ-аһ... Минме... Кем?..

Тауышҡа аш бүлмәһендәге ҡыҙы менән кейәүе лә йүгерешеп килде. Гөлйәүһәр әбей телевизор эргәһенә барып баҫҡан. Шәленең бер осо иҙәндә, икенсе осон пульт менән ҡуша тотоп, күкрәгенә ҡыҫҡан. Ә ундағы, бындағыға ике тамсы һыу кеүек оҡшаған оло ҡатын, экран ҙур булғас, Гөлйәүһәр менән, әйтерһең, йәнәш баҫып тора. Аптырауҙың сигенә сыҡҡан әбей бер балаларына, бер экранға ҡарап, баяғы һүҙҙәрен ҡабатлай:

- Аһ-аһ.. Бына һиңә кәрәк булһа... Минме?.. Ҡасан?..

Телевизорҙа, митингыға йыйылғандар, күрәһең, бер төркөм кеше шаулаша. Экрандың аҫҡы һул яҡ мөйөшөндә "Латвия. Рига" тигән яҙыу бар. Ҡаласа кейенгән тулыраҡ ҡәүҙәле "Гөлйәүһәргә" репортер мөрәжәғәт итә:

- Үҙегеҙ менән таныштырып китегеҙ әле? Депортацияға ҡарашығыҙ нисек?

- Мин ошонда, Ригала, тыуып үҫтем, уҡыным, йәшәнем, эшләнем. Ғаиләм бар, ейәндәрем үҫә. Милләтем латыш булмаһа ла, тыуған еремдән, үлтерһәләр ҙә, айырылып китәсәк түгелмен! Бына минең башҡа милләт кешеләрен Латвиянан депортацияләү тураһында фекерем.

- Милләтегеҙ кем? Русмы?

- Мин ҡатнаш ҡан балаһы. Әсәйем - рус ҡыҙы, атайым - башҡорт.

Экрандың был яғында әңгәмәне тыңлап тороусылар һүҙһеҙ ҡалды, дауамын ишетергә әҙерләнеп, ҡолаҡтарын ҡарпайттылар.

- Атайым һуғыштан һуң Ригала биш йыл хеҙмәт иткән, ә әсәйем бында вербовка менән эшкә килгән булған. Шунда улар танышып, бер-берһен яратҡандар. Атайым үҙ иленә ҡайтып киткәндә миңә ике йәш ярым булған. Атайым Риганың азатлығы өсөн...

- Әсәй, тауышы ла һинекенә оҡшаған түгелме? - тип сыҙамай өндәште лә ҡыҙы, әсәһенең ағарған йөҙөн аңғарып, аптечка артынан йүгерҙе. Әбейҙе иплəп кенә урынына ултырттылар.

- Әсәй, тыныслан, әсәй... Мә, дарыуыңды ҡаба һал...

Тел аҫтына валидол һалып, шаңҡығандай ултырһа ла, уйҙары бик теремек, хатта ҡабалан йүгереп китеп бара ине Гөлйәүһәрҙең. Теге экрандағы ҡатын һөйләгәндәрҙе ул да ишетеп үҫте бит, күп тыңланы бала саҡта. Атаһынан. Уны-быны аҙыраҡ аңлап, бала аҡылы аша үткәреп, күҙ алдына килтереп тыңлай торғайны атаһының төнгө хикәйәләрен. Әйе, төнгө. Әсәһе мәрхүмә әйтмешләй, "саҡ ҡына ауыҙына тейһә" төндәрен йоҡламай торғайны атаһы. Уны тыңлайҙармы-юҡмы - барыбер. Гөлйәүһәрҙең бәхетенә, атаһы әлеге "ауыҙына тейһә", хәтирәләр мөксайын сисә.

Күҙ алдына бала сағындағы өй эсе тереләй генә килеп баҫты. Төн. Шәмдең көрәге лә юҡ - ай яҡты. Бөтәһе лә йоҡлай. Мейес алдында атаһы. Йөгәнөкләп ултырып алған да, мөңгөр-мөңгөр килеп, үҙ алдына һөйләй. Ара-тирә мейескә утын ташлай, болғауыс менән ҡағыштырып, көргөп ала. Бындай төндәрҙә мейес башын япмай ул. Ялҡын ялпылдап китһә, уның һылыу йөҙө яҡтыра, сәстәренән, оҙон керпектәренән төшкән күләгәләр битендә шәүләләр уйната. Ҡаранғыны йырып, ҡайҙалар ашҡынған, юғалтҡанын эҙләгән әкиәт егетенә оҡшата Гөлйәүһәр атаһын ошондай сихри төндәрҙә...

- Әсәй, ял итеп ал, - тип өндәште ҡыҙы, - оҙаҡ ултырып, арып киткәнһеңдер.

Кисерештәрҙән дә арығанғалыр, укол да ярҙам иткәндер, Гөлйәүһәр әбей оҙаҡ ҡына йоҡлап алды. Тәне еңеләйеп, зиһене аяҙып уянды шунан. Өҫтөнә ябылған дебет шәлен һирпеп ебәреп тороп ултырҙы. Дебет шәлдән айырылмай ул, шәлһеҙ йоҡламай.

- Кәзәмдә еҫкәп ятмаһам, баҫлығып бөтәм, - тип шаяртҡан була үҙе.

Көндөҙ ятҡанғамы, төндә йүнләп йоҡлай алманы. Саҡ ҡына күҙе эленһә, һиҫкәнеп кире уяна, ниндәйҙер бик мөһим ваҡиғанан тороп ҡалып, кәрәкле хәбәрҙе ишетмәй ҡуймайым, тигәндәй, һағайып төн сыҡты.

Һуғыш бөтөп, һигеҙ йыл үткәс тыуған Гөлйәүһәр атаһының һуғыш тураһындағы тарихтарында үҫте. Былайтып һөйләгәне иҫендә ныҡ ҡалған:

- Ятам, ятам, бераү ҙә күренмәй тегеләр яғында. Өшөп кителенде. Мына бер заман бер нимес күренде. Ҡулына биҙрә тотоп алған, йылғаға һыуға төшөп килә. Йылғаның арғы яғында тегеләр, был яҡта - беҙ. Ике ярҙа ла нейтральный полоса бар...

Атаһы яртылаш тартып, көлдөксәгә һүндереп һалған "кәзә тояғы" итеп төрөп алған махорканың янынан тоҡандыра. Әҙләп-әҙләп кенә тарта, бер-икене һура ла хәбәргә әүрәй. Үҙе һүнгән тәмәкеһен кире көлдөксәгә һала. Шулайтмаһа, төнө буйы тәмәке тартып, "ни житийә" еткермәк кәрәк?

- Абайлабыраҡ ҡараһам, йәш кенә егет. Малай сырайлы ғына. Миңә ун туғыҙ ине, был, күрәһең, минән дә йәш. Тоҫҡаған винтовкамдың көбөгән...

Атаһы йөмкә эҙләп, эргә-тирәһен ҡапшай башлағас, Гөлйәүһәр урындыҡтан тора һалып, килеп йөмкәне табып, уның ҡулына тоттора. Унан хәбәрҙе яҡшыраҡ ишетер өсөн урындыҡ ҡаҙнаһына боролоп ятып ала. Юғиһә, теге йоҡо мискәләре мышнашып тыңларға ирек бирмәй. Өс-дүрт айға бер килеп урыған хәтирәләр төнөндә Гөлйәүһәр шулай ҡалғандар менән аяҡташ ята.

Атаһы йөмкә менән торомбаштарҙы өйә.

- Уяттыммы, ҡыҙым?

- Мин үҙем дә йоҡтамай инем ул. Шунан, атай? - Шыбырҙап ҡына һөйләшәләр атайлы-ҡыҙлы.

- ... Көбәкте аҫҡараҡ төшөрҙөм дә биҙрәһен тишә атып ебәрҙем. Таштаны ла ҡасты...

- Эй, атай, ништәп үҙен үлтермәнең? Үҙенә атырға кәрәк ине!

- Йәлдәнем. Ул да әсә балаһы бит.

- Булһасы. Беҙгә һуғыш баштамаһын үҙҙәре! Мин һинең урыныңда булһам, ул нимесеңдең ҡаҡ маңдайына ебәрер инем әле.

- Минең урында булырға яҙмаһын, ҡыҙым...



## Таңһылыу ВӘЛИЕВА

# КӨТ МИНЕ, АПАЙ!

(Хикәйә)

* * *

Кисә, ял булғас, бөтәһе лә өйҙәләр ине, бөгөн аулаҡ. Тегеләрҙең ҡайһыныһы эштә, ҡайһыһы уҡыуҙа. Гөлйәүһәр әбей креслоға уңайлап ултырып алды ла, ғәҙәтенсә, телевизор тоҡандырҙы, әммә үҙе уға күтәрелеп тә ҡараманы. Йылы томан эсенән йөҙгән һымаҡ ҡына итеп йылап ойоно, күҙҙәре үҙенән үҙе йомолдо.

- ... Вальс "Березка", Дамы приглашают кавалеров!

- Атай, кавалер нимә була ул?

- Әпәт йоҡтамай ятаңмы? Тансавайт иткәндәге егет. Иптәш егет менән увольнениеға сыҡҡайным как рас шул көндә.

- Атай, ә увольнение...

Атаһы иң матур, ҡәҙерле хәтирәһен бүлгеһе килмәйҙер - яуап биреп тормай был юлы.

- Көнө буйы Риганы ҡыҙырҙыҡ. Кискә ҡарай ҡаланың бер ял паркына барып сыҡтыҡ. Оркестр уйнай, кешеләр тансавайт итә (тансавайттың нимә икәнен Гөлйәүһәр белә - киноларҙа күргәне бар)...

- Дамы, приглашайте!

Ҡараһам, туп-тура беҙгә ҡарай бер ҡыҙ килә. Мине саҡырһа ярар ине, тип кенә торам инде. "Можно вас пригласить?" тип, мине саҡырҙы бит был! Тансавайт итеп алып киттек. Исемен һораным. "Катя. Катерина. А вас как звать?" - тигәненә: "Ахмет", - тиһәм, "Из басмачей, наверное? Ой, как страшно", - тип көлә. "Юҡ, - мин әйтәм, - басмач түгел мин, башҡорт". Башҡорттоң бар икәнен дә белмәй икән - аптырай. Ярай, тип уйҙайым эстән генә, танытырмын әле мин һиңә башҡортто. Ғөмөрө онотмаҫлыҡ... Һылыу ғына. Культурно ғына кейенгән. Тауышы ла яғымлы. Сәсе оҙон. Берҙән үреп төшөргән. Ҡырын ғына күҙ менән миңә ҡарап-ҡарап ҡуя. Унан: "А у вас все такие красивые?" - тигән була. "Эйе, - мин әйтәм, - ә иң һылыуы - мин", - тием. Оркестр вальс артынан вальс уйнай. Кис йылы, парк матур. "Вальс "Тоска"! Кавалеры! Ваша очередь!" тип иғлан итәләр. Ә миңә башҡа ҡыҙ кәрәкмәй, үҙе һайлап алған икән, бүтән ыҫҡындырыш юҡ инде...

Шул саҡтарҙан алып күңеленә һеңгән бөтә вальстарҙы атаһы исемләп әйтә: "Дунайские волны", "Амурские волны", "Березка"... Моңло итеп шуларҙы көйләй, нисек итеп Катеринаһын өйөрөлтөп йөрөтә - ҡулдарын шулай хәрәкәтләндерә, яртылаш йомоҡ күҙҙәренән бәхет һирпелә...

Шул вальстарҙың ҡайһылыр береһе атаһын тыңлап бөтмәй йоҡлап киткән Гөлйәүһәрҙең ҡолағында оҙаҡ сыңлай. Тик атаһы көйләгән вальста ниндәйҙер ят өн-ауаздар ишетелеп-ишетелеп ҡуя. Ниндәйҙер иңрәү һымаҡ өндәр. Ул саҡта был һыҙланып ыңғырашҡан, ҡайҙандыр һығылып бына сыҡҡан тауышты Гөлйәүһәр аңлай алмай ине. Бына әле, нисәмә йылдар үткәс, таныны бит Гөлйәүһәр был иңрәүҙе. Таныны, серен асты! Эй, Хоҙайғынам!.. Илау, үкһеү булған бит был! Атаһы Катеринаһын һағынып, мөхәббәтенең татлы хәтирәләре тулҡынында вальс тансауайт иткәндә, әсәһе Зәмһәр илаған! Ығылып ҡына үкһегән, устары менән битен ҡаплап ыңғырашҡан...

* * *

Гөлйәүһәр креслонан тороп уҡ китте, тәҙрәнән-тәҙрәгә йөрөнө.

- Эй, Аллам... Әсәкәйгенәм... Әйтәм, ҡайһы иртәләрҙә күҙәрең ҡыҙарған була торғайны. Әсәкәйем... Ғәфү ит мине...

Әсәһен йәлләүҙән күңеле тулды. Иларһың да шул. Нисәмә йыл йәшәйҙәр, ана, урындыҡ тулып теҙелешеп нисәмә бала та, ә ирең һаман: "Катя ла Катя", - тип ауыҙ һыуын ҡорота. Әле шәп булған икән әсәһе. Башҡа берәй ярһыу бисәгә тап булһа - тегеләй... Шулай ҙа дыулап киткән була торғайны ҡайһы саҡ:

- Алайтып онота алмағас, кит Кәтәңә! Ана бара юлың! Һине мин бисәңдән айыртып бармаған. Минең дә булды, алам, тип артымдан ҡалмай йөрөгән егеттәрем. Мин һөйҙәмәйем бит! Маҡтанмайым да. Ятһаң, ятып йоҡта, йоҡтамаһаң - ана, тышҡа сығып, этеңә мумылда. Һинең хәбәрең танһыҡ булһа, уға танһыҡтыр!

Донъя ла, эш тә баҫҡандыр, мейес алдындағы төнгө "мумылдауҙар" яйлап-әҙләп кәмей барҙы. Атаһы:

- Эҙҙәп табам әле мин уларҙы, - тиһә, әсәһе:

- Бар, тап! Әллә кемдәр тапҡайны, - тип ҡырт киҫә.

- Ҡыҙым ҡалды бит, ҡыҙыма хат яҙам әле, әсәһе черт с ним, - тиһә:

- Яҙ! Утыҙ йыл яҙаң инде... Әллә бар ҡыҙың, әллә юҡ. Кем белә аны. Һине-е-ең хәбәрең... - тип ауыҙын яптыра.

Мәрйә ҡатыны ла, ҡыҙы ла булған икәнде әсәһе Зәмһәр үҙе лә яҡшы белә. Ҡәйнәһе башта уҡ үҙе лә һөйләгән:

- Күҙемдең тереүендә ҡайт, улһәм, кире китерһең, тип хат яҙҙырып тик яттым ҡустымдың ҡыҙынан. Һаман ҡайтмағас, командирына яҙҙырҙым. "Шулай-шулай, ун йыл улымды күргәнем юҡ, атпускаға булһа ла ҡайтарып алығыҙ пажалыста ғына, - тип яҙҙырҙым. -Ҡайтып ҡына ҡулға юлыҡһын, белербеҙ ҡалғанын үҙебеҙ, тип уйҙаным да... Яңғыҙ улымды әллә ҡайҙағы мәрйә ҡулына биреп ҡуйыш юҡ инде", тип көлгән булған ҡәйнәһе.

- Атай, әсәй менән нисек таныштың? Әсәй һин һөйҙәһен тине, - тип хәйләләне Гөлйәүһәр бер төн атаһының теле сиселгән мәлдә көтөп алып.

- Күрше ауылға киске уйынға барғайныҡ, шунда күрҙем әсәңде. Беҙ һуғышта, уйнап һуң действительный хеҙмәттә йөрөгән саҡта матур ҡыҙҙар үҫеп торған. Матур булды әсәң ҡыҙ саҡта. Ҡупшы кәүҙәле. Эй матур бейей үҙе. Тегендә - вальс...

- Тегендәгендә ҡыҫтырмайынса булмаймы? - Бәпәй имеҙеп ятҡан Зәмһәр башын ҡалҡыта.

- Мин гармун уйнайым, былар саң борҡотоп бейей. Исемең нисек, тиһәм, Зәмһәр, ти. Зәңгәр, тинем дә ҡуйҙым мин әсәңде. Күҙе мәрйәләрҙеке кеүек йәшкелт-күк.

- Һинең мәрйәңдеке һымаҡмы? - Әсе тел әсәһе тағы һүҙ ташлай..

- Тәү күргәндән күҙем төштө. Яраттым да ҡуйҙым Зәңгәрҙе.

- Яратҡанға ғөмөр буйы, Катерина, тип илайһың икән.

- Теле низнай инде әсәңдең. Шуға беҙ өндәшмәй ҙә ҡуябыҙ, ҡыҙым, шулай бит?

Атаһы шыбырҙауға күсә.

- Һин эҙҙәп табырһың инде, Гөлйәүһәр ҡыҙым ундағы апа-

*✓ Әхмәт, ҡыҙым булдырыр ул, шәп бит ул минең ҡыҙым, тип маҡтап-хуплап йөрөһә лә, шәп ҡыҙы әсәһен илатҡан ҡатындың белмәгән-күрмәгән ҡыҙын эҙләп тапмаҫҡа һүҙ бирҙе үҙенә шул таңғы ваҡиғанан һуң.*



йынды. Ул тас һин. Һин тыуғас, шаҡ ҡатҡайным. Икегеҙ ҙә тас минең әсәйгә оҡшағанһығыҙ. Исеме - Галя. Галина Алексеевна. Фамилияһы ла минеке түгел ине, хәҙер былай ҙа икенселер фамилияһы.

- Ништәп Алексеевна, атай?

- Катя инәйең мине Алеша, тине лә ҡуйҙы бит. Бер нәмә булып тормаһын, тип ҡурҡҡандыр йә. Репрессированныйҙың ҡыҙы ине...

Уларҙың хәбәрен әсәһенең еңелсә екереүе бүлә:

- Һәй, ике ышпион, етәр, ятығыҙ! Таң атып килә.

Атаһын тыңлап ята торғас йоҡлап киткән Гөлйәүһәр, уның, һүрелгән мейестең көлдөксәһенә башын терәп, һыңҡылдап тороп илап ултырғанында уяныр китте. Ырғып тороп, атаһы янына төшмәксе булғайны ғына, әсәһе, ынтылып, ҡулынан эләктереп алды

- Шеш... Барма. Ултырһын. Кил, эргәмә ят...

Әсәйҙең эргәһе буш. Атай әллә бөтөнләй ятмаған, әллә тәмәке тартып алыу һылтауы менән төшөп киткән.

- Әсәй... Атай нимәгә илай?

Бәй, әсәһе лә илай бит! Талашһалар, тауыштары ишетелер ине. Нимә булған икән?

- Әсәй?...

Зәмһәр ҡыҙының устары менән еүеш сикәләрен, йәшле күҙҙәрен һөртә.

- Атаңды йәлләйем... Үҙе мине ҡосаҡтап ята, үҙе... Мин уға эскәндә генә... Эй, Аллам... Эсеп алһа ғына... Иҫенә... Ҡалайтайым икән... Ә ул айыҡта ла...

Ҡыҙын һыға ҡосаҡлап, эй, иланы шул таңда Зәмһәр. Түгелеп иланы...

* * *

Ғәзиз кешеләренең һыңҡылдап-түгелеп илауҙарына ана шул таңда осраҡлы шаһит булған Гөлйәүһәрҙең бала ғына күңеленә мәңге юйылмаҫ ауыр төйөн булып ятты был ваҡиға. Ҡайҙалыр тәрәнгә төшөп ятты ла бер ҡасан да иремәне лә ҡуйҙы.

Әхмәт, ҡыҙым булдырыр ул, шәп бит ул минең ҡыҙым, тип маҡтап-хуплап йөрөһә лә, шәп ҡыҙы ер аяғы-ер башында ятып та, шойҡаны тейеп, әсәһен илатҡан ҡатындың белмәгән-күрмәгән ҡыҙын эҙләп тапмаҫҡа һүҙ бирҙе үҙенә шул таңғы ваҡиғанан һуң.

- Табырмын мына! Көтөп тор! Кәрәге бар ине, ивет, әсәй?

Зәмһәр ҡыҙын тупылдатып арҡаһынан һөйҙө. Үҙен йыуатырға, хәленә керергә тырышҡан ошо балаға ҡайҙан бирелгәндер сер йәшерә белеү?

- Улай тимә, ҡыҙым. Ҡайҙан беләһең, ул да илайҙыр. Ярар... Аллам тигеҙләр әле.

Әсәһенең ошо аҡылына Гөлйәүһәр һаман аптырай. Ҡалай ғына сабыр булған Зәмһәр-Зәңгәр. Әхмәтен әрләп алһа ла, уның Кәтәһен ҡарғаманы...

- Йәнгенәң йәннәттә булһын ине, әсәкәйем.

Гөлйәүһәр әбей йыйырсыҡлы яңаҡтарынан аҡҡан йәштәрен һөртөп, тәҙрә аръяғындағы донъяны байҡап тора бирҙе лә, ҡырҡа бер ҡарарға килеп, уйҙарын йомғаҡлағандай, шыбырлап ҡуйҙы:

- Үтәрмен атайымдың васыятын, Алла бирһә! Табырмын һине! Көт мине, апай!

ЗАУЫҠ

# КЕШЕ КҮҢЕЛДӘРЕН КҮРЕР ӨСӨН

## Үҙ күңелем, һине оноттом

*Фирүзә АБДУЛЛИНА*



### Килендәр

"Килен кеше була килмешәк",- тип,
Оло ағай мине рәнйетте.
Әйтерһең дә, ошо һүҙе менән
Минең биткә тупраҡ-ер һипте.

Илегеҙҙе һеҙҙең ил иткәнмен,
Ерегеҙҙе һеҙҙең ер иткәнмен,
Ошо ерҙә бөтә уй-эшем.
Ирем менән рәттән хеҙмәт иткәс,
Бөтәгеҙҙе тиңдәй хөрмәт иткәс,
Ниңә булайым мин кәм кеше!

Килмешәк, тип килен рәнйетмәгеҙ,
Ҡыҙ баланың шундай яҙмышы.
Ире ҡайҙа - уның иле шунда,
Шунда тамырҙары, тормошо.

Тыуған ерҙән төшкән ер ҡәҙерле,
Дөрләп яна усаҡ-утыбыҙ,
Беҙ булмаһаҡ, улдарығыҙ менән,
Ҡорор ине ырыу-ҡотоғоҙ.

Ерегеҙгә тоғро хеҙмәт иттем,
Булыр микән, юҡмы ҡәҙерем,
Бар ғүмерем үткәс ошо ерҙә,
Ошо ерҙә булыр ҡәберем!

Тыуған көндәге уйҙар.
Йылдар итәгенә йәбешкән дә,
Әллә ҡайҙа саба ғүмерем,
Тағы ла бер йылым шаулап үтте...
Белдемме һуң уның ҡәҙерен?

Кемдәргәләр ярҙам ҡулы һуҙҙым,
Кемдәрҙеңдер һөрттөм күҙ йәшен,
Йылы һүҙҙәремде йәлләмәнем,
Кемдәрҙеңдер булдым серҙәше...

Башҡаларҙың кәйефтәрен һаҡлап,
Рәнйеш-үпкәләрҙе күп йоттом,
Кеше күңелдәрен күрер өсөн
Үҙ күңелем, һине оноттом.

"Йылмаяһың, бер ҡайғың да юҡ,"- тип,
Әйтеүселәр, һеҙгә аңлатам:
Мин бүлешәм ҡайғы менән түгел-
Мин шатлыҡтар ғына таратам!

Үтһен әйҙә ғүмер, үкенмәйем,
Йыл артынан йылды оҙатам,
Мин яратам ошо фанилыҡты,
Кешеләрем, һеҙҙе яратам!

### Бир, Хоҙайым!

Бир, Хоҙайым, күңел тыныслығы,
Шатланырлыҡ яңы һәр көнгә,
Бир, Хоҙайым, миңә көс,
йәшәрлек
Шөкөр итеп бары бөгөнгә.

Бир, Хоҙайым, һаулыҡ,
Кеше көнлө,
Кеше ҡулдарына ҡалмаҫлыҡ,
Бир, Хоҙайым, байлыҡ,
Хәләл малды
Бер кем минән тартып алмаҫлыҡ.

Бир, Хоҙайым, бөтә яҡындарым
Рәхәтлектә ғүмер кисерһен,
Ғәйептәрем булһа, эй Хоҙайым,
Кемде рәнйеткәнмен - кисерһен.

Бир, Хоҙайым, миңә мөмкинселек
Башҡаларға ярҙам итерлек,
Ҡартлыҡ килеп еткәс, эй Хоҙайым,
Кешем булһын ярҙам көтөрлөк...

Бир, Хоҙайым, таҙа намыҫ менән
Ғүмер юлын йәшәп үтергә,
Бир, Хоҙайым, бурыс-үкенесһеҙ
Фани донъяларҙан китергә.

### Айырылыу

Айырылыу ҡыйын түгел -
Яңғыҙлыҡ ауыр,
Балалар атайһыҙ ҡалһа,
Өҙөлә бауыр.

Донъя йөгөн яңғыҙ тартыу
Үҙәккә үтә,
Үкенестәр, хәтирәләр
Йөрәкте өтә.

Алданған өмөттәр менән
Кителгән күңел,
Оноторлоҡ, баҫылырлыҡ
Түгел шул, түгел!

Һыр бирмәйсә түҙеп була
Кеше алдында,
Йөҙөңдә йылмайыу булһа,
Ағыу - ҡаныңда.

Бер уйлаһаң, айырылырлыҡ
Булмаған сәбәп,
Тәүге аҙым яһап булмай -
Һаҡлайбыҙ әҙәп...

Йоҡоһоҙ төндө оҙатып
Тағы көн тыуыр,
Айырылыу ҡыйын түгел,
Яңғыҙлыҡ - ауыр...

### Бир ҡулыңды!

Бир ҡулыңды! Әйҙә минең менән
Етәкләшеп алтын көҙҙәргә!
Беҙ бит инде күптән күнеккәнбеҙ
Арттан ҡарап ҡалған күҙҙәргә.

...Йәшлегемдең йәшел яҙҙарында
Устарыңа һалдым ҡулымды,
Мөхәббәтең, иғтибарың менән
Яҡтырттың һин барыр юлымды.

Ҡулдар - ҡулда, күҙҙәр - күҙҙә булғас,
Йәйҙәребеҙ булды еләкле,
Минең өсөн һин һаман да шул уҡ:
Яҡын, ғәзиз, ҡайнар йөрәкле.

Бир ҡулыңды! Әйҙә алтын көҙгә!
Күҙҙәреңдә һаман наҙ ғына...
Һинең менән мин һаман да йәп-йәш,
Көҙҙәрем дә, гүйә, яҙ ғына.

### Ҡышҡы юл

Ҡышҡы юл - үҙе бер тормош -
Берсә - таҡыр, берсә - ҡар,
Берсә елдереп үтәбеҙ,
Йә һалабыҙ һуҡмаҡтар.

Борҡоп торған ҡар аҫтында
Боҙлауыҡмы, ҡом микән?
Тормозғамы, әллә газға
Баҫһаҡ, оторбоҙ икән?

Һай, был тормош! Ҡышҡы юл һин!
Ашыҡһаҡ, уңырбыҙмы?
Әллә юлдан ситкә осоп
Һыуыҡта туңырбыҙмы?

Юлдан ҡурҡып, өйҙә генә
Ултырыу - сара түгел,
Хатанан ҡурҡып, йәшәүҙән
Баш тартмаҫ минең күңел.

Тормош юлын шыма ғына,
Булмайҙыр йәшәп үтеп,
Аҙым һайын ҡыйынлыҡтар
Тора һағалап, көтөп.

...Был тормош, гүйә, ҡышҡы юл,
Ә беҙ унда - юлаусы,
Юлды еңә бары ҡурҡмай
Алға табан барыусы!

### Килендәште көндәш була, тиҙәр...

Килендәште көндәш була, тиҙәр,
Бына үҙем дә мин килендәш,
Тик иремдең еңгәй-килененә
Нишләп булайым ти мин көндәш?

Ирем һис кем менән уртаҡ түгел,
Үҙемдеке генә донъям да,
Еңеү-еңелеүҙәр - тик минеке,
Ниҙәр эшләп, нимә ҡылһам да.

Ағай-эне менән бүлешерлек
Уртаҡ атай малым юҡминең.
Бар донъябыҙ - бергә эшләп тапҡан
Хәләл мал ул, хәләл һәр тинем.

Үҙен хөрмәт иткән һәр кешенең
Булыр тәүфиҡ, тәртип, әҙәбе,
Әгәр көндәш икән килендәшем -
Минән булмаҫ бының сәбәбе!

### Бисә-сәсә, имеш...

- Урыныңды бел, һин - бисә кеше,
Һүҙҙәреңде, - тиҙәр, - һин үлсә!
Урынымды мин белергә риза,
Булһа булһын әйҙә һеҙҙеңсә!

Мин ризамын аш-һыу бүлмәһендә
Бешерергә тәмле-татлыны,
Тик бәләкәй өйгә риза түгел,
Теләйем мин ике ҡатлыны!

Балҡып-көлөп торор бөтә донъям,
Йылмайырмын гелән үҙем дә,
Эшкә йөрөп әгәр арымаһам,
Мул аҡсаны тотһам үҙемдә.

Наҙлы һүҙҙәр генә әйтер инек,
Беҙгә генә булһа йылығыҙ,
Беҙ әҙербеҙ ҡатын-ҡыҙ булырға,
Һеҙ үҙегеҙ ирҙәр булығыҙ!

Бисә-сәсә, имеш... Был ирҙәрҙең
Намыҫтары әллә тулаймы?
Беҙ булмаһаҡ, ҡыҙҙар, ярты ир-ат
Аҫҡа үлер ине. Шулаймы?

### Һинең менән килә ҡартайғым!

Бошонмайым, йыйырсыҡтар күрһәм,
Йәшлек үткәнендә юҡ ҡайғым -
Бер хыялым йәшәй күңелемдә:
Һинең менән килә ҡартайғым!

Юҡ-бар өсөн һис бошонмаҫ инем,
Һин янымда саҡта мин - ғәмһеҙ,
Һинең менән миңә һәр саҡ рәхәт,
Һинең менән булмаҫ күңелһеҙ.

Ерҙәр гиҙеп, донъя күрер инек,
Бергә саҡта ожмах йән-яғым...
Бер өмөтөм миңә көс-дәрт бирә :
Һинең менән килә ҡартайғым!

Йәш саҡтарҙы иҫләп көлөшөрбөҙ,
Бала-сағаларҙы һөйләрбеҙ,
Килер көнгә пландар ҡорған булып,
Күңел яҡкан йырҙы көйләрбеҙ...

Сәстәребеҙ, әйҙә, салланһындар,
Булһын әйҙә ҡулда таяғым -
Иң ҙур үтенесем Хоҙайыма:
Һинең менән килә ҡартайғым!

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯРҘАМСЫЛЛЫҠ - ТЫУМЫШТАН

■ Иртәнге ашҡа туңдырма ашағыҙ, шул саҡта һеҙ аҡыллыраҡ буласаҡһығыҙ, ти Токио университеты ғалимдары. Туңдырма кешегә иғтибарын тупларға ярҙам итә һәм, әлбиттә, кәйефен дә күтәрә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар уянғас та туңдырма ашарға тейеш була. Бынан һуң уларҙың аҡыл кимәле компьютерҙа тикшерелә. Икенсе төркөм гәзәттәгесә иртәнге аш ашай. Тәүге төркөмдөң һөҙөмтәләре һәр ваҡытта ла яҡшыраҡ булып сыға. Улар мәсьәләләрҙе тиҙерәк сисә. Мейе әүҙемлеген тикшереп өйрәнгәндән һуң, туңдырма ашағандан һуң юғары тибрәлештәге альфа-тулҡындар әүҙемерәк булыуы асыҡлана. Улар кеше тыныс мәлдә, зиһене асыҡ саҡта күберәк була.

■ Күпселек ғалимдар витаминдар организмға аҙыҡ аша инергә тейеш, тип иҫәпләй. Тимәк, өҫтәмә рәүештә дарыухананан витаминдар һатып алырға кәрәкмәй. Әммә иң ҡыҙығы шунда, әйтәйек, С витаминының тәүлек нормаһын тултырыу өсөн бөгөнгө заман кешеһе 2 килограмм ярым алма ашарға тейеш. Ҡышҡы осорҙа алмаларҙа С витаминының дозаһы яртылаш ҡыҫҡара. Тимәк, беҙ был һанды икегә ҡабатларға тейеш буласаҡбыҙ. Алманы татлы борос менән алыштырырға ла була, беҙгә кәрәкле көндәлек аскорбин кислотаһы 4 килограмм бороста буласаҡ. Йәки ике стакан әле генә һығылған лимон һутында. Тик С витаминынан башҡа, В төркөмө витаминдары ла мөһим. Улар етешмәһә, иң тәүҙә нервы системаһы зыян күрә. В1 витаминының тәүлек нормаһын кило ярым иттән алырға була. Был витамин көрпәле икмәктә лә бар, бик бындай икмәкте магазин кәштәләрендә табыуы ла еңел түгел. В2 витамины менән организмды тәьмин итәм тиһәң, 2 литр һөт эсергә йәки ярты килограмм сыр ашарға кәрәк. В6 витаминының тәүлек нормаһы бер бәйләм банаңда, В8 витамины ярты килограмм йәшел тәмләткестәрҙә була. А витаминының тәүлек нормаһын тултырам тиһәң, 150 грамм аҡ май, йәки 100 грамм ҡыҙыл ыуылдырыҡ, йәки 400 грамм кишер ашарға кәрәк. Ярты килограмм сәтләүектә Е витаминының тәүлек нормаһы.

■ Башҡаларға гел ярҙам итеү һыҙаты кешегә тыумыштан бирелә тигән фекерҙә Кентукки колледжы ғалимдары. Улар әйтеүенсә, альтруист кешеләрҙең баш мейеһе төҙөлөшө башҡаларҙыҡына оҡшамаған. Баш мейеһенең хис-тойғолар менән бәйле өлөшө күпкә әүҙемерәк. Быны тикшереп ҡарау маҡсаты менән ғалимдар үҙенең бөйөрөн ауырыуға биргән 19 кешенең һәм донор булыуға ҡырҡа ҡаршы 20 кешенең баш мейеһен тикшергән. Мейене сканерлаған мәлдә һәр ҡатнашыусы ҡурҡҡан, асыуланған һәм үҙен тыныс тотҡан кешеләрҙең фотоһын ҡараған. Альтруист донорҙарҙың баш мейеһе төҙөлөшөндә айырымлыҡтар булыуы асыҡланған, улар башҡаларҙың бәләһен нығыраҡ кисерә икән.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар ҡурһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан экспертттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

ҒИБРӘТ ӨСӨН

# КӨМӨШКӘСЕ МОНОЛОГЫ

Ай-ай-ай! Был ниндәй тәрән, ҡараңғы, бысраҡ соҡор? Эсе тулы йылан, ҡырғаҡҡа оҡшаш бөжәктәр. Кешеләр ҙә күренгеләй шикелле. Тик бөтәһенең дә йөҙҙәре ҡум-ҡук, шешенешеп бөткәндәр. Был соҡорға нисек һәм ҡасан ҡоланым һуң әле? А-а-а! Ой-ой-ой! Теге йыландар, бөжәктәр аяҡ буйлап өҫкә күтәрелә башланылар. А-а-а!

...Ҡапыл күҙемде асып ебәрҙем. Уф, төш кенә булған икән әле. Ҡалай ҡурҡыныс төш. Әгәр төшөндә ҡурҡышындан йөрәгең ярылһа, уяна ла алмай теге донъяға осорһоң. Һуңғы осорҙа йәш саҡтағы һымаҡ матур ғына төштәр күреп, йылмайып уянған юҡ. Өшкөрһә, бәлки, бөтөр, тип муллаға ла барып ҡараным. Ул ней: "Көмөшкә һатыуыңды ташла! Намаҙ уҡый башла! Шул саҡта ғына матур төштәрең кире ҡайтыр", - тип өҙә һукты. Эйе, әйтеүе генә рәхәт. Артабан мин ниндәй аҡсаға йәшәргә тейеш? Астан үлерһең. Мулла ағайға ошо хаҡта ауыҙ асҡайным ғына, ҡыуҙы ла сығарҙы. Хәйергә 100 һум аҡса һонғайным, алманы. "Кешенең ҡүҙ йәшен түктергән, балалар ауыҙынан тартып алынған, халыҡты иман юлынан яҙҙырған аҡсаң кәрәкмәй миңә. Бар, күҙемдән юғал", тине лә таяғы менән һелтәнеп үк ҡуйҙы. Әләктерә инде, тип ҡурҡтым. Бүтән бармайым уға. Яман төшкә өйрәнеп бөткәнмен, аҡса эшләргә мулла кәрәкмәй, бойҙайым булһын да шәкәрем генә өҙөлмәһен.

Туҡта, берәү туҡылдата түгелме? Эйе, эйе, кемдер килгән. Ә, һин икән, нисә ярты алаһың? Икәү? Аҡсаң теүәлме? Мә, тот. Ҡапҡанан сыҡҡас, баҡса буйлап кит, кешегә күренмә...

Китте. Айнып та етмәгән, үҙе, башым ауырый, тигән була. Төнгө 2-ләрҙә 3 ярты алғайны, әллә йоҡламай эсәләр инде. Аҡсаһы бар, әйҙә, эсһен генә. Яңыраҡ ҡына шабашканан ҡайтты. Аруҡ аҡса апҡайтҡан тип ишеткәйнем. Бер юлы күберәк алмай, йөрөй ботинка туҙҙырып берәү-икәү артынан. Ҡайҙа әле, аҡсаны индерә һалып, йәшереп ҡуйыйым. Бөкләнеп бөткән бит әле. Бысыраҡ-һасыраҡтарын тота ла килә. Ҡайһы тиклем йыйылып китте хәҙер улар. Тиҙ арала район үҙгәнә барып ҡайтмай булмаҫ. Шыма ғына, ҡыштырҙап ҡына торғандарына алыштырып һалып ҡуйырға кәрәк. Тотоп һанап ултырыуы ла күңелле уларҙы. Буяуының еҫе һуң әле...



Келәттә өр-яңы эш ҡорамалдары ла йыйылып китте. Балталарҙың ниндәйе генә юҡ: бәләкәйе лә, ҙуры ла, оҫталыҡ балтаһы ла... Ә көрәк, тырмаларҙы һанап та бөтөрләк түгел. Магазиндан тура тигәндәй минең келәткә килеп ингән һауыт-һабаның, кейем-һалымдың да һанына сығып булмаҫ. Бик нығ күбәйеп китте әйберҙәр. Баҙар апайына алып барып бирергә кәрәк. Әйҙә, һатһын. Уға әҙерәк, миңә күберәк аҡса инер - ике яҡ та отолмаҫ. Симешкә майын, шәкәр, сәй кеүектәрен үҙемә ҡалдырайым. Ҡулдарында аҡсалары булмаһа, нимә генә тотоп килмәйҙәр. Эре малдың ҙур бер ботон 5 кенә ярты ала алыштырғандары ла бар. Эскеләре килгәс, әйҙә, ташыһындар. Талап йәки урлап алмайым әле, үҙҙәре килтерә. Үткәндә берәүһе өряңы электройышҡыһына ике ярты алып киткәйне, бүтән килмәне, онотто инде. Шыр иҫереп йөрөмәһен. Айныҡҡас, ҡайҙа иттегеҙ, тип өйҙәгеләрен борҡоталыр әле. Икенсе электродрелене 3 ярты һорай. Тотторормон өс яртыны, икәү ҙә бик еткән. Уй, ана тағы берәү инеп килә.

- Һаумыһығыҙ! Нисәү? Берәү генә? Биш йөҙлөкмө? Минең сдача юҡ. Бар ыуаҡлат. Ҡайҙа, тиһеңме? Уны мин ҡайҙан беләйем. Улайһа, биш йөҙөнә бөткәнсе ал. Эш ҡала, тиһеңме? Эш ней ғүмере бөтмәҫ. Үлгәндән һуң да өс көнлөк эш ҡала, тиҙәр. Йә, аланмы-юҡмы? Быны шулай. Атыу тораһың натыулашып. Тик баҡса буйлап ҡайт!

Айнып та етмәгән йүнләп, тағы килгән. Йә, мин саҡырып килтерәмме инде уларҙы, үҙҙәре киләләр бит. Кешенең хәленә инмәй булмай. Кисәге ҡалдырып киткән мең һум аҡсаһына аламы, тиһәм, юҡ, тағы тоттора. Онотҡан инде. Иҫе юғалғансы эскәненә мин гәйепле түгел. Миндә ҡалдырмаһа, барыбер төшөрөп ҡалдырып юғалтыр ине. Берәй ингәнендә берәй яртыны буш тотторопсығарырмын. Әй, юҡ, кешеләр һиҙеп ҡалыр. Юҡ, онотоҡ ул мең һумды.

Тағы туҡылдаталар, шикелле.

- Һаумы, һаумы! Тағы симешкә майы тотоп килдеңме? Алмайым, етте һинең майыңды йыйыу. Бар, бар, сыҡ! Башың ауырыһа, мин духтырмы ней? Юҡ, тинем бит. Нығ ауырыйһыңмы ней? Ай әттәгенәһе! Ярай, һуңғы тапҡыр. Нисә шешә килтерҙең? Өсәү? Бәләкәс кенә шешә бирәм. Ике өлкән элек ине, хәҙер бер бәләкәс. Алмаһаң, бар сығып кит. Ярай, тот бәләкәсеңде, бүтән май алмайым, шәкәр алып кил.

Китте. Балалары бишәү. Ҡатыны менән икәүләп эсә торғайнылар, унығы ташлаған, тип ишеттем. Ул ҡатын эсә башлаһа, балалары күршеләрендә. Күршеләре һәйбәт. Ә минең күршеләр, ана, урамға сыҡһам, ашарҙай булып ҡарап торалар. Мин уларҙың малына тейгәнме ней? Минең ихатаға тауыҡтары астан үлер хәлдә үҙҙәре килеп инәләр. Тәмһеҙ тауыҡтары, ҡалаҡҡа элеп алыр һөҙләктәре лә юҡ. Ана, минекеләр һимеҙлектән арттарын һөйрәп саҡ йөрөйҙәр, текмәгә лә осоп менә алмайҙар. Уларға емде типәләп һалмайым. Тип-тип-тип тигәнде белмәй улар. Бер тоҡ бойҙайҙы ялғашҡа ауҙарам да эргәһенә һыу ғына ултыртам. Ямғыр яуып торһа, уныһы ла кәрәкмәй. Тик йөморткаларын ғына йыйып өлгөр. Уларҙың еме лә 10 тоҡ самаһы ғына ҡалып бара, шикелле. Әйтер кәрәк әле, шешәмде бойҙайға алыштырып бирәм, тип.

Тағы ҡапҡа асылды. Әй, теге алкаш икән...

- Нимә, аҡсаң бармы? Ҡайҙан, ҡайҙан? Ә, бәләкәй ҡыҙыңдың эсенә аҡса йыйып барған айыуын урлап "һуйҙыңмы"? Йәтеш иткәнһең, бала саҡтан аҡса йыйып өйрәнмәһен, аҡса кешене боҙа. Уй, ҡайһы тиклем мелочь. Ярай, мә, тот яртыңды. Теге һаҡаллыны күрһәң, әйт, килһен. Утынды ярып бөтмәй ҡасҡанына көймәй, тиген. Аҡсаһы булмаһа, эш бар, тән яҙыр. Яртыһы ла булыр.

Ай әттәгенәһе, бынығы сығып өлгөрмәгән, тағы берәү килә. Теге пенсионер апай икән.

- Ниндәй мең һумлыҡ тағы. Уға алып бөттөң бит. Нисек өс тапҡыр ғына индең? Ә төнөн нисә тапҡыр индең? Ҡапҡанан сыҡҡас, ҡолап, шешәндә ярып, ярсығына ҡулыңды ҡырҡтырып, кире ингәнеңде онотҡонмо? Мин, йәлләп, бинт менән бушлай урап сығарҙым, бинт әрәм итеп. Өҫтәүенә тағы ике ярты тотторҙом. Әле аҡсаң бармы? Ә пенсияң ҡайҙа? Ярай, бирәм, бына яҙып ҡуям тағы. Бөтһә, ин. Өс көндән пенсия бирәләр бит. Яҙҙырып алып тор, әйҙә.

Сығып китте. Үҙе саҡ атлап йөрөй бит әле, үҙе һаман эсә. Барғас, әйҙә, эсһен. Бармай, тип, әллә күпме аҡсалы алыусыларым былай ҙа ташлап бөттө. Күптәре дингә ылыҡҡан - шул мулланың ғына эше.

Һине кеше яратмай, тиҙәр. Яратмаһындар! Миңә уларҙың мөхәббәте кәрәкмәй. Тик ҡапҡама ҙур итеп самогон тип яҙыуҙары ғына йәнде үртәй. Нисә тапҡыр яҙҙылар инде. Нисә тапҡыр буяным. Ауылда бер кемдең дә ҡапҡаһы ул тиклем буяу күрмәгәндер. Буяп та өлгөрмәйһең, яҙа ла китәләр. Яңынан буяп, уныһы кибеп тә өлгөрмәй, тағы яҙалар. Ярай әле, күрше егеттәргә самогонды бушлай бирә башлағайным, яҙыуҙан да ҡотолдом. Ул егеттәр ышанысыс, "Көмөшкә" тиген рейд ойоштороолһа ла, килә һалып әйтеп китәләр. Рейд килһә лә, минең йорттан бер нәмә лә таба алмайҙар. Нисә тапҡыр ихата эсен байҡап сыҡтылар инде. Теге балта оҫтаһына рәхмәт. Йәшерен бүлмә эшләп биргәйне. Уйламаған ерҙә. Ҡайһы тиклем донъямды матурланы ул. Тупрағы еңел булһын. Кешеләр генә, оҫтаны һин үлтерҙең, тип зитҡа тейәләр. Мин уның ауыҙына шәкәрып көмөшкә ҡоймаһым бер ҡасан да. Оҫталыҡ инструменттарын алып, үҙе килә торғайны.

...Йәштәр инеп килә икән.

- Һаумыһығыҙ! Урманға пикникка сығаһығыҙмы? Шашлыҡҡа итегеҙ бармы? Минеке магазиндыҡынан осһоҙ. Нисә кило? Ярай, бына алты кило. Кисә генә һыуытҡысҡа үлсәп һалғайным. Тағы алты яртымы? Алығыҙ бер юлы бер унды, күмәкһегеҙ бит, етмәй ҡалыр. Тағы килергә тура килер. Аҡсағыҙ булмаһа, ҡайтҡас түләрһегеҙ.

Киттеләр. У-у, йәштәр генә күпме аҡса ҡалдырҙы. Уңышлы бара бөгөн көн. Яман төш күреп уяныуыма бер генә сәғәт, ә шул арала күпме аҡса йыйылды. Кем бер сәғәт эсендә ошо тиклем аҡса ала әле. Хәйер, мин генәме һуң инде ошо рәүешле аҡса эшләүсе...

Көмөшкәсенең монологын Рәмил ВӘЛИЕВ яҙып алды.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ҠИБЛА ҠАЙҺЫ ЯҠТА?



**Мәжүсиҙәр ғибәҙәттәрендә йөҙҙәрен күккә, айға, ҡояшҡа, поттарға йүнәлтер булған. Мөхәммәт Бәйғәмбәр аша Ислам дине индерелгәс, мөьминдәргә тәүҙә Иерусалимдағы Әл-Аҡса мәсете яғына йүнәлеп намаҙ ҡылырға ҡушылған. Рәсүлүллаһ сәхәбәләре менән Мәҙинә ҡалаһына күскәндән һуң күпмелер ваҡыт үткәс, төшкө намаҙ мәлендә Аллаһы Тәғәлә илсеһенә Мәккәләге Ҡәәбәгә йөҙөн йүнәлтергә бойороҡ бирә. Шул мәлдән Ҡәәбә мосолмандар өсөн ҡиблаға, намаҙ, башҡа ҡайһы бер ғибәҙәттәр мотлаҡ шул яҡҡа ҡарап ҡылынырға тейеш булған йүнәлешкә әйләнә. Ҡибла итеп тап Ҡәәбә һайланыуының беҙгә билдәле лә, билдәле булмаған хикмәттәре лә бар. Дин китаптарында улар хаҡында ентекләп бәйән ителә.**

Үҙ заманында донъяның төрлө өлөшөндә ҡибланы билдәләү мосолман ғалимдарының мөһим бурысы булып тора. Был үҙ сиратында Ислам дәүләтендә математика, география, астрономия һәм башҡа донъяуи фәндәрҙең үсешенә килтерә. Ғалимдар һәр урынды ентекләп тикшереп, таблицалар төҙөй. Уларҙың тикшеренеүҙәре урындағы халыҡҡа намаҙ уҡығанда, мәсет төҙөгәндә, кешене ерләгәндә, һуғым һуйғанда ҡибланы дөрөҫ билдәләргә ярҙам итә.

Юғары технологиялар ныҡ үҫешкән заманда ҡибланы билдәләү ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырмай. Бары уны билдәләү ысулдарын һәм был ысулдарҙы дөрөҫ ҡулланыу юлдарын белергә кәрәк. Артабан һүҙ шулар хаҡында барасаҡ.

• Компас - ҡибланы билдәлдәү буйынса иң универсаль һәм уңайлы ҡорал булып ҡала. Шуға ла мосолман юлға сыҡҡанда мотлаҡ алған әйбер ул. Әлбиттә, ул дөрөҫ күрһәтмәгән урындар ҙа бар. Мәҫәлән, тимер рудаһы ятҡылыҡтары, эшләп ултырған компьютер, башҡа электрон приборҙар янында компас бер аҙ яңылыша. Ләкин күпселек осраҡта иң теүәл, уңайлы юл булып ҡала.

Ҡибланы компас ярҙамында билдәләү өсөн мәктәптәге география дәрестәрен хәтергә төшөрөргә кәрәк. Компастың магнит уғы һәр саҡ төньяҡҡа ҡарай. Ул ғәҙәттә ҡыҙыл төҫкә буялған була. Уҡтың буялмаған яғы көньяҡҡа ҡарай. Компасты ҡәғиҙәләргә ярашлы ҡуйһаң, 0 градус - төньяҡҡа, 180 градус көньяҡҡа тап килә. Өфөгә ҡарата Мәккә ҡалаһы компас буйынса 194 градуста урынлашҡан. Ҡибла көньяҡҡа ҡараған уҡтан уңға, көнбайышҡа табан ун дүрт градуста була ла инде. Башҡортостан ҡала-райондары өсөн айырма артыҡ ҙур түгел. Республиканың көнсығыш өлөшөндә урынлашҡан Учалы, Белорет, Сибай, Баймаҡ һәм Силәбенең Магнитогорск ҡалалары өсөн ҡибла йүнәлеше 200 градус булһа, көнбайышта урынлашҡан Нефтекамск, Октябрьск ҡалаларында 190 градус тирәһе.

• Ҡул аҫтында ноутбук, нетбук, йә айфон, шулай уҡ интернетҡа сығыу мөмкинлеге булғанда ҡибланы спутник аша билдәләргә була. Махсус сайттарға инеп, кәрәккән йәшәү пунктын яҙыу етә, һә тигәнсә был тораҡ пунктында ҡибланың йүнәлеше күрһәтелә. Хатта йәшәгән йортоңа тиклем йүнәлеште ҡарарға мөмкин.

• Шулай ҙа юлға сыҡҡанда һәр саҡ ҡул аҫтында компьютер, интернет булмай, компасты ла онотабыҙ. Яныбыҙҙа мәсеттәр булһа, уның аша билдәләп була: мәсет михрабы ҡибла яғына йүнәлә. Михраб буйынса билдәләү мөмкинлеге булмаһа, манаралағы ай ҡибланы күрһәтә. Яҡынтирәлә мәсеттәр булмаһа, ҡибла тураһында урындағы халыҡтан һорашырға ҡала. Ҡибланың нимә икәнен күптәр белмәһә лә, уны күрһәтә алырҙай кешеләр бар әле.

• Ҡибланы аяҙ көндә ҡояш аша билдәләргә лә була. Беҙҙә, Башҡортостанда, ҡояш көндөҙгө дүрттәр тирәһендә Ҡибла йүнәлешендә тора. Сәғәт дүрткә етмәгән, йә уны үткән булһа, ҡояштың сәғәтенә ун биш градус күсә барыуын иҫәпкә алып, дүрттә ҡайһы тирәлә буласағын билдәләргә мөмкин. Ҡояштың ҡайһы ерҙә ҡалҡҡанын һәм батҡанын белгәндә, һул ҡулды ҡояш сыҡҡан, уң ҡулды ҡояш батҡан яҡҡа ҡуйып, йөҙ йүнәлгән яҡтан саҡ ҡына уңға боролорға кәрәк.

• Әгәр ҡибла йүнәлешен билдәләргә тырышып та, маҡсатыңа өлгәшә алмаһаң, ни эшләргә? Аллаһы Тәғәлә ҡолдарына ҡыйынлыҡтар теләмәй. Ул кешеләргә үтәй алырҙай ғәмәлдәрҙе генә йөкмәтә. Бар көстө һалып та, ул ғәмәлдәрҙе урынына еткереп эшләй алмаһаң, аҡларлыҡ сәбәптәр булғанда йомшаҡлыҡтар бирелә. Эйе, ҡибланы өҫтә әйтелгән ысулдар менән билдәләй алмағанда, йөрәгең ҡушҡан яҡҡа ҡарап намаҙ уҡыйһың. Һуңынан йүнәлеште дөрөҫ билдәләмәүең асыҡланһа ла, намаҙҙы ҡабаттан уҡыу кәрәкмәй.

**Мораҙым САЛАУАТОВ.**

*ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР*

# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ



Шундай хәлдәр күп: күбебеҙ, әйтәйек, хөкүмәт башлыҡтарына, президентҡа, ҙур түрәләргә, ҡайһы бер кешеләргә оло дәғүәләр ҡуйырға, уларҙы киҫкен тәнҡитләргә яратабыҙ. Түбәндән генә тороп ҡуйылған дәғүә, ҡоро тәнҡит бушҡа һауа ярыу кеүек. Шулар урынына үҙеңде ҡуйып, үҙеңә шуларҙы биреп ҡараһаң ине - нисегерәк килеп сығыр икән? Күтәрмәҫлек дәғүәләр, самаларҙан ашҡан талап, тәнҡит икәнлеге аңлашылыр ине, бәлки.

Һәр кемдең көсөнә, һәләтенә ҡарап ҡуйылған дәғүә, талап, тәнҡит кенә ыңғай көсөнә эйәлер. Эйә булмағаны, үҙеңә ҡайтып, әлбиттә, үҙ һаулығыңа ҡағылыр.

* * *

Хәҙерге медицина күргәнде генә дауалап, күренмәҫ күрерҙе дауаламай ныҡ оттора. Ул тәнде генә дауалап, рухты дауалауҙы онота.

Бер парса иҫкә төшә:

Һыбай юлсы осраған кешенән һорай икән:

- Шунса ҡалаға нисек барырға?

- Һеҙ бит яңылыш икенсе яҡҡа китеп бараһығыҙ,- ти теге кеше.

- Булһын, минең атым шәп әле,- ти һыбайлы.

- Һеҙгә бит икенсе ҡапма-ҡаршы яҡҡа барырға кәрәк, - тип аңлата әлеге кеше.

- Икенсе яҡмы-түгелме, минең юл аҙығым күпкә етерлек әле,- ти быға ҡаршы һыбайлы.

- Атығыҙ көслө, аҙығығыҙ күп булған һайын һеҙ барып етер ҡалағыҙҙан бөтөнләй алыҫлашаһығыҙ дабаһа,- тип аптыраған ти юл өйрәтеүсе.

Шуның шикелле, хәҙерге медицина тәнде дауалау менән генә шөғөлләнеп, рухты дауалауҙы онота, йә был хаҡта әйткән белгестәр кәңәшенә тейешенсә ҡолаҡ һалмай, үҙ яйы менән барыуын белә.

Рух һау булһа, тән дә һауыраҡ булыр ине лә һуң.

## Яман йолалар

Тарихта төрлө яман йолалар булыуын да оноторға ярамай.

Төньяҡ халыҡтарында әүәл бала тыуҙырыр әсәне һалҡын ярангала бер үҙен генә ҡалдырыу ғәҙәте булған. Ҡышҡы һалҡында бер үҙе табып, бала һау ҡалһа, ул йәшәүгә сыҙамлы була, йәнәһе.

Борон ҡай бер ҡәүемдәр, ҡартайып, кеше ҡулына ҡалған ҡарт-ҡороно ситкә, ялан-тауҙарға алып барып ташлап, уларҙан ҡотолор булғандар. Йәнәһе, ғүмере үткән, һаулығы бөткән ҡарт-ҡоро көслөк менән һау ағастан өҙөп ташланырға тейеш.

Боронғо Спарта илендә сибек, ғәрип йә ауырыу тыуған сабыйҙы шунда уҡ диңгеҙгә ташлау ғәҙәте булған. Йәнәһе, үҫер быуындың һаулығын, көсөн һаҡлайҙар. Ә ғәмәлдә иһә бындай халыҡтар, ҡәүемдәр, спартандар физик һәм рухи һәләкәткә юлыҡҡандар.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Ситләшеү һәм битарафлыҡ

Ситләшеү - бөтөнләй ҡыҙыҡһыныу юҡ тигәнде аңлатмай. Нимәндер ситләшергә, әммә кәрәкле һөҙөмтәгә көйләнгән булырға мөмкин. Тап ситләшкән һәм маҡсатына ынтылыусы кешеләр көсөн йәлләмәй уңышҡа табан барыусыларҙы мотлаҡ лайыҡлы награда табырын белә. Ундайҙар: "Бөгөн еңеүсе булмаһам, иртәгә йәки иртәнән һуңға еңәсәкмен", - ти.

Мәҫәлән, һеҙ ҡайҙалыр эшкә урынлашырға булдығыҙ, ти. Унда урынлашыу перспективаһы татлы тулҡынланыу кисерергә мәжбүр итә һәм һөйләшеүгә етди әҙерләнәһегеҙ. Үҙегеҙ тураһында һөйләйәсәк тексты яҙаһығыҙ, уны көҙгө алдында ҡабатлайһығыҙ, осрашыу өсөн яңы туфлиҙар һатып алаһығыҙ, прическағыҙҙы үҙгәртәһегеҙ. Конторағա ярты сәғәт алдан киләһегеҙ, әңгәмә барышында иң яҡшы тәьҫораттар ҡалдырырға тырышаһығыҙ.

Ә һуңынан? Һуңынан өйөгөҙгә ҡайтаһығыҙ һәм ғәҙәти тормош менән йәшәй башлайһығыҙ. Сираттағы курстарға яҙылаһығыҙ, тағы ла ниндәй эшкә урынлашырға мөмкин булыуын асыҡлап, уларға әңгәмәләшеүгә барырға планлаштыраһығыҙ. Әгәр беренсе барған урында эшкә алһалар - бәхетле буласаҡһығыҙ. Алманылар икән, ҡул ҡаушырып, көтөп ултырманығыҙ, һәр саҡ алға барҙығыҙ.

Битараф кеше: "Борсолорға сәбәп юҡ", - тиһә, гелән түшөнкөлөктә йәшәп өйрәнгән кеше: "Әгәр ошо урынға урынлашмаһам, үләм..." - тиәсәк. Ә ситләшкән һәм маҡсатлы кеше: "Нисек кенә булмаһын, күпме ваҡыт талап ителмәһен, яҡшы эшкә урынлашасаҡмын", - тиер.

## Аҡсаға бәйлелек

"Аҡса тураһында байҙарға ҡарағанда ла күберәк уйлаған бер генә синыф бар - улар ярлылар", тигән Оскар Уайльд. Эйе, күптәребеҙгә аҡса ауыр инә. Быны буддистар бик күп һөйләгән "бәйлелек" менән аңлатырға мөмкин. Кешеләр (хатта аҡса әһәмиәткә эйә түгел, тиеүселәр ҙә) төп иғтибарын аҡсаға йүнәлтә, сөнки улар бер үк ваҡытта йәшәү сараһы ла, уңыш символы ла булып тора. Үкенескә күрә, аҡса табырға ынтылышыбыҙ барыһын да юҡҡа сығара ла инде.

Икенсе төрлө итеп әйткәндә, нимәгәлер ни тиклем хис-тойғо менән ҡарайһың, шул тиклем контроль юғалтаһың. Күптәр аҡсаға нык эмоциональ ҡарай - улар уның менән идара итә алмай, тимәк, бер ваҡытта ла тейешле күләмдә аҡсаға эйә булмайҙар.

Ә байҙар тап эмоциональ ситләшеү һөҙөмтәһендә артабан да байый. Улар өсөн аҡса беренсе урында түгел. Улар аҡсаға ҡаныҡмай. Әгәр бөгөн аҡсалары булмаһа, бары тик тынысланырға кәрәк, улар иртәме, һуңмы, барыбер киләсәк икәнлеген белә. Әгәр ҡулыңа аҡса килеп инде икән, уларға битараф булырға кәрәк, сөнки тап шул осраҡта ғына күпмелер өлөшөн һалып ҡуйырға була, иртәгә тағы ла эшләп табасағыңды белеп тораһың бит. Ярлы кешенең байҙан нимә менән айырылғанын бер ваҡытта ла оноторға ярамай: ярлы аҡсалы булғыһы килә, ә бай үҙенең аҡсаһы буласағын белә.

**Эндрю Мэтьюз.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Закондың боҙолоуына, йәки балаларға туған телдәрендә белем алыу өсөн шарттар тыуҙырылмауына улар иғтибар ҙа итмәне. Ә бит туған телдәрҙе өйрәнеү мотлаҡ булған федераль предметтар исемлегендә тора.***



КӨНАУАЗ

# Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһе алдынан тағы бер тапҡыр башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың нигеҙле дәлилдәре тураһында һөйләшеп алайыҡ әле...

**(Башы 1, 8-9-сы биттәрҙә).**

***Рәйсә ҠУЗБӘКОВА, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты белгесе:*** Беҙҙең мәғариф учреждениеларында башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы һүҙ сыҡһа, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына һылтаныуҙы ғәҙәт итеп алдылар. Ә бит Федераль стандарттар туған телдәргә, туған телдә уҡытыуға ҡаршы килмәй, киреһенсә, был өлкәлә асыҡ бурыстар ҡуйыла. Мәҫәлән, "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль закондың төп принциптарының береһе - "халыҡтарҙың этномәҙәни үҙенсәлектәрен һәм традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү". Шуға ярашлы, уҡыу предметтарының йөкмәткеһенә мәктәп һәм этномәҙәниәт компоненты индерелергә тейеш. Башланғыс кластарҙа ул 80:20 нисбәтендә, урта кластарҙа 70:30 нисбәтендә. Үкенескә күрә, республика мәктәптәрендә стандарттың был талабы бөгөн үтәлмәй тиерлек. Уның үтәлешен урындағы мәғариф менән идара итеү органдары тәьмин итмәһә, кем ул эште атҡарыр? Был органдар иң тәүҙә милли республикаларҙағы милли мәғариф сәйәсәте өсөн яуаплы икәнен онотмаһындар ине.

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын индергән сакта иң төп бурыстарҙың береһе итеп балаларға сифатлы белем биреү талабы ҡуйылды. Ә беҙ бөгөн нимә күрәбеҙ? Оптималләштереү, тип, ауыл мәктәптәре күпләп ябылды. Элек гөрләп эшләгән урта мәктәптәр аҙ комплектлы мәктәптәргә әйләнде. Ләкин ауыл мәктәптәренә ябырылған бәләләр быны менән генә бөтмәне. "Дорожная карта развития образования" тигән документ нигеҙендә ауыл мәктәптәрендә эшләүсе белгестәр ҡыҫҡартылды. Һөҙөмтәлә бөгөн аҙ комплектлы мәктәптәрҙә балалар өсөн һөнәр һайлағанда ныҡ кәрәк булған химия, физика, биология, география кеүек предметтарҙы был фәндәр буйынса белгестәр түгел, ә кемгә сәғәт етмәй, шулар уҡыта. Яңы стандарттар буйынса ҡарағанда, балаларҙы төрлө яҡлап үҫтереүгә йүнәлтелергә тейешле дәрестән тыш сәғәттәр (внеурочные часы) тураһында әйтеп тә тормайым, улар ҙа, элек төрлө түңәрәктәр өсөн бүленгән сәғәттәр ҙә юҡ хәҙер. Ошо буламы ни сифатлы белем биреү? Ауыл балаларын наҙан ҡалдырыу бит был.

Ауыл мәктәптәрендә 9-сы класты тамамлаған балаларҙың 70-80 проценты мәктәптә уҡыуын артабан дауам итмәй. Сөнки, берҙән, уларҙың белеме тейешле кимәлдә түгел, икенсенән, уларҙың аңына "Һин БДИ бирә алмайһың" тигән фекер ныҡлы һеңдерелгән. Бөгөн Мәғариф министрлығының, класта 7 бала булмаһа, ул класс ябылырға тейеш, тигән нормаһы арҡаһында аҙ комплектлы мәктәптәр һуңғы сиккә еткерелде. Мәғарифтың ниндәй булырға тейешлеген финансистар хәл итергә тейеш түгел. Мәғарифтың үҫеш юлдарын Закон, Федераль дәүләт белем биреү стандарттары билдәләй. Экономиялау артынан ҡыуып, ошо мөһим документтарҙы онотоп ебәрмәйек. Әлбиттә, был проблема Мәғариф министрлығы кимәлендә генә хәл итерлек түгел, шуның өсөн Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә үҙенең Президиумының бер ултырышын милли мәғариф проблемаларына арнауы өлгөрөп еткән мәсьәлә. Иң тәүҙә аҙ комплектлы мәктәптәргә финанслау системаһы үҙгәрергә тейеш.

Әйтергә кәрәк, һуңғы прокурор тикшереүҙәре лә аптыратты. Тикшереү тик шаблон буйынса үткәрелеп, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға һәм дәреслектәргә генә ҡағылды. Мәғариф тураһындағы закондың 14-се статьяһының боҙолоуына, йәки балаларға туған телдәрендә белем алыу өсөн шарттар тыуҙырылмауына улар иғтибар ҙа итмәне. Ә бит туған телдәрҙе өйрәнеү мотлаҡ булған федераль предметтар исемлегендә тора. Күп урында туған телдәрҙе уҡытыу ойошторолмай, ләкин был факт ни эшләптер тикшереүселәрҙең күҙенә эленмәй. Бөтә республикаға дау һалып тикшереүен тикшергәс, бөтә норматив базаның үтәлеше ҡаралһын ине ул. Юҡһа, был тикшереү республика халҡы тарафынан бер нисә ялыу яҙыусының үтенесен ҡәнәғәтләндереү һымаҡ ҡына ҡабул ителде.

Был тикшереүҙәр йәш быуынды тәрбиәләүҙә туған телдең, халыҡ йолаларының, ғөрөф-ғәҙәттәрен аңламаған, перспективаны күрә белмәгән, тик БДИ һөҙөмтәләре менән генә ҡыҙыҡһынған етәкселәргә етә ҡалды. Уларҙың байтағы ата-әсәләр менән эште рус теле файҙаһына башлап та ебәрҙеләр. "Һеҙҙең балаларығыҙ БДИ бирә алмаясаҡ", тип, ата-әсәләргә баҫым эшләп, "Туған телем урынына рус телен өйрәнергә теләйем" тип, ғаризалар йыйыу башланды. Закондың үтәлешен күҙәтеүсе органдарға һорау бирге килә: нинә ошо факттар уларҙың иғтибарынан ситтә ҡала? Закондың үтәлешен тикшереү ҡорғаны артында башҡорт теленә ҡаршы аҫтыртын көрәш башланманымы икән?

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Ошо фекерҙәрҙе баҫырға әҙерләнгәндә Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры Гөлназ Шафиҡованың "Рәсәй радиоһы Башҡортостан"дың "Мысли вслух" программаһында (1 август, 2017) мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу буйынса килеп тыуған хәл-торошҡа аңлатма биреүе эфирға сыҡты. Ведомство етәксеһе башҡорт теленең республикала мәктәп программаһында мотлаҡ предмет булып ҡаласағын белдерҙе: "Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ 1-9-сы синыфтарҙа аҙнаһына бер йәки ике сәғәт уҡытыла. Уны өйрәнеү Федераль дәүләт белем биреү стандарты сиктәрендә тормошҡа ашырыла һәм БР Конституцияһы, "Башҡортостан Республикаһында Мәғариф тураһында"ғы закон менән тәьмин ителә". Әммә аңлатмаһының һуңында министрҙың, үҙ-үҙенә ҡапма ҡаршы килеп, "дәүләт теле булараҡ башҡорт теле мәктәптең коллегиаль советы ҡарары буйынса уҡытыла", тип ысҡындырыуы ғына хәүеф тыуҙыра. Әгәр дәүләт телдәрен уҡытыу буйынса РФ Конституция Суды үҙ ҡарарын сығарған һәм рөхсәт биргән, дәүләт телдәрен уҡытыу Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптарына тап килә икән, "мәктәптең коллегиаль советы" был ойошманан һәм закондан өҫтөнөрәк булып сығамы?

БР мәғариф министрының ошо уҡ тапшырыуҙағы тағы бер яуабы уйланырға мәжбүр итмәй ҡалмай. Тура эфирға шылтыратыусының: "Беҙҙә ҡасан уҡытыу туған телдә, башҡорт телендә алып барыла башлаясаҡ?" - тигән һорауына Гөлназ Радмил ҡыҙы предмет булараҡ туған телдәрҙе уҡытыу (!) тураһында мәғлүмәт биреү менән генә сикләнде: "Әгәр ата-әсә балаһының туған телде өйрәнеүен һорап мөрәжәғәт итһә һәм синыфта төркөм тупланһа, мәктәп бындай хоҡуҡты тәьмин итергә тейеш. Әйтәйек, 20 бала уҡыған синыфта 10 бала - башҡорт, 10-ыһы татар телен һайлаһа, мәктәп синыфты ике төркөмгә бүлеү мөмкинлеген ҡараясаҡ. Нормативтарға ярашлы, бындай төркөмдә кәмендә 7 бала булырға тейеш. Республикала рус милләтенән булмаған балаларҙың 67 процентының туған телен өйрәнеү мөмкинлеге бар".

Быға тиклем дә министрлыҡ белгестәре, урынбаҫарҙарының төрлө сараларҙа бирелгән һорауҙарға уратып-суратып яуап биргеләгәне сер түгел. Әгәр телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү, уларҙы өйрәнеү, туған телдә уҡытыу мәсьәләләре менән дә шөғөлләнергә тейешле учреждение белгестәре үҙҙәре үк был мәсьәләнең асылын һаманғаса аңламай икән, бәхәстәр, мөғайын, оҙаҡ дауам итер әле. Ә һеҙ был хаҡта ни уйлайһығыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар?

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**яҙып алды.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Август (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (15) дүшәмбе | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 19:33 | 21:03 | 22:33 |
| 8 (16) шишәмбе | 4:10 | 5:40 | 13:30 | 19:31 | 21:01 | 22:31 |
| 9 (17) шаршамбы | 4:12 | 5:42 | 13:30 | 19:29 | 20:59 | 22:29 |
| 10 (18) кесе йома | 4:14 | 5:44 | 13:30 | 19:27 | 20:57 | 22:27 |
| 11 (19) йома | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:25 | 20:55 | 22:25 |
| 12 (20) шәмбе | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:23 | 20:53 | 22:23 |
| 13 (21) йәкшәмбе | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 19:21 | 20:51 | 22:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*


## ИҒЛАНДАР

**4 йәшлек балаға** бер йыл самаһы ваҡытҡа (ярты йылдан һуң отпуск бирелеүе ихтимал) Мәскәү ҡалаһына күсеп китергә, ғаилә менә йәшәргә риза булған, балаларҙы яратҡан, миһырбанлы, бурысына яуаплы ҡараған һәм башҡорт телен яҡшы белгән (хаҡлы ялдағы, йәше бик оло булмаған) **ҡатын-ҡыҙ бала ҡараусы эҙләйбеҙ.** Юл һәм туҡланыу сығымдары - эш биреүсенән. **Эш хаҡы - 20 мең, 2-3 айҙан артыуы мөмкин.**

Педагогик йәки филологик белемле, динде ихтирам иткән, Өфөнән һәм баш ҡалаға яҡын райондарҙан булыусыларға өҫтөнлөк бирелә. **Телефон: 8-987-49-53-350**

* * *

Утерянную **зачетную книжку,** выданную факультетом землеустройство и кадастры Башкирского государственного аграрного университета на имя **Курбанова Ильнура Илшатовича,** считать недействительным.


ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ЙӘШЕН



• Асыҡ урында йәки айырым үҫкән ағас төбөндә тормағыҙ. Йәшен иң юғары нөктәгә ата. Яҡындағы урманға, ауылға барығыҙ. Әгәр ҙә ялан уртаһында ҡалһағыҙ, канау йәки башҡа уйпат ергә, бик булмаһа, яландың түбәнерәк урынына күсеп, башты эйеп ултырырға кәрәк. Ҡомло, ташлы тупраҡ балсыҡлыһына ҡарағанда хәүефһеҙерәк.

• Һыу токты яҡшы үткәрә, шуға ла йәшен мәлендә һыу сығанаҡтарынан йырағыраҡ китергә кәрәк. Йәшен мәлендә һыу инергә, балыҡ тоторға ярамай.

• Телефон - тағы ла бер хәүеф сығанағы. Телефондан һөйләшеү тыйыла, уны һүндереп тороғоҙ.

• Йәшендә металл предметтарҙы - ҡул сәғәтен, сылбырҙарҙы сисеп торалар. Йәйеп тотолған ҡулсатыр ҙа ҡурҡыныс тыуҙыра.

• Өйҙә ишек-тәҙрәләрҙе ябырға кәрәк, ел үтәнән-үтә өрөп тормаһын. Мейес яҡмағыҙ, мейес мөрйәһен томалап тороғоҙ, сөнки төтөн электрҙы яҡшы үткәрә һәм электр разрядын үҙенә тартыу сифатына эйә. Телевизор, радиоалғыс, башҡа электр приборҙарын, компьютерҙы һүндерергә, тәҙрә эргәһендә, шулай уҡ металл предметтар эргәһендә тормаҫҡа.

• Йәшен шары ла ҡурҡыныс тыуҙыра. Уның диаметры 1 метрға етә, һауала иркен хәрәкәтләнеп йөрөй, йәшәү оҙайлығы 30 секундҡа тиклем. Ул янғын, бешеү, ҡайһы осраҡта үлемгә килтергән ҡеүәтле емергес көскә эйә. Ул ҡапыл ғына барлыҡҡа килә һәм шулай уҡ ҡапыл юҡҡа сыға. Ябыҡ йортҡа ла розетка, йоҙаҡ уйымы аша инә ала. Йәшен шарын күрәһегеҙ икән, хәрәкәтләнмәгеҙ, унан ҡасмағыҙ.

✓ Миңлеғәле Шайморатов, Байым ишан, Азаматовтар, Әминевтар шәжәрәләре тармаҡлы булыуы менән генә түгел, уның вариҫтарының ҡул эштәре, оҫталыҡ емештәре күргәҙмәһе менән дә биҙәлгәйне.



АФАРИН!

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ ТАҒЫ ЙЫЙЫН ЙЫЙҘЫ

**Үткән аҙнала Баймаҡ районының Граф күле буйында Башҡорт йәштәре йыйыны үтте. Уны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Мәҙәниәт министрлығы һәм Баймаҡ районы хакимиәте ойошторҙо. Байрамда республика халҡы ғына түгел, Ырымбур, Силәбе, Һарытау өлкәләренән, Татарстан, Ханты-Манси автономлы округынан һәм башҡа төбәктәрҙән дә ҡунаҡтар, йәштәр ҡатнашты.**





"Беҙ йәшнәргә килдек был ергә!" тигән девиз аҫтында үткән Башҡорт йәштәре йыйынын асыу тантанаһында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиев йәштәрҙе һәм ҡунаҡтарҙы Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов исеменән тәбрикләне һәм "Башҡорт йәштәре йыйыны яңы дуҫтар табыу, асыҡ диалогта идеялар менән алмашыу, яңы башланғыстарҙы асыҡлау һәм хуплау майҙансығы булараҡ йыл һайын үткәрелергә тейеш", - тигән һүҙҙәр менән был байрамдың ысын маҡсатын билдәләп, уның даими үткәрелергә тейешле эшлекле сара булыуын раҫлап ҡуйҙы. Башҡа сығыш яһаусылар - Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Илшат Ситдыҡов, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары Зөһрә Рәхмәтуллина, Зариф Байғусҡаров, Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов илебеҙҙең киләсәге булған йәштәргә матур теләктәрен еткерҙе, бындай йыйындарҙың төрлө төбәктең алдынғы ҡарашлы, маҡсатлы, илһөйәр егет һәм ҡыҙҙарының берләшеүенә, башҡорт халҡының милли мәҙәниәтен һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлауына, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалауға, төбәк-ара бәйләнештәрҙе нығытыуға булышлыҡ итеү маҡсатын нығытып ҡуйҙы.

...Бына сәхнәгә йәшәү, тереклек бөркөүсе Урал батыр сыға. Ул үҙ янына төрлө ырыу вәкилдәрен саҡыра, ҡор башлана. Тыуған Башҡортостаныбыҙ автономияһына нигеҙ һалған арҙаҡлы шәхестәребеҙ Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазин, Шәйехзада Бабичтарҙың яҡты киләсәккә әйҙәгән телмәре яңғырай. Шәйехзаданың сөнбөлөстан, нурбостан иленә мәдхиәһе йоҡлаған андарыбыҙҙы уятып, күҙҙәргә йәштәр эркелдерә. Ошо мәлдә башҡорттоң тоғро дуҫы - аттарҙың юрттырып үтеүе аңыбыҙҙы үткәндәргә, аҫаба булмышыбыҙға ҡайтарғандай була...

Йыйын программаһы бына шулай күтәренке рухта башланып, күтәренке рухта дауам итте. Ҡатнашыусылар Баймаҡ егеттәренең "Ылаҡ" тип аталған боронғо төрки халыҡтарының күрһәтмә уйынын тамаша ҡылды. Һыбайлыларҙың биатлон ярышы ла тамашасы иғтибарынан ситтә ҡалманы. Шулай уҡ милли көрәш, грэпплинг, бағанаға үрмәләү, күҙҙе бәйләп көршәк ватыу, йоморҡа һалынған ҡалаҡ тешләп тә, көйәнтәгә һыулы биҙрә аҫып та йүгереү кеүек милли уйындар ҙа үҙ янына байтаҡ халыҡты туплаңы.

Йыйын майҙанында тағы бер сәхнә ҡоролғайны. Байрамдың ҡото, баймаһы булған "Урал бөркөтө" конкурсында ҡатнашыусы батыр, рухлы, зирәк егеттәргә тәғәйенләнгәйне ул. Бында 26 егет үҙ көстәрен һынаны. Егеттәр йәйәнән уҡ атыу, 40 кг-дан ашыу ауырлыҡтағы ташты ырғытыу, 500 метрға йүгереү буйынса таҫыллыҡтарын күрһәтте. Был бәйгелә Учалынан Айназ Низаметдинов Гран-при яуланы.

Халҡыбыҙҙың йылъяҙмаһы вазифаһын үтәгән шәжәрә конкурсына ла ентекле әҙерләнгәйне унда ҡатнашыусылар. Мәҫәлән, Миңлеғәле Шайморатов, Байым ишан, Азаматовтар, Әминевтар шәжәрәләре тармаҡлы булыуы менән генә түгел, уның вариҫтарының ҡул эштәре, оҫталыҡ емештәре күргәҙмәһе менән дә биҙәлгәйне. Бөрйән ырыуының ҡаҡбаштар, балыҡсы араларының быуындар сылбыры шулай уҡ иғтибарҙы йәлеп итте.

Башҡа уйындарҙы, конкурстарҙы ҡараған мәлдә төп сәхнәлә - гүзәллек өлгөһө булған "Зап-заманса-2017" заманса башҡорт кейемдәре фестиваль-конкурсы барҙы. Көндәлек тормошта һәм байрамда башҡорт милли кейемдәр өлгөһөн пропагандалауға ҡоролған конкурста сығыш яһаусы ҡыҙҙарға таң ҡалып тамаша ҡылынды! Ҡыҙҙар ғына түгел, егеттәр ҙә дефилеға сығып, милли орнаменттар һалынған ҡот таҫмаһын (галстуктарҙы) күрһәтте. Был бәйгелә Өфө ҡалаһынан Республика халыҡ ижады үҙәге хеҙмәткәре Алһыу Әбсәләмова "Ҡушъяулыҡ" коллекцияһы менән Гран-при яуланы.

Башҡорт йәштәре активистары йыйынға саҡырылған абруйлы ҡунаҡтар ҡатнашлығында "Киләсәк - беҙҙең ҡулда" тип аталған ҡор ҙа ойоштор҃о. Һөйләшеүҙәрҙән һуң, уңышҡа илткән юлда иң мөһиме - үҙ-үҙеңә ышаныс һәм ихтыяр көсө, тип бер тауыштан билдәләнде. Башҡортостан данын сит илдә танытҡан билдәле спортсылар, төрлө чемпионат һәм турнир еңеүселәре Денис Шафиҡов, Илфат Әмиров, Динар Аҡмырҙин һәм Рәсәйҙең иң көслө кешеләренең береһе Эльбрус Ниғмәтуллин да йәштәр менән автограф-сессия ваҡытында ошо фекерҙе ҡеүәтләне. Әйткәндәй, ҡунаҡтар күрһәтмә сығыштар ҙа тәҡдим итте. Эльбрус Ниғмәтуллин бер үҙе бер-береһенә тағылған 3 еңел автомобилде һөйрәтеп, күңелле тамаша ҡылдырҙы **(һүрәттә)**.

Кискеһен иһә башҡорт йәштәре Радик Юльяҡшиндың, "Заман" этно төркөмөнөң (Мәскәү ҡалаһы), Күгәрсен районының "Байымбәт", "Елмерҙәк" этно-рок төркөмдәренең, Заһир Зәйнетдиновтың сығыштарын кинәнеп тыңланы. Артабан йәштәр "Беҙ башҡортса бейейбеҙ" исемле дәртле дискотекала күңел асты.

**Айгөл ИҘЕЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫЛЫСЛЫ ҠУРҠАҠТЫ...

## һуйыллы батыр һуғып ала

Ҡуштанға ышанма: теленең осо һөт була, теленең төбө ҡорт була.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ни тиклем етеҙерәк хәрәкәт итһәгеҙ йә эш башҡарһағыҙ, шул тиклем нығыраҡ күҙәтеү аҫтына эләгерһең.

**(Джеральд Арпино).**

Холҡһоҙ кеше - ул бер ниндәй ҡағиҙәләрҙе лә һанламаусы кеше.

**(Никола Шамфор).**

Сәнғәт икән - ул һәр кем өсөн түгел, һәр кем өсөн икән - ул сәнғәт түгел.

**(Арнольд Шенберг).**

Үҙ-үҙең булып ҡал. Донъя төп нөсхәләргә табына.

**(Ингрид Бергман).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡоҙоҡтан һалҡын һыу һоҫоп алып эскәндән һуң кеше: "Эҫе көндә һалҡын һыу уртлауҙан да яҡшыраҡ ғәмәл юҡ", тип уйлай. Ошо мәлдә уның эргәһенә һайыҫҡан осоп килә һәм: "Һин бында һыуһын ҡандырғанда ҡыҙың ҡайынлыҡта егет менән күрешергә китте, был күрешеүҙең ни менән бөтөрө билдәле инде: ҡыҙың, мөхәббәт, тип һушынан яҙасаҡ", - тип хәбәр һала.**

**- Йәшлектә мөхәббәттән дә татлыраҡ тойғо юҡ. Ҡартайып, сәстәрең ағарғас, яратыу һуң...- тип яуап бирә уға кеше.**

**Һайыҫҡан яңынан ауылға осоп китә һәм оҙаҡламай тағы бер хәбәр менән әйләнеп килә: "Һин бында һыуһыныңды ҡандырғанда, йортоңа бурҙар төштө һәм бар әйбереңде алып китте", - тип яр һала ул.**

**- Кешегә мохтаж булғанда ярҙам итеүҙән дә изгерәк эш юҡ. Ҡоҙоҡ эргәһендә тотҡарланып, мин ул бурға изге эш эшләнем, тип иҫәпләйек, - ти кеше.**

**Һайыҫҡандың бик тә был кешене борсолорға мәжбүр иткеһе килә, быға сәбәп эҙләп, ул тағы ауылға осоп китә. Бер аҙҙан тағы килә һәм: "Китер алдынан бур һинең йортоңдо ла яндырҙы. Хәҙер йорт урынында бер өйөм көл генә ҡалды", - ти.**

**- Иректән дә яҡшыраҡ нәмә юҡ, - ти кеше. -Мин был ерҙәрҙе күптән инде ҡалдырып китергә һәм донъя буйлап сәйәхәт итергә йыйына инем. Хәҙер мине бында бер ни ҙә тотмай...**

**Шул һүҙҙәрҙе әйткәс, "Юлға сыҡҡанда таяҡтан да яҡшыраҡ дуҫ юҡ" тип уйлап, ҡулына таяҡ ала ла юлға сыға кеше...**

**Эйе, бар нәмәлә лә изгелек һәм яҡшылыҡ күреү, барыһын да Алла ҡушҡан тип ҡабул итеүҙән дә яҡшыһы юҡ шул".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1573/08